ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24-30 декабрь (ақъюлай) 2022

№51 (1041)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һаҡ булығыҙ, Яңы йыл килә!**



3,6

**Матурлыҡ донъяны ҡотҡарыр!**



Был гүзәл зат ҡулындағы иң көслө ҡорал

8-9

**Милли кейемдәргә...**

һөйөү һәм ҡыҙыҡһыныу бар



11

**Ул йылдарҙа ла...**

тылдың фронтҡа хеҙмәт иткәне тураһында



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Илле - итәктән алды, алтмыш - аяҡтан алды, етмеш - йүгән һалды, һикһән - һикегә йыҡты, туҡһан - туңҡайтып һалды, йөҙ өҙөп алды.***

***(Башҡорт халыҡ мәҡәле).***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Ауыл халҡын санкциялар ҡурҡытманы, уларҙың күбеһе хәҙер үҙҙәре етештергән менән туҡлана, тип әйтә алабыҙмы?***



***Әмир ҠУНАҠҠУЖИН, Мәләүез районы:*** 2014 йылда илебеҙгә индерелгән санкцияларҙы һиҙмәй ҡалманыҡ, әлбиттә. Магазинда поляк алмалары, немец кейемдәре, япон автомобилдәре кәмене. Шулай ҙа ул илдәр төҙөгән заводтар бында ҡалды. Ә бына февралдән индерелгәндәре, улары 12 мең тирәһе, аҡсаһын һанап йәшәп өйрәнгәндәр өсөн һиҙелерлек булды. Мәҫәлән, бигерәк тә кемдең иномаркаһы бар, уларға ҡыйыныраҡҡа тура килде, сөнки запас частар юҡҡа сыҡты.

Мин үҙем ауылда йәшәгәс, санкция эҙемтәләрен телевизорҙан ҡарап ҡына беләм, сөнки сит ил техникам юҡ, улар кәрәкмәй ҙә. Баҫыуҙа эшләгән трактор-комбайндар йә беҙҙә, йә Беларуста етештерелә. Ҡыҫҡаһы, ябай халыҡҡа йорт кәрәк-яраҡтарын, косметиканы Рәсәйҙә лә сифатлы эшләп сығаралар. Йылдыҡын йылға еткererлек йәшелсә, емеш-еләк үҫтерәм. Итте лә үҙебеҙҙә етештерелгәнде генә һатып алам.

Алыпһатарҙар форсатты ҡулдан ысҡындырмай, әлбиттә. Тауарға хаҡты арттырғандан арттыра. Тик уның сәбәбен генә бер кем дә аңлата алмай. Мәҫәлән, доллар, евро курсы күтәрелһә, яғыулыҡ-майлау материалдарына ла хаҡ арта, йәнәһе, донъя баҙары шундай талап ҡуя. Доллар, евро курсы төшһә, хаҡтар тағы арта, сөнки, улар әйтеүенсә, сығым күбәйә. Быны аңлап булмай.

Бына ауыл халҡы ғына түгел, ҡаланыҡылар ҙа шатланырлыҡ ваҡиға: күптәр илебеҙҙең 330 миллиард долларлыҡ алтын-валюта резервын ҡулға алдылар тип ҡайғырҙы. Ә Үҙәк банк шул суммаға торошлоҡ илебеҙ һумын баҫа башланы. Һөҙөмтәлә американдар ҡайғыға батты. Шунан башланды ла инде төбәктәргә ярҙам, бәләкәй балалары булған ғаиләләргә субсидиялар биреү һәм башҡалар.

Ә ауылда мал аҫрап донъя көткәндәр өсөн быйан тиҫтә йыл элек күңелһеҙ яңылыҡ индерелгәйне. Йәнәһе лә, малды махсус урынға алып барып һуйырға, уның итен баҙарҙа ғына һатырға... Тик кем инде бер һарығын, ике кәзәһен шунда алып барып йөрөһөн? Ветеринарҙарға, башҡа күҙәтеү органдарына ришүәт биреп, итен һатырға мәжбүр булды инде байтаҡ ваҡыт. Килеменең күпмеһе генә кеҫәһенә инеп ятты икән?

Әле быйа Рәсәйҙе шул Бөтә донъя сауҙа ойошмаһынан сығарырға уйлайҙар. Бик хуп, бик мәслихәт! Әгәр был тормошҡа ашһа, ауыл эшсәндәре элеккесә, малын йорт-ҡураһында һуйып, телгән кешегә һатып аҡса эшләй аласаҡ.

Ҡыҫҡаһы, илебеҙгә көн һайын санкция индереүҙе арттыралар тип ҡайғырырға түгел. Ә һәр әйберҙең, күренештең ыңғай яғын табып, мыжымай ғына шуны файҙалана белергә кәрәк.

Шуныһы иғтибарҙан ситтә ҡалмай: санкциялар, сикләүҙәр ауыл халҡында, киреһенсә, ғәм һәм дәрт уятты. Быйыл күптәр яңынан баҡса үҫтерергә тотондо. Шәхси участкаларҙа етештергәнде һатыуға бәйле яңы үҙгәрештәр ҙә баҡсасыларға ыңғай тәьҫир итте.

## УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ЕГЕРМЕ ЙЫЛ БЕРГӘМЕН

**Яратҡан гәзитем "Киске Өфө"нө 20 йыллыҡ матур юбилейы менән ҡотлайым, тип ҡулға ҡәләм алдым да, уның айырым баҫма булып сығасаҡ тигәнен тәүгә ишеткәнемде иҫкә төшөрөп, ныҡ тулҡынланыу кисереп ултырам. Ул ваҡыт уйҙарыбыҙҙы аныҡ итеп, ҡурҡмай уҡыусыға еткереү, гәзит уҡыусының уйҙары менән тап килерлек фекерҙәр яҙыу осоро ине. Яңы гәзит быйа тап шулай тура, аҡыллы һүҙле булып, беҙ өмөт иткәндән дә яҡшыраҡ булып сыҡты, шөкөр.**



Ошо гәзит менән егерме йыл бергә булыуым менән ғорурмын. "Өфө матбуғат" киоскыһынан беренсе һанын һатып ала ла алманым әле мин. Икенсе һанын алып, уҡып сығып, "Киске Өфө", ҡотлайым һине", тип, хат та яҙып һалдым. Өсөнсө һанында минең ҡыҫҡа ғына ҡотлау һүҙем баҫылып та сыҡты. Шатлығымдың сиге булманы, ябай рәссамдың һүҙе гәзиттә баҫылһын әле! Шул мәлдән алып гәзитебеҙҙе уҡып, уға хаттар яҙып йәшәйем. Ошо ваҡыт эсендә унан күпме йылылыҡ алғанмын, матурлыҡҡа, камиллыҡҡа, ыңғай уй-фекерҙәргә көйләнгәнмен.

Баш мөхәррирҙең талапсан, оҫта ойоштороусы булыуы гәзиттең һәр һанынан күренә. Бер шулай Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы минән, рәссам булараҡ, тиҙ генә ҡулланма сәнғәт белгесе Әлмира Йәнбухтина тураһында мәҡәлә яҙыуымды һораны. "Тиҙ генә" тигән һүҙе ашыҡтырғыс булғас, тоттом да Ә. Йәнбухтинаның китабынан күсереп яҙып, хатымды редакцияға оҙаттым - ҡотолдом булды инде үҙемсә. Икенсе көндө баш мөхәррир өйөмә шылтыратып, улай яҙырға ярамай, тип кенә әйтте. Был ваҡиға миңә бер һабаҡ булды. Тағы ла тырышыбыраҡ яҙырға тотондом. Фекерҙәрем, уйҙарым, хәтирәләремде уҡып, күңел төпкөлөмдәгеләрҙе аңлап, миңә ышанған гәзитебеҙҙең лауреаты ла булырға тура килде хатта. Ул минең тоғро дуҫыма әүерелде шулай.

Егерме йыллыҡ юбилей, тип әйтеүе генә анһат. Ошо йылдар эсендә эшләнгәндәрҙең һәр көнө илгә, халыҡҡа тоғро хеҙмәт өлгөһө бит. Яратҡан гәзитебеҙҙең киләсәге лә шулай яҡты, ижад офоҡтары киң булһын, тип теләйем.

**Фәүзиә УСМАНОВА,**
**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған рәссамы.**

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАЛАЛАР ӨСӨН...

## ололарға яҙған һымаҡ яҙыу кәрәк

*Гүзәл СИТДИҠОВА, Башҡортостандың халыҡ шағиры:* Әҙәбиәт ниҙән башлана? Тәүге тапҡыр китап күреүҙәнме? Атай-әсәй уҡып биргән тәүге китаптанмы? Хәреф өйрәнеүҙәнме? Ижекләп уҡыған тәүге һүҙҙәнме?

Минең өсөн әҙәбиәт Зәйнәб Биишеваның "Йәнле хәрефтәр"енән, 6 йәшлек сағымдан, башланды. Шул китап аша мин уҡырға өйрәндем, яңы һүҙҙәр оттом, шиғыр ятланым. Һәм әлеге көнгәсә уның һүрәтле биттәре иҫкә төшә, күҙ алдыма килеп баҫа. Шул китап күнелемдә китапҡа, нәфис һүҙгә һөйөү орлоҡтары һалды. Ә бөгөн балаларыбыҙ китап уҡыймы? Ғаиләлә китапҡа һөйөү тәрбиәләнәме? Сабыйҙарҙың ғүмерлеккә иҫендә ҡалыр китаптары бармы? Әллә улар әле бишектә ятҡанда уҡ экранға төбәлә башлай ҙа, аяғына баҫа башлау менән, ҡамасаулап йөрөмәһен тип, ҡулына телефон-смартфондар тотторол ҡуялармы? Ә уларҙа, һис юғы, башҡорт һүҙҙәре ишетеләме, йәнһүрәттәр, уйындар бармы? "Бәйләнештә" социаль селтәре төркөмдәрендә әләнән-әле, хатта Бөрйән районының төпкөл ауылдарында балалар русса һөйләшеп йөрөй, тиген яҙмаларҙы уҡып, күнелдә хәүеф баҫқандан-баҫа бара - беҙҙән һуң телебеҙ ҡалырмы, хатта мәктәптә башҡорт телен уҡытҡан хәлдә лә, ул аралашыу теле булып һаҡланырмы? Ә башҡортса китаптарыбыҙ уҡылырмы? Бына ниндәй һорауҙар борсой мине бөгөн Башҡортостан Яҙыусылары съезынан һуң.

Мин аңлы рәүештә ижадымды күберәк балаларға бағышланым, мәктәпкә тиклем уҡ ятлап алырлыҡ шиғырҙар яҙырға тырыштым. Хатта энциклопедик стилдә әкиәттәр ижад иттем. Хеҙмәтемдең бушҡа китмәгәнен йыл башында үткәргән конкурсымда 400-ҙән ашыу бала ҡатнашлығында видеояҙмалар килгәс, инандым. Үтәбаев фамилиялы "егеткә" хатта 2 йәш тә юҡ ине әле! Быны шундай балаларға өмөтөм ҙур, улар әҙәбиәткә һөйөү менән үҫер, китап уҡыр, телебеҙҙең бәсен һаҡлар, телебеҙ өсөн көрәшер тиген ышанысым бар. Союз тарихында беренсе тапҡыр балалар яҙыусыһына юғары исем бирелеүен мин, ниһайәт, балалар әҙәбиәтенә мөнәсәбәт яҡшы яҡҡа үҙгәрер, ҡырҡа боролош башланыр, тиген өмөт менән ҡабул иттем. Юғиһә, әлегеләй ҡараш менән балалар әҙәбиәте генә түгел, ололар әҙәбиәте лә юҡҡа сығасаҡ - бәләкәйҙән китап уҡып үҫмәгән кеше ололар китабын тотоп та ҡарамаясаҡ!

"Китап" нәшриәтендә дәүләттән бүленгән аҡсаның кәмендә яртыһы балалар китаптары сығарыуға йүнәлтелергә тейеш тип һанайым. Ә иң талантлы яҙыусыларыбыҙҙың балалар өсөн дә талантлы әҫәрҙәр тыуҙырыуын теләйем. Бигерәк тә үҫмерҙәр прозаһы йәһәтенән бушлыҡ хасил булды тиерлек.

Байтаҡ йылдар элек бер шиғыр йыйынтығын тикшергәндә ҡатнашырға тура килгәйне. "Ололар өсөн әле барырлыҡ түгел, балалар йыйынтығы итеп сығарып торорға кәрәк", - тине шунда бер ҡәләмдәш. Шул саҡ яраткан язысусым, ижадымдағы өлгөм Корней Иванович Чуковский әйткән һүҙҙәр иҫемә килеп төштө: "Для детей надо писать как для взрослых, только лучше". Шуға күрә уның оҙон-оҙон шиғырҙарын бәләкәс кенә балалар ҙа ятлай һалып ала. Балалар әҙәбиәте ололар әҙәбиәтен йәшәтә, шуны онотмайыҡ, ҡәләмдәштәр!

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Ауыл халҡын санкциялар ҡурҡытманы, уларҙың күбеһе хәҙер үҙҙәре етештергән менән туҡлана, тип әйтә алабыҙмы?***



*Ильвира СӘЛИХОВА, Көйөргәҙе районы:* Санкцияларҙың ауыл халҡы өсөн бер ҡурҡынысы ла булмағандыр, тип әйтә алмайым, сөнки оло йортҡа ни кәрәкһә, кесеһенә лә шул кәрәк. Аҙыҡ-түлек, туҡланыу ризыҡтары, әлбиттә, үҙебеҙҙеке. Ауыл ерендә йәшәгән кешеләр, дөрөҫөрәге, мал тотҡан, баҡса үҫтергән уңғандар бер ҡасан да ас ҡалмаҫ. Был элек-электән шулай булды. Боронборондан килгән мәҡәл-әйтемдәребеҙ ҙа шул хаҡта һөйләй. Үткән быуаттың егерменсе йылдарындағы аслыҡта ла егәрле кешеләр йотлоҡҡа бирешмәгән. Әле лә шулай тип уйлайым.

Бәлки, кемгәлер гәжәп тойолор, мин үҙем шәхсән санкцияларҙың ыңғай яғын күрҙем. Быйыл яҙын ҡала халҡы ла байтаҡ йылдар элек ташлап ҡуйған баҡсаларына һуҡмаҡ һалды. Унда үҙҙәренә етерлек йәшелсәһен ултыртып, йыйып алды. Емеш ағастарын тәрбиәләп, уның да уңышына ҡыуанды. Юғиһә, күптәр, һатып алһаң, арзанырaҡҡа төшә, тип, картуф та ултыртмай башланы бит. Ҡалала йәшәүселәр генә түгел, хатта ауылда ла шундайҙар бар ине. Быйыл иһә буш ятҡан баҡса булманы.

Бына хәҙер, Яңы йыл алдынан район ауылдарында ҡаҙ, өйрәк өмәләре, һуғым һуйыу тамамланды. Халыҡ хәҙер ҡар яуып, туңдырғанын көтмәй, һәр кемдең икешәр-өсәр тундырғыс һандығы бар. Йыуып таҙарта ла, туңдырырға ла ҡуя. Әйткәндәй, ошо тәңгәлдә йәш хужабикәләр янсығына бер кәңәшем дә бар. Ҡаҙ-өйрәкте, шулай уҡ бройлерҙарҙы ла оҙаҡҡа һаҡларға уйлаһағыҙ, ошолай эшләгеҙ. Һыуыҡ һыу менән сайҡатылған ҡоштарҙы бер көн һалҡында һарҡытып ҡуйығыҙ ҙа, ҡапсыҡтарға һалыр алдынан эсен-тышын сепрәк менән һөртөгөҙ. Шунан полиэтилен моҡсайға һалғас, уның һауаһын тулыһынса сығарығыҙ, йәғни "вакуум эффекты"н булдырығыҙ. Моҡсайҙа һауа ҡалмаһа, ит матур һаҡланасаҡ. Ҡаҙҙы мин аҙыраҡ тоҙлап һалам. Шулай итһәң, һурпаһы тәмле була.

Ҡош-корттоң бер нәмәһен дә әрәм итмәйем. Бройлерҙарҙыҡынан тыш, ҡаҙҙың, өйрәктең тәпәйҙәрен тәпәйсә, башын башса айырып алып, ҙур бәлеш бешергәндә ҡушып һалам. Бигерәк тәмле килеп сыға. Ваҡыт булһа, ҡаҙҙың эсәктәрен дә йыуып ала торғайным. Уны тәпәйгә ҡушып бешерһәң, бына тиген ризыҡ килеп сыға. Майын да ташламайым. Ҡайҙа, нимәнән етештерелгәне лә билдәһеҙ маргарин, комбижирҙарҙы ҡулланмайым. Ҡаҙ һәм малдың туң майын иретеп, бына тиген ҡатнаш май эшләйем. Хәҙерге медицинала мал майын ҡулланыу кәңәш ителмәй, әммә мин уға ышанмайым. Борон атай-олатайҙарым шуны ашап, шуның менән туҡланып йәшәгән, бер ниндәй ҡурҡыныс ауырыуҙары ла булмаған. 80-90-ға тиклем йәшәнеләр.

Колбасаны ла үҙем эшләргә өйрәндем. Магазиндағы кеүек түнәрәк булмаһа ла, бына тиген ҡабымлыҡ килеп сыға. Эшләтеп алам тиһәң, хәҙер уның менән шөғөлләнгән бәләкәй предприятиелар ҙа бар. Йыл һайын ултыртма ултырам. Һарыҡ эсәген дә ҡайһы бер кеше йыуырға сирҡанған булып ташлай. Мин уларҙы ла әрәм итмәйем, таҙалап йыуып, йыуан эсәгенән ултырма эшләйем, ҡалғанын бешекләп, ит турағыстан үткәреп, бөйөрәктәр бешерәм.

Малдың да, ҡоштоң да бер нәмәһен дә әрәм итмәгән борон халҡым. Сит илдән килтерелгән ялтырауыҡлы төргәктәргә төрөлгән арзан әйберҙәргә ҡыҙыҡып ҡына һуңғы осорҙа күптәр үҙебеҙҙә етештерелгәнгә илтифат итмәй башлағайны. Санкциялар уларҙың күбеһен хәҙер үҙебеҙҙең традицион йәшәү рәүешенә ҡайтарҙы тип уйлайым. Ҡалала үҙ йортонда йәшәгән танышһтарымдың тормошона ҡарап та әйтә алам. Күптәнге танышым, ҡала ҡыҙы быйыл 25 өйрәк алып аҫраны. Егерме көн тирәһе ҡарағас, эшенән-мәшәҡәтенән ҡурҡып, һатып ебәрергә уйлағайны, алыусыһы булманы. Аҙаҡ өйрәнеп китте. "Гәҙәткә индереү өсөн 21 көн кәрәк тигәндәре дөрөҫ икән, 22-се көнгә бер ниндәй ауырлыҡһыҙ, дөрөҫөрәге, ҙур теләк менән өйрәктәремә ашарға бешерергә сыҡтым", - тине ул.

Бер нәмәнән дә ҡурҡырға кәрәкмәй. Бөгөнгө көндә үҙ йүнендә үҙең күрергә кәрәк. Алма беш - ауыҙыма төш, тиген заман күптән үтте. Хәҙер йәшәйем, аҡса эшләйем тиген кешегә бар юл да асыҡ. Быйыл мин үҙебеҙҙән артып ҡалған ҡошҡорт, йәшелсә, ҡарағат һатып ҡына 60 меңгә яҡын килем алдым. Был аҡсаның яртыһын икенсе йылға себештәр һәм уларға ем алырға һалып ҡуйҙым. Быйылғыға ҡарағанда күберәк алырға ниәтләйем. Һатып алырға заказ биреүселәр ҙә бар.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров журналистар менән ҙур интервью форматында әңгәмәләште. Аралашыу ике сәғәттән ашыу барҙы. "Һеҙҙең өсөн үтеп барған йылдың иң сағыу ваҡиғаһы нимә?" тиген һорауға Радий Фәрит улы: "Республика халҡының берләшеүе. Мин һәр саҡ республикабыҙ берҙәм булһын, халыҡ бер-береһен хөрмәт итһен, уларҙың ҡиммәттәре берҙәм булһын өсөн эшләнем. Минеңсә, быйыл шундай мәл етте", - тип яуап бирҙе.

✓Республика Дәүләт Йыйылышы депутаттары "2023 йылға һәм 2024, 2025 йылдарҙың план осорона Башҡортостан Республикаһы бюджеты тураһында" закон ҡабул итте. Документ тексынан күренеүенсә, республиканың 2023 йылға бюджеты килем буйынса 267,338 миллиард һумдан ашыу күләмдә формалаштырылған. Киләһе йылда сығымдар 285,138 миллиард һум тәшкил итәсәк. Төбәк бюджеты дефициты 17,8 миллиард һум күләмендә планлаштырылған.

✓Башҡортостанда хәрбиҙәрҙең атаәсәһе лә махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаилә ағзалары булараҡ льготалар алырға мөмкин. Әле Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса ошо мәсьәлә ентекле өйрәнелә. Шул уҡ ваҡытта "Инцидент менеджмент" системаһына халыҡтан ата-әсәләргә социаль ярҙам саралары буйынса һорауҙар килә башлаған. Үткән аҙнала социаль хеҙмәтләндереү мәсьәләләре буйынса 492 мөрәжәғәт ҡабул ителгән.

✓Башҡортостанда ашығыс медицина ярҙамы станциялары 18 яңы автомобиль алды. Улар Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы буйынса федераль бюджет аҡсаһы иҫәбенә һатып алынған. Яңы ГАЗ һәм УАЗ машиналары Республика ашығыс медицина ярҙамы станцияһы һәм һәләкәттәр медицинаһы үҙәгенә, Стәрлетамаҡ, Күмертау, Нефтекама, Октябрьский, Сибай ҡалаларындағы, Белорет, Бөрө һәм Дыуан райондарындағы станцияларға тапшырылды.

✓Республиканың Роспотребнадзор идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, төбәктә сусҡа кизеүе (H1N1) тарала. Әлеге ваҡытта 40-тан ашыу ауырыу осрағы һәм В кизеүенең бер нисә осрағы лабораторияла раҫланған. Был штамм еңел дауалана, сөнки 2009-2010 йылдарҙа ла республикала ошо сир теркәлгәйне. Дауаланмаған осраҡта ул пневмония, менингит, энцефалит һәм башҡа хроник сирҙәрҙең ҡиҫкенләшеүенә килтереүе мөмкин, тип белдерҙеләр күҙәтеү ведомствоһында.

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ҮҘ ИЛЕНДӘ...

## солтанмы, олтанмы?



**"Киске Өфө" гәзитен күптән алдырам. Бер һүҙен дә ҡалдырмай уҡыйым, күршеләргә һөйләйем. Бәхәстәр, әңгәмәләр, диалогтар оҡшай. Бәхәстәрҙе ҡурҡмай, тартынмай бирергә кәрәк, тием. Ул уҡыусыларҙы әүҙемләштерә.**

Бер саҡ гәзит биттәрендә "Сит ерҙә олтан булғансы, үҙ илендә солтан бул" тигән мәҡәл дөрөҫмө, әллә "Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илендә олтан бул" дөрөҫмө?" тигән бәхәс булып алғайны. Был мәҡәл буйынса мин дә күптән уйланам һәм үҙ фекеремде әйтәйем, тием.

Минеңсә, сит илдә йәшәгәс, әлбиттә, солтан булып йәшәргә кәрәк. Әммә сит илдәге солтанлыҡтың үҙеңдән башҡа кемгә кәрәге бар? Ә үҙ илеңдә һин кем генә булма, ни генә эшләмә - барыбер һин солтанһың. Кеше үҙ илендә ни эшләп олтан булһын? Үҙ иле - үҙ өйө бит уның.

Халыҡ барҙа хаҡлыҡ бар, тиҙәр. Шуға мин дә халыҡ аҡылына мөрәжәғәт итеп, үҙ фекеремде дөрөҫләмәксе булдым һәм ошондай мәҡәлдәр таптым:

*Үҙ илең - алтын, кеше иле - тотҡон.*
*Үҙ илем - алтын бишек, кеше иле - үтә тишек.*
*Үҙ илендә кем дә бей.*
*Үҙ илеңдә ҡарлуғас булһаң да, кеше илендә ҡарға булырһың.*
*Үҙ илеңдә үҙең ҙур.*
*Үҙ йортонда алйот та хужа.*

Һәм башҡа ошондай мәҡәлдәр минең фекеремде дөрөҫләне. Шуға ла "Сит илдә олтан булғансы, үҙ илендә солтан бул" тигән мәҡәлде дөрөҫ тип ҡарап, ҡайһы бер китаптарҙа яңылыш яҙылғандарын төҙәтергә кәрәк.

Был мәсьәләгә ни өсөн ҡайттым? Хәҙер бит күп кенә балалар сит илдәрҙә йәшәүҙе хуп күрә һәм уларҙың атай-әсәйҙәре лә "Балам фәлән ерҙә фәлән вазифа башҡара", тип маҡтанған була. Әлбиттә, башҡарыр. Башҡорт балаһы башлы инде ул - эшләй ҙә, эшләтә лә белә. Ә сит илдә кемгәлер хеҙмәт итеп, "олтан" булып йөрөүенән кемгә файҙа? Илгәме? Ата-әсәһенәме? Ата-әсәһенең һуңғы көндәренә тиклем балаһы менән бер һөйләшергә зар-интизар булып, хатта фани донъянан китер алда күреп ҡалыуҙан да мәхрүм булғандар аҙмы?

Беҙ мәҡәлде дөрөҫләп ҡуймаһаҡ, балаға бәләкәй сағынан уҡ яңылыш фекер һалып, яңылыш йүнәлеш бирәбеҙ. Юғиһә, ҡайһы берәүҙәр аҙ ғына уңышһыҙлыҡҡа юлыҡһалар ҙа, "Үҙ илемдә олтан булғансы, сит илдә солтан булам мин" тип, ҡул һелтәп сығып китеүсән була. Нисек кенә булмаһын, ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ.

**Гөлимә ХАНОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Ауыл халҡын санкциялар ҡурҡытманы, уларҙың күбеһе хәҙер үҙҙәре етештергән менән туҡлана, тип әйтә алабыҙмы?

***Ләйсән ИСЛАМБАЕВА, Күгәрсен районы:*** Санкция иғлан ителгәс, әлбиттә, иң тәүҙә халыҡ баҙап ҡалды, сөнки сикләүҙәр аҙыҡ-түлеккә генә ҡағылмай бит. Көнкүреш техникаһы ла, машина ла, кейем дә - барыһы ла кәрәк. Уларҙың мөҙҙәте ғүмерлек түгел, туҙа, боҙола, емерелә, эшлектән сыға. Шул сәбәпле магазинда бөтә нәмәгә хаҡ артты. Әле булһа артыуын дауам итә. Ә бына ризыҡҡа килгәндә, өҫтәлемдәге бөтә аҙыҡ - үҙебеҙ етештергән, үҙебеҙ үҫтергән. Магазинда һуған, ит, һөт арзан, тип, бер ҡасан да һатып алырға тырышманым. Бөтә көсөбөҙҙө һалып, үҙебеҙ баҡса үҫтерергә, мал-тыуарҙы, ҡош-ҡортто ишәйтергә тырыштыҡ. Булды шундай заман: һуған орлоғоноң килограмы 300 һумға етте. Шулай булғанда ла 3 килограмм алып, ҙур өс түтәл сәстем. Күршем көҙөн Мәләүездә йәрминкәлә һуғандың килоһын 200-әр һумға ҡышҡылыҡҡа етерлек алып ҡайттым, тип маҡтанды. Әммә уның һатып алған һуғанын бушҡа бирһәләр ҙә алмаҫ инем. Үҙе ҡаты, еҫе көслө. Иткә, ашҡа ҡушһаң, шәкәр тәмәйтә. Эре, таҙа булыу менәнме ни, тәме бөтөнләй икенсе булғас. Әллә ҡайҙа, әллә ниндәй ашлама һалып үҫтерелгәндер әле.

Быйыл халыҡ ҡар ятмаҫ элек үк яйлап һуғым һуя башланы. Ҡош-ҡортон күптән эш итеп, һатҡанын һатып, ҡышҡылыҡҡа тигәнен һаҡларға һалып ҡуйҙы инде. Гөрләп һуғым аштарына саҡырышалар. Бер нисә йыл элек был ғөрөф-ғәҙәт бик үткәрелмәй башлағайны. Эске ойоштормайыҡ, тип, байрамдар, ҡунаҡтар, саҡырышыуҙар бер аҙ кәмегәйне. Тик һуғым ашы - ул борон-борондан килгән матур йолабыҙ ҙа. Шуға күрә уны ауылда яңынан тергеҙеп ебәрҙеләр. Әммә ул хәҙер күбеһенсә эскеһеҙ генә үтә. Йолаһына тура килтереп, уны һәр кем үткәрергә тырыша.

Беҙҙә ҡунаҡты мал һуйған көндө түгел, ә бер нисә көндән йә һуңғараҡ үткәрәләр. Иң беренсе малды салған, һуйған ир-егеттәрҙе, эс-ҡарынын йыуышҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙы, туған-тыумасаны, күрше-тирәне саҡырабыҙ. Һуғым итен мул итеп һалып, һәр береһенең алдына өлөш ултыртабыҙ. Артып ҡалһа, уны күстәнәскә биреп ебәрәбеҙ. Һуғым ашына мотлаҡ тултырма тултырыла. Һәр кем хужа менән хужабикәне, малды салған кешене маҡтап-маҡтап ашай, ғаиләгә, илгә-көнгә тыныслыҡ, муллыҡ, бәрәкәт теләп тарала. Мин дә форсаттан файҙаланып, гәзит уҡыусыларҙың һәр береһенә ҡот-ырыҫ теләп ҡалам.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

ТАБИП КӘҢӘШЕ

# ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ, ЯҢЫ ЙЫЛ КИЛӘ!

**Берәй кеше хәмер менән ағыуланып, һәләк булып ҡала икән, "ул бахмурҙан үлде" тип әйтеү ғәҙәткә ингән. Әммә "араҡы эсеп үлде" тиеүселәр һирәк. Йәнәһе лә, хәмер эсеү - ифрат та ғәҙәти хәл, тик самалап эсеү генә кәрәк, ә артығыраҡ еффәрҙең икән, "бахмур" яһау зарур… Бына шулай, үкенескә, күптәрҙең әле булһа араҡыға тел тейҙергеһе килмәүе һиҙелә. "Саманан тыш артыҡ эсеү" тигән төшөнсәне лә лөғәтебеҙгә индереп алғанбыҙ, йәмәғәт. Әйтерһең дә, шул шайтан эсемлегенең ниндәйҙер бер аныҡ дозаһы бар.**

Әлегерәк, Афғанстанда интернациональ бурысын үтәгән мәлдә, ун йыл эсендә бөтә Советтар Союзынан ун бишләгән мең һалдат һәм офицер үлгән, тигән хәбәрҙе ишетеп тетрәнгәйнем. Ә инде Рәсәйҙә эскелек арҡаһында үлгән кешеләр хаҡында интернеттан мәғлүмәт алғас, сәстәрем үрә торҙо! Илебеҙҙә алкоголдән бер йыл эсендә генә һәләк булғандар (Афған һуғышында ун йылда үлгәндәр һанынан) мәртәбәләргә күберәк икән дә баһа! Бынан тыш, Һаулыҡ һаҡлау министрлығының Мәскәү фәнни тикшеренеү институты мәғлүмәт бүлеге етәксеһе, медицина фәндәре докторы Александр Немцовтың әйтеүе буйынса, Рәсәйҙә ике миллион самаһы кеше алкоголизм сире менән яфалана икән. Ошо фантастик һанға ла ышанмай, интернетҡа һорауымды тағы бер мәртәбә ҡабатлап бирҙем... Ә Башҡортостанда бер йылда 744 кеше эскелектән вафат булған. Был да аҙ түгел, икенсе төрлө итеп әйткәндә, республикабыҙҙа көн һайын ике кеше хәмер ҡорбаны була. Бында, башлыса, алкоголь суррогаттарынан, йәғни, "сифатһыҙ" араҡынан ағыуланыу хаҡында һүҙ бара. Ә эскелек арҡаһында ҡылынған енәйәт, суицидтарҙы, автоһәләкәттәрҙе, һыуға батыусыларҙы ҡушып һанай башлаһаң, иҫең-аҡылың китер. Һуғышта һәләк булған осраҡтарҙы, нисектер, аңлатырға булһа, тыныс өй шарттарында аҡсаға һатып алынған бындай үлемде башҡа һыйҙырырлыҡ түгел бит, йәмәғәт!

Күптән түгел инде оҙаҡ йылдар хәмерҙе ауыҙына ла алмаған бер танышымдың ҡабаттан эсә башлағаны хаҡында ишетеп борсолдом. "Ун көн тирәһе бер туҡтауһыҙ эсә лә эсә, - тип зарлана хәләл ефете. - Аҡса бирмәһәң, таныш-тоноштарҙан бурысҡа ала, ояты ни тора..." Оятынан да бигерәк, был ирҙең кинәт кенә был донъянан китеп барыу ихтималлығы хаҡында ҡатынын иҫкәрттем: "Яҡшы кеше бит, әрәм булып ҡуйыуы бар. Ашығыс рәүештә дауаханаға һалып, берәй сараһын күрергә кәрәк..." Инде бер нисә тиҫтә йыл бергә йәшәгән кешеһенең насар ир түгеллеген былай ҙа белә инде ул. Элегерәк тә әллә нисә мәртәбә "ашығыс ярҙам" саҡыртып, йә наркология клиникаһына һалып дауалатып алды ул ирен. Эсмәһә - аттай егәрле, аҡсаны ла "ҡутара ҫуғып" эшләй был танышым. Бынамын тигән машинала йөрөй, балаларына фатир ҙа алып биргән. Кешелекле. Бер һүҙ менән әйткәндә, ир аҫылы инде ул. "Оҙаҡ эсмәй йөрөгән кешегә араҡының тәьҫирен белер өсөн генә" татып ҡараған икән ул. Әммә биш-алты йыл элек үткәргән "запой" хәленә ҡабаттан ҡайтыуы бер ни ҙә тормай шул. Кәртәлә һөйәлеп торған тырмаға күпме генә баҫһаң да, ул һәр саҡ башҡа "тондора". Шулай уҡ, кирбес нисә мәртәбә генә төшһә лә, баштың уға күнегә алмауын аңлау кәрәк.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хеҙмәт министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, мобилизациялanғандарҙың 6,5 меңдән ашыу ғаилә ағзаһы 20 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү алды. Аҡса хәрбиҙәргә һәм уларҙың ҡатындарына, балиғ булмаған балаларына, шулай уҡ колледжда йәки вузда көндөҙгө бүлектә уҡып йөрөгән 23 йәшкә тиклемге балаларына бирелергә тейеш.

✓34 йәшлек яҙыусы һәм журналист Айгиз Баймөхәмәтов Башҡортостандың Яҙыусылар ойошмаһы рәйесе итеп һайланды. 2015 йылда "Ҡалдырма, әсәй!" китабы өсөн Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһына лайыҡ булды. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. 2020 йылдың февраленән - "Шоңҡар" республика йәштәр журналының баш мөхәррире.

✓Өфөлә Башҡортостан Яҙыусылар ойошмаһының XX съезында республика яҙыусыларын бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Яҙыусылар Әмир Әминев, Камил Йыһаншин, Ринат Камалов һәм Флүр Ғәлимов - Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, яҙыусы, тәржемәсе Гүзәл Ситдиҡова Башҡортостандың халыҡ шағиры исеменә лайыҡ булды. Зөһрә Ҡотлогилдина һәм Зәки Әлибаев Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде. Яҙыусы Фәрзәнә Аҡбулатоваға "Халыҡтар дуҫлығы" ордены тапшырылды.

✓Башҡортостанда пилотһыҙ осоу аппараттарын күпләп сығарыу башлана, сөнки хәҙер уларға ихтыяж ҙур. Шуға күрә Хөкүмәттә дрондар өсөн комплектлаусы изделиелар һатып алыуға гранттар бүлеү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Был турала республика Хөкүмәте вице-премьеры - сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев ошо хаҡта хәбәр итте. Производствоны йыл аҙағына тиклем республикала булдырылырға тейешле авиация кластеры сиктәрендә үҫтереү, бынан тыш, 2023 йылдан агросәнәғәт йүнәлеше берекмәһен дә да асыу күҙаллана.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин мобилизация әҙерлеге, мобилизация, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы социаль һәм хоҡуҡи яҡлау мәсьәләләре буйынса власть органдарының һәм ойошмаларҙың эшсе төркөмөн ойошторҙо. Эшсе төркөм составына парламентарийҙар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре һәм журналистар - бөтәһе 31 кеше инде. Төркөмдө Федерация Советы рәйесенең беренсе урынбаҫары Андрей Турчак етәкләй.

ҠЫҪҠАСА

# СПОРТТЫ КӨСӘЙТӘБЕҘ!

**Башҡортостанда спортсыларға һәм уларҙың тренерҙарына, айырыуса ауыл ерендә эшләгәндәргә социаль ярҙам күрһәтеүгә ҙур иғтибар бүленә.** "Ауыл тренеры" проекты сиктәрендә 104 белгескә 600-шәр мең һум аҡса түләнгән. "Беҙҙең тренерҙар 76 Олимпия, Паралимпия, Сурдлимпия уйындары чемпионын һәм призерын тәрбиәләгән. Билдәле спортсыларыбыҙға һәм уларҙың остаздарына ярҙам күрһәтеү буйынса ҡарар ҡабул иттек. Киләһе йылдан улар миллион һум ала башлай. Олимпия, Паралимпия йәки Сурдлимпия уйындары чемпиондарына һәм призерҙарына республиканан айлыҡ түләүҙәр (чемпиондарға, көмөш һәм бронза призерҙарға "гүмерлек стипендиялар" - 30, 25 һәм 20 мең һум) тәғәйенләнә. Республиканан матди яҡтан дәртләндереү ҡаралған ярыштар исемлеген киңәйттек. Хәҙер унда Бөтә Рәсәй спартакиадалары ла бар. Быға тиклем Рәсәй чемпионаттары индерелгәйне", - тип билдәләне Радий Хәбиров физкультура һәм спорт буйынса республика советы ултырышында.

✔ **Дәүләт Думаһы Рәсәйҙең Хеҙмәт кодексына мобилизацияланған граждандарҙың хеҙмәт хоҡуҡтарын яҡлауға йүнәлтелгән төҙәтмәне ҡабул итте.** Был хаҡта Дәүләт Думаһының матбуғат хеҙмәте белдерҙе. "Махсус операция бурыстарын үтәгән ваҡытта мобилизацияланғандар өйҙәренә ҡайтҡас эшһеҙ ҡалмаясына ышанырға тейеш, - тине Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин. - Икенсе уҡыуға төҙәтмә менән ҡануниәткә яңы норма индерелә, уға ярашлы, мобилизацияланғандарҙың элек биләгән вазифаһында йәки хеҙмәткәрҙең квалификацияһына тап килгән башҡа вакантлы вазифала эшләүгә өҫтөнлөклө хоҡуғы һаҡлана". Был норма 2022 йылдың 21 сентябренән барлыҡҡа килгән хоҡуҡ мөнәсәбәттәренә ҡағыла.

✔ **Владимир Путин 30 ноябрҙә уҙған Хөкүмәт кәңәшмәһе йомғаҡтары буйынса йөкләмәләр исемлеген раҫланы.** Улар бюджет хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыуҙы тәьмин итеүгә ҡағыла, тип хәбәр ителә Рәсәй Президенты сайтында. 15 декабргә тиклем, иҡтисадтағы хеҙмәт хаҡы үсешенең фактик темптарын иҫәпкә алып, бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы кимәленең маҡсатлы күрһәткестәренә өлгәшеү өсөн Рәсәй Федерацияһы субъекттары бюджеттарына өҫтәмә трансферттар йүнәлтеү бурысы йөкмәтелгән. 2023 йылдың 30 мартына тиклем хөкүмәткә федераль дәүләт бюджет учреждениеларының эшмәкәрлеген, шул иҫәптән уларҙың хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы кимәлен, эш сифатын анализларға һәм уларҙың һөҙөмтәлелеген күтәреү буйынса тәҡдимдәр индерергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта ил Хөкүмәтенә һәм субъекттарҙың башҡарма власть органдарына 2023 йылдың башында бюджет өлкәһе учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы фондын арттырыуҙы тәьмин итергә ҡушылған.

✔ **Рәсәй Президенты Владимир Путин дәүләт органдары биналарында, юғары уҡыу йорттарында, мәктәптәрҙә, дауаханаларҙа һәм уларҙың янында, аэропорттарҙа һәм порттарҙа, вокзалдарҙа, ғибәҙәтханалар урынлашҡан биләмәләрҙә һәм йәшәйеште тәьмин итеү объекттары эргәһендә митингтарҙы тыйыу тураһында законға ҡул ҡуйҙы.** Әлегә тиклем Президент резиденциялары, судтар, ашығыс оператив хеҙмәттәр һәм Федераль яза башҡарыу хеҙмәте учреждениелары янында ғына митингтар үткәреү тыйылғайны. Яңы законға ярашлы, төбәктәр митинг ойоштороу тыйылған урындарҙы үҙҙәре билдәләү хоҡуғына ла эйә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КӨРӘШ ҺАРАЙЫ ТӨҘӨЛӘ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Көрәш һарайы төҙөлөшө менән танышты. "Был оҙайлы юл булды", - тине ул был төҙөлөшкә 2019 йылда уҡ нигеҙ һалыныуына ишаралап.**

Көрәш һарайы Муса Гәрәев, архитектор Рехмуков, Рудольф Нуриев һәм Комсомол урамдары менән сиктәш кварталда төҙөлә. Спорт объектының майҙаны - 28 мең квадрат, төҙөлөш өсөн участкаһының майҙаны - 42,7 мең квадрат метр. Объектта төҙөлөш-монтажлау эштәре быйыл май айында башланған. Көрәш һарайында спорт һәм ирекле көрәш, самбо, дзюдо, милли көрәш, көнсығыш бергә-бер көрәше буйынса төбәк, дөйөм Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлдәге ярыштар үткәрергә мөмкин. "Өфөләге Көрәш һарайы донъя көрәшен үҫенә йәлеп итеү үҙәгенә әүерeләсәк. Ярыштарҙан тыш, бында ғилми конференциялар, оҫталыҡ кластары ойошторорға мөмкин. Ҡарар ҡабул итеп, Көрәш һарайын төҙөй башлағаныбыҙ өсөн рәхмәт һеҙгә, Радий Фәрит улы", - тип билдәләне Рәсәйҙең Спорт көрәше федерацияһы президенты, олимпия чемпионы Михаил Мамиашвили.

Республика етәксеһе, ниһайәт, өсөнсө тапҡырҙан хыялының тормошҡа ашасағын билдәләп, Михаил Мамиашвилиға һәм федерацияға проектҡа ярҙам күрһәткәне өсөн рәхмәт әйтте, 2024 йылға Көрәш һарайы биләмәһе лә төҙөкләндерeләсәген билдәләне. Биләмәлә баскетбол, волейбол, мини-футбол өсөн майҙансыҡтар, йүгереү юлдары, парковкалар төҙөү ҡарала. "Был тренерҙарыбыҙҙың, халҡыбыҙҙың, балаларыбыҙҙың хыялы ине. Бының өсөн оҙайлы юл үттек. Көрәш һарайына аҡса табыу, уны проектлау һәм Рәсәйҙең Спорт министрлығы менән эшләү. Төҙөүселәр объектты 2024 йылдың яҙына файҙаланыуға тапшырырға вәғәҙәләй", - тине Радий Хәбиров.

# ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!



**Рәсәй Президенты Владимир Путин Стратегик үҫеш һәм милли проекттар буйынса совет ултырышы үткәрҙе. Дәүләт башлығы үҙ сығышында социаль мәсьәләләргә айырым иғтибар бирәсәк 2023 йылға бурыстар билдәләне.**

Рәсәй Президенты әйтеүенсә, илдә торлаҡ төҙөү һәм граждандарҙың торлаҡ шарттарын яҡшыртыу һис һүҙһеҙ өҫтөнлөктәрҙең береһе булып тора. Илдә льготалы ипотека 2023 йылдың 1 июленә тиклем оҙайтыла. Шул уҡ ваҡытта уның буйынса ставка 8 процентҡа тиклем артасаҡ, әммә ғаилә ипотекаһына инеү мөмкинлеге киңәйәсәк. "Хәҙер бындай кредит 2018 йылдан балаһы тыуған ғаиләләргә генә бирелә. 18 йәшкә тиклемге кәмендә ике балаһы булған ғаиләләргә алты процент ставка менән ипотека алыу мөмкинлеген бирергә тәҡдим итәм", - тине Владимир Путин.

Пенсионерҙар махсус иҫәптә тора. Владимир Путин илдә пенсия инфляциянан юғарыраҡ темп менән артыуын билдәләне. "Пенсия менән бергә күп кенә социаль пособие һәм түләүҙәр бәйле булған йәшәү минимумы ла бер йыл эсендә ике тапҡыр индексланды. Шуға ярашлы, улар ҙа артты, был яҡынса 15 миллион кешенең килеменә туранан-тура йоғонто яһаны", - тине дәүләт башлығы.

Бөтә ил өсөн бәхәсһеҙ ҡиммәт - әсәлек, бала саҡ һәм сәләмәтлек, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Президент. 2023 йылдың 1 ғинуарынан илдә тыуғандан алып 17 йәшкә тиклемге балалары булған мохтаж ғаиләләргә бер тапҡыр айлыҡ пособие иҫәпләнәсәк. Пособие ата-әсәнең йәки йөклө ҡатындың бер ғаризаһы буйынса, ғаиләләге бөтә балалар өсөн тәғәйенләнә. Шул уҡ ваҡытта йөклө ҡатындарға льгота күләме арттырыласаҡ һәм эшкә һәләтлеләргә тәғәйенләнгән йәшәү минимумының яртыһынан бер йәшәү минимумына тиклем тәшкил итәсәк. Льготаларҙы алыу граждандар өсөн мөмкин тиклем аңлайышлы, ябай һәм уңайлы булырға тейеш, тип билдәләне Владимир Путин.

Былтыр беренсел медицина ярҙамын камиллаштырыу программаһы эшләй башланы. Владимир Путин төбәк етәкселәренән был программа барышын контролдә тотоуҙарын һораны һәм шулай тип билдәләне: "Бында уңыштың төп шарты булып күрелгән саралар, ремонт буйынса ҡоро отчеттар түгел, ә граждандарҙың медицина ярҙамына ҡәнәғәтлеген арттырыу тора. Бынан тыш, киләһе йылдың 1 ғинуарынан беренсел медицина ярҙамы күрһәтеү белгестәренең эш хаҡына даими нигеҙҙә өҫтәмә түләү индерергә тәҡдим итәм. Бындай түләү күләме айына 4,5 мең һумдан 18,5 мең һумға тиклем тәшкил итәсәк. Ул Рәсәй Федерацияһы төбәгенә ҡарамай, медицина хеҙмәткәрҙәренең билдәле категорияһы өсөн берҙәм булырға тейеш".

Алдағы 10 йылда Рәсәйҙә донъя кимәлендәге 25 яңы университет кампусы булдырылырға тейеш. "Тәүге һигеҙ проект башланды ла инде, шул иҫәптән Өфөлә", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Президент.

# ГЕРОЙЛЫҠҠА УРЫН БАР



**Ватан Геройҙары көнөндә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың ветеран һәм патриотик ойошмалары етәкселәре менән осрашты.**

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында күрһәткән батырлығы өсөн 284 яҡташыбыҙ Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булды. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал-майор Миңлегәле Шаймуратовҡа үлгәндән һуң Рәсәй Геройы исеме бирелде. Республика халҡы ил Президенты Владимир Путинға тарихи ғәҙеллекте тергеҙгәне өсөн рәхмәтле, тип билдәләне республика етәксеһе. Бөгөн дә яугирҙарыбыҙ ҡаһарманлыҡ эстафетаһын дауам итә. 2000 йылдың яҙында Чечен Республикаһы тауҙарында Рәсәй Геройы Александр Доставалов халыҡ-ара террорсыларға ҡаршы алышта батырҙарса һәләк булды. Махсус хәрби операция барышында өлкән лейтенант Игорь Насибуллинға, прапорщик Тамерлан Илһамовҡа, өлкән лейтенант Максим Серафимовҡа үлгәндән һуң Рәсәй Геройы исеме бирелде. Үҙ ғүмерен ҡорбан иткән Рәсәй Геройҙарын һәм бөтә яугирҙарыбыҙҙы бер минутлыҡ тынлыҡ менән иҫкә алдылар. "Кисә ил президенты Владимир Путин тағы ла бер яҡташыбыҙға, майор Борис Александрович Дудкоға Рәсәй Геройының "Алтын Йондоҙ"он тапшырҙы. 76-сы гвардия десант-һөжүм итеү дивизияһының 124-се айырым танк батальоны командиры урынбаҫары майор Дудко махсус хәрби операция барышында ҡаһарманлыҡ күрһәткән", - тине Радий Хәбиров.

Әйткәндәй, ошо көндәрҙә Рәсәй Президенты Владимир Путин Октябрьский ҡалаһында тыуып үҫкән тағы бер яҡташыбыҙ, өлкән лейтенант Степан Беловҡа Рәсәй Геройы йондоҙон тапшырҙы. Ул Ҡазан юғары танк училищеһына уҡыған, 2019 йылдың ғинуарында лейтенант дәрәжәһендә хеҙмәт итә башлай. 2022 йылдың февраленән махсус хәрби операцияла ҡатнаша. Әлеге ваҡытта батальон штабы начальнигы вазифаһын башҡара.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Башҡорт баһадиры Эльбрус Ниғмәтуллин Өфөлә яңы донъя рекорды ҡуйҙы. Был юлы спортсы һәр береһе 380 килограмлыҡ ике бүрәнәне 60 секунд буйына тотоп торҙо. "Башҡортостан" дәүләт концерт залы алдындағы майҙанда рекордты "Уралстронг - Рәсәй бәһлеүәндәре" федерацияһы президенты Дмитрий Кононец теркәне. Ул шунда уҡ баһадирҙы махсус сертификат менән бүләкләне.

✔Рәсәй банкында яңы йыл байрамдарында түләү системаһының эше тураһында һөйләнеләр. Матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, Үҙәк банктың түләү системаһы 2023 йылдың 3, 4, 5, 6 һәм 8 ғинуарында эшләй. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, хеҙмәт ҡануниәтенә ярашлы (Рәсәй Федерацияһы Хеҙмәт кодексының 112-се статьяһы), 1, 2, 3, 4, 5, 6 һәм 8 ғинуар - Яңы йыл каникулдары, 7 ғинуар - Раштыуа - байрам көндәре булып тора.

✔Башҡортостандың 2023 йылға бюджетында һаулыҡ һаҡлау өлкәһе өсөн бөтә финанслау сығанаҡтарынан 104,7 миллиард һум һалынған. Республика һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин һүҙҙәренсә, быйыл республикала "Һаулыҡ һаҡлау" һәм "Беренсел звеноны яңыртыу" милли проекттары сиктәрендә 30-ҙан ашыу объект - поликлиникалар һәм фельдшер-акушерлыҡ пункттары капиталь ремонтланған. Модулле һәм капиталь медицина учреждениелары төҙөлгән. Мәҫәлән, Өфөнөң Затон биҫтәһендә әлеге ваҡытта поликлиника файҙаланыуға тапшырыуға әҙерләнгән, тине Айрат Рәхмәтуллин.

✔РФ Президенты ҡушыуы буйынса хәҙер Рәсәйҙә социаль газ үткәреү программаһының ваҡыты сикләнмәй. Һүҙ газ үткәрелгән торaҡ пункттарҙа урынлашҡан балалар баҡсалары, мәктәптәр, поликлиникалар, дауаханалар, фельдшер-акушерлыҡ пункттары, дөйөм практика табиптары бүлексәләре һәм табип амбулаториялары хаҡында бара. Бындай учреждениеларға үҙҙәренең участкаһына тиклем газ үткәргес һуҙыу буйынса саралар, шулай уҡ биналарҙы газ бүлеү селтәрҙәренә тоташтырған өсөн түләргә кәрәкмәй.

✔2023 йылдың аҙағынаса Өфө мәктәптәренә магнитлы аҫҡыстар менән генә индерәләр. Был хаҡта баш ҡала мэрияһының мәғариф идаралығы етәксеһе Азат Батыршин белдерҙе. Был сара өҫтәмә хәүефһеҙлекте тәьмин итеү өсөн индерелгән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*КӨНАУАЗ*

# ИҪӘН-ҺАУ ҺӘМ ЕҢЕҮ МЕНӘН ҠАЙТЫҒЫҘ!

**Өфөнөң Совет майҙанында Салауат Юлаев исемендәге өсөнсө ирекле башҡорт батальонын оҙатыу тантанаһы уҙҙы. Батальон хәрби бүлексәләр ветерандары башланғысы менән ойошторолдо. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров был идеяны хупланы. Батальон айырым хәрби берәмек булараҡ Рәсәй гвардияһы составына инде.**



Хәрбиҙәрҙе оҙатыу тантанаһы республика етәксеһе Радий Хәбировтың һәм Рәсәй милли гвардияһы ғәскәрҙәренең Волга буйы округы командующийы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы генерал-лейтенант Руслан Султыговтың Рәсәй Геройы, легендар комдив Миңлеғәле Шайморатов һәйкәленә сәскәләр һалыуынан башланды."Махсус хәрби операция башланғандан алып меңәрләгән ирегет хәрби бурысын үтәй, илебеҙҙе һаҡлай, батырлыҡ һәм ҡыйыулыҡ күрһәтә. Уларға ярҙам кәрәк. Бөгөн тотош республика исеменән һеҙгә Тыуған илде яҡлау тураһында ҡарар ҡабул иткәнегеҙ өсөн рәхмәт белдерәм. Миңлеғәле Шайморатов һәм Александр Доставалов исемендәге батальондарҙың яугирҙарына ярҙам итеп торабыҙ, һеҙҙең хаҡта ла хәстәрлек күрәсәкбеҙ. Ғаиләгеҙҙе, туғандарығыҙҙы һәм яҡындарығыҙҙы ярҙамыбыҙҙан ташламабыҙ. Һеҙгә ныҡлы вәғәҙә бирәм. Тап ошо майҙандан ата-бабаларыбыҙ фашистарға ҡаршы һуғышҡа киткән. Бөгөн һеҙ ошо хәрби батырлыҡты дауам итәһегеҙ. Минең артта - генерал Шайморатов һәйкәле. Уның "Салауат тоҡомдары сигенә белмәй!" тигән девизын онотмағыҙ. Һеҙҙең хәрби бурыстарҙы үтәп, иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуығыҙҙы көтәбеҙ", - тине Радий Хәбиров батальон яугирҙарына мөрәжәғәт итеп.

Республика етәксеһе хәрби подразделение командиры, подполковник Дмитрий Ф.-ҡа Салауат Юлаев исемендәге башҡорт батальоны байрағын тапшырҙы. "Батальондың шәхси составы араһында - 48 хәрби хәрәкәт ветераны, 12 яугир махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан. Салауат Юлаев исемендәге батальондың шәхси составы исеменән һеҙҙең ышанысығыҙҙы аҡларбыҙ, хәрби бурыстарҙы лайыҡлы һәм намыҫлы үтәрбеҙ тип ышандырам", - тине батальон командиры.

Рәсәй Федерацияһы милли гвардияһы ғәскәрҙәренең Волга буйы округы командующийы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы генерал-лейтенант Руслан Султыгов үҙ сығышында 81 йыл элек, 1941 йылдың декабрендә, данлыҡлы 112-се Башҡорт атлы дивизияһының ойошторолоуы һәм уның командиры итеп хәрби генерал Миңлеғәле Шайморатовтың тәғәйенләнеүе хаҡында тағы бер тапҡыр иҫләп үтте.

Тантаналы марш менән атлап үткәс, батальон яугирҙары туғандары һәм яҡындары менән хушлашты.

*ИҪКӘРТЕҮ*

# МУТЛАШАЛАР

**Эске Эштәр министрлығы матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәренә ярашлы, йыл башынан Башҡортостанда IT-технологиялар ярҙамында ҡылынған енәйәттәрҙең һаны 5 меңдән ашып киткән. Банк карталарынан аҡса урлауҙың 3 мең осрағы теркәлгән, уларҙың 1200 тирәһе генә судҡа барып еткән. Телефон аферистары, интернет тауарҙарын "һатыусылар" һәм фейк һатып алыусылар 2022 йылдың 10 айы эсендә 300 млн һумға байыған. Уларҙың араһында иң ҙур "табыш" - 3 млн һум.**

• Ведомстволың Енәйәттәрҙе тикшереү бүлеге начальнигы урынбаҫары полиция полковнигы Алексей Солодянкин әйтеүенсә, был төр енәйәттәр артҡан. Мутлашыусылар яңынанъяңы ысулдар ҡуллана, үҙҙәренең алдау схемаһын камиллаштыра бара. Шулай уҡ бындай төр енәйәттәрҙе асыҡлау осраҡтары ла йышайған, мәҫәлән, дистанцион мутлашыусыларҙы тоҙаҡҡа эләктереү һөҙөмтәһендә быға тиклем асыҡ булмаған 60-ҡа яҡын факт билдәле булған.

• Заманса технологиялар мутлашыусыларға үҙенең урынын алыштырып тороу мөмкинлеген бирә. Виртуаль рәүештә улар Рәсәйҙә ултырып та, сит илдә булып та күренә ала, йәки - киреһенсә.

• Телефон номерын ҡайҙан алалар? Бер фараз буйынса, мутлашыусы кешенең ҡайһы банктың клиенты булыуын белмәйенсә шылтыратыуы ла ихтимал. Кеше банк, ундағы иҫәбе тураһында үҙе һөйләй. Икенсе бер фараз буйынса, интернетта төрлө сайттарҙа ҡалдырылған мәғлүмәттәр күп, базаның шулар буйынса тулыланыуы ла ихтимал.

• Банк хеҙмәткәрҙәре шылтыратып, ниндәйҙер хеҙмәт тәкдим итә алмай. Әгәр ҙә шундай шылтыратыу булып, һеҙгә кредит картаһы асылыуы тураһында хәбәр итәләр икән, был мутлашыусылар. Әгәр ҙә кеше теге йәки был банктың ВИП-клиенты һәм уның үҙенең персональ менеджеры бар икән, ул ысынлап та шылтырата ала. Банктан шылтыратып, офисҡа ғына саҡыра алалар. Ә инде шылтыратып, үҙҙәрен банктан тип таныштыралар икән, бындай номерҙар тураһында банкка хәбәр итергә кәрәк.

• Мутлашыусының аныҡ портреты юҡ. Интернет енәйәттәр менән йәштәр күберәк булыша. Етдирәк схемаларҙы 25 йәштән олораҡ махсус ойошторолған төркөмдәр башҡара.

• Бер йыл элек кенә башлыса йәштәр һәм пенсия йәшендәгеләр ҡаба ине мутлашыусылар тоҙағына. Хәҙер 30-35 йәшлектәр "эләгә", улар эшләп йөрөүсе кешеләр һәм күпмелер аҡсалары ла бар, шуны төрлө юл менән арттырырға тырышыу уларҙы мутлашыусы ҡорбаны итә. Пенсионерҙар ҙа инвестицион тәкдимдәргә алдана. Һөҙөмтәлә, бурысҡа, кредиттарға бата. Пенсионер - граждандарҙың иң алданыусы категорияһы.

• Иң йыш осраған ысул - ул инвестициялар. Икенсе урында - үҙен банк хеҙмәткәре тип таныштырып, төрлөсә аҡса урлаусылар.

Шулай итеп, барыһы ла кешенең үҙенән тора. Таныш булмаған номерҙан шылтыраталар икән, һөйләшеп тә тормағыҙ. Үҙҙәрен банктан тип әйтеүселәрҙең номерын банкка тапшырығыҙ. "Туғаныҡыҙ аварияға эләккән" схемаһы буйынса шылтыратыу булған икән, иң тәүҙә яҡыныҒыҙ менән үҙегеҙ бәйләнешкә сығығыҙ. Бик булмаһа, был хәл буйынса күршегеҙ менән кәңәшләшегеҙ. Паникаға бирелеү мутлашыусыға ярҙам ғына итәсәк. Күп осраҡта РФ Енәйәт кодексының 159-сы статьяһы буйынса енәйәт эше ҡуҙғатыла. Унда мутлашыусыларға ҡарата максималь һәм минималь санкциялар ҡаралған.

**"Башинформ"дан.**

*ҠЫҪҠАСА*

# ИҢ ОҘОН ҺЫРҒАЛАҠ

**Өфөнөң Ағиҙел йылғаһы буйында иң оҙон боҙ һырғалағы эшләй башланы, тип хәбәр итә ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте.** Ул "Торатау" конгресс-холынан түбәндәрәк урынлашҡан. Оҙонлоғо - 800 метрҙан ашыу. Һырғалаҡ көн һайын эшләй: дүшәмбенән кесаҙнаға тиклем - көндөҙгө сәғәт 2-нән киске 9-ға, йома-йәкшәмбе - көндөҙгө 12-нән киске 10-ға тиклем. Үҙеңдең конькиҙарың менән инеү бушлай. Быйыл ҡыш Өфөлә бөтәһе 31 һырғалаҡ һәм 90 хоккей майҙансығы эшләй, шуларҙың 9-ы - ҡышҡы футбол өсөн (боҙһоҙ). Майҙансыҡтар яҡтыртылған, шуға күрә хоккей яратыусылар кис көнө лә уйнай ала. Бынан алдараҡ "Башинформ" "Салауат Юлаев"тың "Өфө-Арена" алдында көйәрмәндәр өсөн бушлай һырғалаҡ асыуы хаҡында яҙғайны.

✓ **Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығы хәбәр итеүенсә, һуңғы өс йылда баш ҡалала арт-объекттар, төҙөкләндерелгән скверҙар һәм парктар һаны артҡан һайын, вандаллыҡ күренештәре лә йышая.** Уларҙың күпселеге йәмәғәт урынындағы милекте урлау йәки боҙоуға бәйле. Вандаллыҡты иҫкәртеү һәм булдырмау өсөн төрлө саралар күрелә, бигерәк тә йәмәғәт урындарына видеокүҙәтеү системаһын урынлаштырыу өҫтөнлөккә эйә. Һуңғы өс йылда Өфөлә видеокамералар алты тапҡырға артып, 2284 берәмеккә еткән. Вандаллыҡты күҙәтеүгә халыҡ дружинаһы ла йәлеп ителә. Берлектәге саралар барышында 1086 административ хоҡуҡ боҙоу, шул иҫәптән 104 бәләкәй хулиганлыҡ иҫкәртелгән. Тәжрибә күрһәтеүенсә, вандаллыҡтың таралыуына милек, ҡоролма һәм башҡа объект хужаларының хоҡуҡ һаҡлау органдарына милектең ҡыйратылыуы тураһында бик мөрәжәғәт итеп бармауы сәбәпсе. Һөҙөмтәлә вандалдарҙа язаһыҙлыҡ һәм башбаштаҡлыҡ ҡылыҡтары арта.

✓ **Башҡортостанда махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына 33 ярҙам сараһы 2023 йылда ла ғәмәлдә ҡала.** Был хаҡта Башҡортостан юлдаш телеканалы эфирында республиканың киләһе йылға бюджетына арналған брифингта Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - финанс министры Лира Иғтисамова хәбәр итте. Атап әйткәндә, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары 2022 йыл өсөн транспорт һалымын түләүҙән тулыһынса азат ителә. Льгота һәр типтағы бер транспорт сараһына (автомобиль, трактор һәм башҡалар) ҡағыла.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Ҡул һыҙлаһа

❖ Ҡулдың быуындары һыҙлағанда 10 литрлыҡ кәстрүлдә һыу ҡайнатып, бер ус ваҡланған кесерткән һалырға. Тағы ла 5 минут тотоп, уттан алырға. Шунан 10-15 минут төнәтергә лә, тасҡа ҡойоп алырға. Ошо һыуға 15 минут тирәһе ҡулдарҙы тығып ултырырға, һыуынған һайын өҫтәп торорға. Ҡулдарҙы төнәтмәлә тотҡан көйө тәүге бер нисә көндә 5-7 минут, аҙаҡ 3-5 минутлыҡ еңелсә генә массаж яһарға. Шунан алтын мыйыҡ (золотой ус) йәки гөлйемеш төнәтмәһе менән ҡулдарҙы ыуып, бейәләй кейергә һәм йоҡларға ятырға. Был рәүешле 5-7 тапҡыр дауаланғандан һуң ҡулдар һыҙлауҙан туҡтай, кәрәк булғанда бер айҙан һуң ҡабатларға мөмкин.

### Сиҡан

❖ Сиҡан йәки эренле шештәрҙән сөгөлдөр ярҙам итә. Дауаны әҙерләү өсөн сөгөлдөрҙөң әллә ни ҙур булмаған киҫәген ваҡ ҡырғыс аша үткәрергә. Бер ҡалаҡ ҡырылған сөгөлдөрҙө табаға һалып, өҫтөнә бер балғалаҡ бал өҫтәргә. Сөгөлдөр һәм балдың һуты осоп бөткәнсе болғата-болғата талғын утта ҡыҙҙырырға. Ошо ҡатышманы йылы көйөнсә бер нисә ҡат бөкләнгән ҡулъяулыҡҡа һалырға, ә уны үҙ сиратында - пленкаға. Был буҫтаманы сиҡан һәм эренле шеш өҫтөнә ҡаплап, төнгөлөккә ҡалдырырға.

### Төшөнкөлөк

❖ Күңел төшөнкөлөгөнән (депрессия) дауаланғанда халыҡ ысулын да ҡулланыу ярҙам итеүе ихтимал. 3 өлөш арыҫлан ҡойроғо, 1 өлөш бөтнөк, 1 өлөш мәтрүшкә үләндәрен, 1 өлөш шифалы ромашка сәскәһен бергә ҡушырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ 1 өлөш һары мәтрүшкәгә (зверобой) 5 өлөш араҡы ҡойорға. 3-4 аҙна төнәтергә. Был төнәтмәне ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр ярты стакан һыуға 40-50 тамсы тамыҙып эсергә.

❖ Спиртлы дауаларҙы ҡабул итә алмаған осраҡта, һары мәтрүшкә төнәтмәһен һыуҙа эшләргә мөмкин. Бының өсөн 1-2 ҡалаҡ һары мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/3 стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

## Һаҡал

Элек-электән кейем халыҡтың йәшәү рәүешен, көнитмешен, миллилеген һ.б. үҙенсәлектәрен билдәләгән. Кейемдең йәш үҙенсәлектәренә тура килеүенә халыҡ айырыуса ҙур әһәмиәт бирә. Быны беҙ, мәҫәлән, XIX быуаттың күренекле мәғрифәтсеһе М. Өмөтбаевтың "Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы" исемле әҫәрендә күрәбеҙ:

*"...Һаҡал, таҡыя кейер -*
*йәш ҡыҙ балалыр,*
*Тубый ҡашмау кейгән -*
*ҡатын булалыр".*

Тап кейемгә ҡарап кешенең ҡайһы яҡтан икәнлеген асыҡлай алғандар ҙа инде. Ундай күренештәр бигерәк тә халыҡ ижадында асыҡ сағылыш тапҡан. Мәҫәлән, "Ҡара юрға" эпосында Мәсем байҙың ҡыҙы Маҡтымһылыу Күсәрбайҙың улы менән осрашҡас, кейеменә иғтибар итә һәм уның ҡайҙан икәнлеген әйтә:

*"Атың ауыҙы күбеккән,*
*Татыр ялар малға оҡшай,*
*Сабыуың ҡыйпып тегелгән,*
*Ялан яғы иргә оҡшай".*

Музей фондтарында һәм шәхси коллекцияларҙа һаҡланған өлгөләрҙән күренеүенсә, "һаҡал" (Дим һөйләшендә "саҡал") булараҡ билдәле һәм Илеш, Борай, Дүртөйлө, Баҡалы, Благовар, Кушнаренко, Нуриман, Шишмә, Дәүләкән, Ҡырмыҫҡалы, Архангел, Белорет, Бәләбәй, Бүздәк, Ауырғазы, Әлшәй, Ғафури, Миәкә, Стәрлетамаҡ, Бишбүләк, Стәрлебаш, Ишембай, Әбйәлил, Федоровка, Күмертау, Ейәнсура райондары һәм Һарытау өлкәһендә таралған биҙәнеү әйберенең дә төбәк үҙенсәлектәре бар. Мәҫәлән, С.Н. Шитова яҙыуынса, Дим буйы һәм Туҡ-Соран башҡорттарындағы биҙәүестең билдән аҫҡараҡ төшөп торғандары ла, 20 сантиметрлыҡтары ла булған. Ғәҙәттә урта өлөшөндә тәңкәләр, көмбәҙҙәр урын ала. Ситендә иһә бер нисә рәт мәрйен һәм ишелгән сылбыр була. Шулай уҡ шөңгөр, тимер нигеҙгә беркетелгән аҡыҡ бөртөктәр урын ала. Шундай һаҡалдың матур бер өлгөһө М.В. Нестеров исемендәге музейҙа һаҡлана. Тап ошонда мәрйендәрҙең ҡулланылыуы һәм нигеҙгә тегелгән махсус яғаның барлығы күренә.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

ТАБИП КӘҢӘШЕ

# ҺАУ БУЛЫҒЫҘ, ЯҢЫ ЙЫЛ КИЛӘ!

**(Башы 3-сө биттә).**



Иғтибар итһәгеҙ, көслө заттың бик күбеһе 45, 50, 55, хатта алтмышта был донъя менән хушлаша. Икенселәрҙең Яңы йыл байрамы, һигеҙенсе март, туғыҙынсы майҙан һуң бер нисә көн үткәс вафат булғаны хаҡында ла ишеткәнегеҙ барҙыр. Быңа ошо түңәрәк һандарҙы, байрам көндәрен тигеңгә генә килтермәнем, ҡәҙерле дуҫтар. Юбилей кисәләрендә йә берәй оло байрамда саманан тыш артығыраҡ "ашап ташлау" арҡаһында китеп бара күптәр. Рәйес Түләк әйтмешләй, "Мин уларға берсә көләп бағам, көйөп бағам, бағам илаптар. Ут күбәләгендәй гәйеп була имән яркаһындай ир-аттар".

"Запой" тип аталған төшөнсә менән һәр кем таныштыр. Арабыҙҙа шундай хәлгә тарыусылар ифрат та күп. Кешенең туктала алмай, көндәр, аҙналар буйы эсә башлауы - "алкоголизм" тип аталған сирҙең икенсе, өсөнсө стадияларының төп симптомдарының береһе медицинала ана шулай тип атала. Әкеше үҙенең быңа ошо ауыр сиргә һабышҡанын, ғәҙәттә, танығыһы килмәй. "Һинә дауаланырға кәрәк", тип әйтһәң, ғәҙәттә: "Нимә? Әллә мине алкоголик тип беләһеңме?" - тигәнерәк яуап ишетәһең. Ҡыҙғаныс, әммә эскелектән үлгәндәр араһында гүзәл заттарыбыҙ ҙа бар. Баштараҡ Башҡортостан буйынса килтергән 744 кешенең 225-е ҡатын-ҡыҙ икән. Бала ҡосоп, ир иркәләп, донъя ләззәтен татып, рәхәтләнеп йәшәйһе урынға, йәпйәш көйө араҡы ҡоло булып, хатта шул арҡала яҡты донъя менән хушлашыуҙан да ҡурҡмай бәгзе бер һылыуҙарыбыҙ. Әлбиттә, уларҙың күптәрендә инде ҡурҡыу һиҙәте лә ҡалмаған. Әлеге әйтмешләй, сирҙең кәмендә икенсе, хатта өсөнсө стадияһында булғанын үҙҙәре лә белмәй йөрөгәндәр күп. Күп кенә ир-ат тырышып, алкоголизмдан ҡотола алһа, ҡатын-ҡыҙҙың йүнәлеп киткән осраҡтары ла бик һирәк. Быңа ошо хаҡта гүзәлдәребеҙҙе иҫкәртеүҙе кәрәк тип һанайым.

Һәр кеше организмының төрлө һаҡлауысы механизмдары, шул иҫәптән, ҡанға килеп әләккән һәр төрлө ағыуҙарҙы зарарһыҙландыра торған функциялары ла була. Башҡа зарарлы матдәләр һымаҡ уҡ, спирт эсемлеге лә тән өсөн ағыу иҫәбендә. Тәндә алкоголде тарҡата торған ике фермент бар. Береһе алкоголь-дегидрогеназа тип атала (АДГ). Икенсеһе - ацетальдегид-дегидрогеназа (АЦДГ). Быңа шул ике ферменттың ҡандағы составын ғалимдар тикшереп ҡараған. Ер шарының төрлө төбәгендә йәшәгән кешеләрҙең ҡанында ул төрлөсә икән. Әлеге әйтмешләй, "бахмур синдром"ының ауырлығы тәндәге ана шул ферменттың күплегенән дә тора. Кавказ яҡтарында йәшәгән халыҡтың ҡанында был фермент кимәле башҡаларҙыҡына ҡарағанда күпкә юғары. Шуғамылыр, улар алкоголизм сиренә әллә ни "бирешмәй". Ә Себер халыҡтарының ҡанында АДГ, АЦДГ бөтөнләйгә юҡ кимәлендә тип әйтерлек. Шуға күрә лә ундай халыҡ вәкилдәре (әйтәйек, Чукотка кешеләре) араҡыны бер нисә тапҡыр эсеп ҡарағас та, шул ауыр сиргә һабыша, тигән фараз бар. Ә урта биләмәлә йәшәгәндәр, ғәҙәттә, айҙар, бәлки йылдар буйы "мәҙәни" рәүештә йә иһә унан әүҙемерәк эскәндән һуң ғына сирләй башлай.

Беҙҙең башҡорт халҡының да араҡыға "иммунитеты" әллә ни көслө түгеллеге хаҡында мәғлүмәт ишеткеләгәнем бар. Был бик борондо быуаттарҙа йәшәгән ата-бабаларыбыҙҙың эскелек менән булышмауынан килеләр тип уйлайым (сөнки ундай иммунитетҡа ихтыяж булмағандыр). Хәҙерге заман цивилизацияһына сыҡҡан милләттәштәребеҙҙең ҡайһыларының эсеү мәсьәләһенә ҡағылышлы "йомшаҡ" яғын ана шул фактор менән бәйләргә лә булалыр. Ҡыҫҡаһы, бындай нәмә беҙгә бөтөнләйгә килешмәй, йәмәгәт! Мең йылдар самаһы халҡыбыҙға Аллаһ рәхмәте менән килгән Ислам диненде лә хәмер ҡәтғи тыйыла бит. Тик һуңғы быуаттарҙа, айырыуса, Октябрь революцияһынан һуң, башҡа күп халыҡтарға оҡшарға тырышып, милләтебеҙ вәкилдәре лә ана шул нәмә менән булыша башлауы үкенесле. Ул гына ла түгел, хатта йолаларыбыҙға ла үтеп ингән эскелек. Туй йә иһә башҡа берәй сараны күптәр бөгөн хәмерһеҙ күҙ алдына ла килтерә алмай. Илебеҙҙәге бихисап байрамдар, тыуған көндәр ҙә ана шул нәмә менән "көйефләнә". Хәмер эсеүҙе хуплаусы таҡмаҡтарыбыҙ ҙа бихисап хәҙер. "Эсер-эсмәй ултырғансы, эс, төптәрен күргәнсә! Эсәң төптәрен күргәнсә, риза булам үлгәнсе", тип, шайтан үәсүәсәһен ҡабатлауҙар йыш ҡына мәжлестәребеҙҙе оҙата бара. Бәгзеләр, тәртип һаҡлап, ысынлап та, "мәҙәни" рәүештә генә эсә. Икенселәр артығыраҡ төшөрөп ташлай, артабан баш төҙәтә торғас, әлеге ауыр сиргә лә һабыша...

Өсөнсөләр бөтөнләйгә эсмәй, әммә, ана шул "күңелле" мәжлесте ҡарап, шундағы кешеләрҙең бер-береһен көсләй-көсләй эсереүен хуплап, шунан ҡәнәғәт таба. Быңа ошо өсөнсө категория яҡташтарым менән дә һис кенә риза түгелмен. "Егеттәр, һеҙ миңә иғтибар итмәгеҙ, эсегеҙ, мин заманында үҙемә етерлеген эскәнмен", йә иһә, "Мин дин тотам бит, миңә гонаһ була, һеҙ - йәш кешеләр, үҙегеҙҙең мәйелегеҙ..." тип ултырған шундайҙарға үпкәм бар. Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) Аллаһ Тәғәләнең хәмергә бәйле булған бөтә ғәмәлдәрҙе лә ләғнәтләүе хаҡында әйткән. Ул хәмерҙе яһау булһынмы, уны ташыу, һатыу, һатып алыу йә кемгәлер һалып биреү - былар барыһы ла ана шул оло гонаһҡа инә. Мәжлестәге сәкәштереп ултырғандарҙың "матур" тостарын күтәреп алыу ҙа тап ана шундай килешмәгән ғәмәлдәрҙән булһа кәрәк. Хөкүмәтебеҙ бәгзе бер байрамдар алдынан магазиндарҙа араҡы һатыуҙы тыйыу йә хәмер кибеттәренең эш сәғәтен сикләү һымаҡ саралар күргәләй ҙә ул, әммә эсәм тигән кеше барыбер үҙенә кәрәген таба инде ул. Ошо мәсьәләлә һәр кемебеҙ үҙебеҙҙең, яҡындарыбыҙҙың һаулығын, хатта ғүмерен ҡайғыртырға тейешбеҙ, минеңсә.

Баштараҡ ил буйынса бер аҙ статистик мәғлүмәттәр килтергәйнем бит әле. Бындай статистика менән бер кемде лә аптыратып булмай хәҙер, уға барыбыҙ ҙа күнегеп бөткәнбеҙ. Шуға күрә лә һәммә яҡташыма үҙенең тыуып үҫкән ауылындағы "статистика"ға күҙ һалырға тәҡдим итергә булдым. Ысынлап та, һуңғы бер нисә тиҫтә йылды ғына алып ҡараған хәлдә лә, һәр бер ауылда араҡынан ағыуланып, шул арҡала йөрәге туҡтап йә аҫылынып, йә булмаһа, аварияға осрап үлгән кешеләр һаны әллә күпме бит! Хатта ҡайһы бер ғаиләлә бер нисә ағай-эне бер-бер артлы ана шул сәбәпле "китеп бөткән". Ә ҡалғандары, шунан ғибрәт алаһы урынға, әле булһа шул уҡ араҡы менән "ҡайғыһын йыуыуын" дауам итә. Ә иң үкенеслеһе шунда: башта әйтеп үткәндәй, типһә тимер өҙөрҙәй ирҙән үлемендә һәр саҡ тиерлек уның хәләл ефете - "яуыз килен ғәйепле". Сөнки был "кешелекһеҙ ҡатын иренә бахмурға аҡсаһын йәлләгән"...

Илебеҙҙә йәштәрҙе эскелеккә ҡаршы тәрбиәләүсе рекламалар, спектаклдәр, фильмдар йышыраҡ күрһәтһәләр яҡшы булыр ине, минеңсә. Унда-бында "запой хәленән сығарыусылар", йә эсеү һәм тартыуҙан "кодировка" яһаусыларҙың рекламалары күренеп ҡалғылай ҙа ул. Элек ҡасандыр булған айныткыстарҙы ла ҡабаттан аяҡҡа баҫтырыу хаҡында мәсьәләләрҙе әленән-әле күтәргеләйҙәр. Әммә бындай сараларҙы бөтә илде баҫып алған ана шул афәткә ҡаршы көрәш тип һанап булмай. Һыҙлаған теште анальгин менән дауалау һымаҡ ҡына булып тойола миңә улар.

Һәр яңы йыл етеп килгәндә бөтә телеканалдарҙа "Ирония судьбы, или С легким паром" тип аталған кинокомедияны күрһәтәләр бит әле. Шул хаҡта ла бер аҙ фекерләп китеүҙе кәрәк тип таптым. Һүҙ юҡ, фильм ифрат ҡыҙыҡлы. Әммә күренекле актерҙар оҫта итеп уйнаған, хатта халыҡ яратҡан тамашаларҙың барыһын да зыянһыҙ ғына икән тип ҡабул итеү ярамаҫ, минеңсә. Иҫереклек арҡаһында ысын мөхәббәтте табыу ихтималлығын күрһәткән ошо фильм халыҡта, айырыуса йәш быуындың аңында, эскелеккә ҡарата "ихтирам тойғоһо" уяткан һымаҡ тугелме? Һәр хәлдә, мин йәш сағымда уны ана шулай ҡабул иттем. Ошо мәсьәләгә ҡарата фекерҙәштәрем булыуына ла шикләнмәйем. Уның ҡарауы, элегерәк, СССР мәлендә "Улан" тип аталған ҡырғыҙ фильмын ҡарағаным хәтеремдә. Бер яҡшы ир-егет яңылыш ҡына эскелек юлына баҫып, бер аҙҙан унда "алкоголь психозы" (белая горячка) башлана. Ирҙең күҙенә күренгән имәнес йән әйәләрен оҫта итеп ҡуйғандар был фильмда. Йәш, һылыу ҡатыны, яратҡан улын күтәреп, өйөнән сығып китә. Бик ҡыҙғаныс кино. Йәштәр өсөн ана шундай эстәлекле спектаклдәр, башҡа тамашалар йышыраҡ күрһәтһәләр, ифрат та файҙалы булыр ине.

Әле тағы сираттағы Яңы йыл байрамы яҡынлашып килә. Шундай даталар иҫкә төшкән һайын, күңелдә тынысһыҙлыҡ баҫа, йәмәгәт. Сөнки кемдәрҙер шул мәлдә арыу ғына эсмәй йөрөгән ерҙән "ысҡынып" китә, икенселәр өсөн байрам - сираттағы "көтөп алған" эскелек. Һуңынан сирләп йә ҡышҡы һыуыҡта урамда туңып үлеү осраҡтары, ғаилә ығы-зығыһы, хатта тарҡалыу ҡурҡынысы хаҡында ла онотмайыҡ. Бәгзе ваҡыт енәйәткә лә сәбәпсе була бит быңа ошо эскелек тигән нәмә. Ана шул афәттән үҙебеҙҙе, яҡындарыбыҙҙы һаҡлап алып ҡалайыҡ, ҡәҙерле туғандар!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

*✓ Бай һәм көслөрәк ҡәбилә төркөмдәренең, йыл һайын көҙгө-ҡышҡы миҙгелдәргә көньяҡ далаларына күсеп китеп, яҙ һәм йәй айҙарына яңынан ҡайтып йөрөүен ышаныслы рәүештә раҫларға мөмкинлек бирә.*



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы



### Дах-сак-массагет ҡәбиләләренең йәшәү рәүеше һәм мәҙәниәте

Көньяҡ Урал халыҡтарының яҙма сығанаҡтар аша билдәле булған ҡатмарлы составы археология ҡомартҡыларында аныҡ сағылыш таба. Диаметры 20-50 м, бейеклеге 0,5 метрҙан 2-6 метрға еткән ер ҡурғандар ҡомартҡылар араһында иң күп һанлы төркөмдө тәшкил итә. Көньяҡ Уралда, урманлы дала райондары менән ҡуша алғанда, ошондай ҡурғандар киң таралыу тапҡан. Бында байтаҡ ҡына йылға атамаларында Ыҡ (Даик) һүҙе булыуын иҫәпкә алғанда, ошо бик киң таралған ҡурғандар тибының дахтарҙан (дай, даих) ҡалғанлығы хаҡында фараз итеп була. XX быуат башында ошондай ҡарашты тәүләп академик М.И. Ростовцев тәҡдим итә. Ул сактар һәм дах-массагеттар араһында бер ниндәй ҙә айырма күрмәй һәм уларҙы күп һанлы берҙәм халыҡ итеп ҡарай. Көнсығыш Европаның иртә күсмә ҡәүемдәре тарихы һәм мәҙәниәтен өйрәнеүсе күренекле ғалим К.Ф. Смирнов үҙенең һуңғы хеҙмәттәрендә ошо хаҡта бик инанып яҙа.

Дах-массагет ҡәбиләләре мәҙәниәтенең формалашыуы б.э. тиклем VII-VI быуаттарға тура килә, һәм ул б.э. тиклем III-II быуаттарға еткәнсе бер өҙлөкһөҙ йәшәй. Иң элгәре, ошо төркөмгә ҡараған ҡурған ҡәберлектәренең б.э. тиклем VII-VI быуаттарҙа барлыҡҡа килеп, артабан бер нисә быуат дауамында файҙаланылыуы фактын ошоға дәлил итеп ҡарау фарыз. Ошондай ҡәберлектәрҙең барлыҡҡа килеүе өсөн ҡәбиләнең билдәле бер территорияла оҙайлы ваҡыт дауамында күсеп йөрөүе шарт булып тора. Тимәк, малсылыҡ менән шөғөлләнгән халыҡтың төп өлөшөнөң аныҡ йәшәү территорияһы булған, айырым ырыу-ҡәбилә төркөмдәре ошо ерҙәрҙә күсеп йөрөй алған. Бында күсенеп йөрөү йәйләүҙәргә, тау буйҙарындағы көтөүлектәргә сығып йөрөүҙе аңлата. Билдәле булған ҡомартҡыларҙың топографияһын иҫәпкә алып, тикшеренеүселәр ошондай күсеп йөрөү радиусының 200 - 400 километрҙан да артыҡ булмауын фараз итә. Ҙур ырыу-нәҫел ҡәберлектәре, күрәһең, ҡышлау тарафтарында, йәғни малдарҙы ҡышлатыу өсөн уңайлы булған урындарҙа барлыҡҡа килгән. Быңдай урындар урманлы йылға үҙәндәрендә, ҡар ҡатламы йоҡараҡ, малдарға тибендә йөрөргә уңайлы шарттар булған тау һырттарына яҡын ерҙәрҙә булған. Бында дах-массагеттар бүрәнә өйҙәр төҙөгән. Ошондай ҡоролмаларҙың примитивыраҡ булған тибы, яҫы йә иңә ике яҡлы түбәле ер өйҙәренә оҡшатып эшләнеп, кеше торлағының ҡаберҙәге имитацияһын хасил иткән.

Шул уҡ ваҡытта сығанаҡтарҙың хәҙерге кимәле дах-массагеттарҙың ҡайһылыр бер өлөшөнөң, күрenеүенсә, бай һәм көслөрәк ҡәбилә төркөмдәренең, йыл һайын көҙгө-ҡышҡы миҙгелдәргә көньяҡ далаларына (Арал диңгеҙе буйҙарына, Төньяҡ Каспий тарафтарына) күсеп китеп, яҙ һәм йәй айҙарына яңынан Көньяҡ Уралға ҡайтып йөрөүен ышанаслы рәүештә раҫларға мөмкинлек бирә. Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа Көньяҡ Урал һәм Көньяҡ Ҡаҙағстан, иң элгәре Арал буйы ҡәбиләләре араһында иртә тимер быуаты эпохаһында тығыҙ, даими этномәҙәни һәм хужалыҡ итеү берлеге булыуы хаҡындағы положение А.Д. Таиров һәм С.Ю. Гуцапов хеҙмәттәрендә ныҡлап үҫтерелде. Уларҙың Урал-Арал территорияһын хатта бер мәҙәни-тарихи өлкә итеп ҡарарға тәҡдим итеүе лә хаҡлы.

Алғараҡ китеп, ошо Урал, Арал һәм Каспий алды араларында күсеп йөрөүҙең меридиональ тип аталған формаһы, күрәһең, бронза (энеолит) эпохаһында уҡ барлыҡҡа килеп, боронғо һәм урта быуаттар осорона, XVII-XVIII быуаттарға тиклем дауам иткәнлеге хаҡында әйтергә була; быңдай менәр йыллыҡ бәйләнештәрҙең өҙөлөүенең мөһим сәбәбе итеп Көньяҡ Уралда рустарҙың сик буйы ҡәлғәләре төҙөлөүен атарға була.

Дах-массагет ҡурғандарында Урта Азиянан килтерелгән фляга, сүлмәк һәм башҡа төрлө һауыт-һабаларҙың, шулай уҡ төрлө ювелир әйберҙәренең киң таралған булыуы ошондай меридиональ күсеп йөрөүҙе раҫлаусы дәлил булып тора. Ситтән килтерелгән һауыт-һаба шул тиклем күп, уның сауҙа итеү аша ғына был яҡтарға килтерелеүе хаҡында фараз итеп булмай. Күрәһең, ул йыл һайын әле аталып китеlгән яҡтарға һәм кирегә күсеп йөрөү барышында килтерелгәндер.

Ҡаҙыу эштәре барышында табылған хайуан һөйәктәренә ҡарағанда, дах-массагеттар, башлыса, йылҡы малы һәм һарыҡ үрсеткән, эре мөгөҙлө малдары аҙыраҡ булған. "Массагеттар ашлыҡ сәсмәй, әммә малсылыҡ һәм балыҡ тотоу менән көн күрә... шулай уҡ һөт эсәләр", - тип яҙа антик авторҙар Көньяҡ Урал далалары күскенселәренең йәшәү рәүеше хаҡында.

Яңы эпоханың үҙенсәлеге ҡурғандар материалында бик асыҡ сағылыш таба. Үҙҙәренең ҡоролошо һәм табылдыҡтар составы буйынса ҡурғандар ҡатмарлы һәм күп компонентлы, әммә ошо барса күп төрлөлөк Ҡаҙағстан һәм Көнсығыш Европаның көньяғында малсылыҡ менән көн итеүсе ҡәбиләләр мәҙәниәте өсөн берҙәй үк оҡшаш. Бронза быуатының археологик мәҙәниәттәре материалдарында күҙәтелгән яҡынлыҡ хәҙер универсаль төҫ ала. Был - киң Евразия далаларында малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе ҡәбиләләрҙең күсмә тормош тәртибенә (укладына) күсеүенең әһәмиәтле һөҙөмтәләренең береһе, ул матди етештереү, рухи мәҙәниәт һәм ижтимағи мөнәсәбәттәр өлкәләрендәге ҡаҙаныштар менән әүҙем рәүештә бәйләнеп торорға булышлыҡ итә.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

УҠЫУСЫ ХАТЫ

# УРАЛЫБЫҘ...

## ата-бабалар тауы



**Мәктәп дәреслектәренән билдәле булыуынса, Рәсәйҙең тарихсы-ғалимдары гректарҙың "Одиссея", "Троя" эпостары беҙҙең эраға тиклем VIII быуаттарҙа ижад ителгән тип раҫлай. Ә Салауат Ғәлләмов "Урал батыр" эпосының грек поэмаларынан сама менән 500 йылға боронғораҡ булыуын иҫбат итте. Шулай булғас, беҙҙең эпосыбыҙ беҙҙең эраға тиклем XIII быуаттарҙа ижад ителгән була. Хәҙер уға 3322 "йәш".**

Ошо тиклем ваҡыт араүығында телдән-телгә яттан һөйләнелеп, ул Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәребеҙгә килеп етә. Ә 1910 йылда Мөхәмәтша Буранғолов сәсән эпосыбыҙҙы аҡ ҡағыҙға теркәп, уны үлемһеҙ итә. Халҡыбыҙҙың бик боронғо замандарҙан уҡ килгән аҡылына, белеменә хайран ҡалырлыҡ. Үҙе тыуып-үҫкән мөхитте генә түгел, бөтә ғаләмде теүәл күҙ алдына килтерә алған, әйтерһең дә, хәҙерге кеүек, мәктәптәрҙә география фәнен уҡығандар! Мәҫәлән, Урал:

*"Үҙем йәп-йәш булһам да,*
*Биш ил барын белдем мин,*
*Береһендә үҙем тыуҙым,*
*Икеһен йөрөп күрҙем мин,*
*Ҡалған тағы икеүһен*
*Күрергә тип сыҡтым мин"*, - ти.

Эпоста Урал батырыбыҙ ҡылысы менән дейеүҙәрҙе турай-турай алға табан бара, уның артынан тауҙар, ҡоро ерҙәр күтәрелә, ә халыҡ был ерҙәрҙә үҙләштереп, шатланышып йәшәй башлай. Малдар үрсетә, иген сәсә һ.б. Ғалимдар раҫлауынса, бик борон Ерҙә боҙлоҡ ҡапланған булған. Күпмелер ваҡыттан боҙлоҡ ирей башлаған, һыуҙары ағып китеп, ҡоро ерҙәр һәм беренсе булып тауҙар һыу аҫтынан ҡалҡып сыҡҡан. Халҡыбыҙ ижад иткән эпоста ла тәбиғәттәге ошо күренеш тасуирланманымы икән, тигән һорау тыуа. Тауҙар, ҡоро ерҙәр барлыҡҡа килгәс:

*"Ай, көн һайын Уралға*
*Төрлө йәнлек тулған, ти.*
*Шул йәнлектәр, ҡош-корттар*
*Килеү көнө кешегә*
*Ай, йыл һанын белеүгә*
*Исем булып киткән, ти".*

Ә ни өсөн төрлө йәнлек, хайуан исеме менән йөрөтөлгән календарҙы әлеге ваҡытта Көнсығыш календары тип атайбыҙ һуң?

Донъяның иң ҡарт, иң ҙур тауҙарының береһе башҡорт батырының исемен йөрөтә икән һәм уның исеме менән бәйле эпос халҡыбыҙ тарафынан меңәр йылдар буйына онотолмай һаҡлана икән - был үҙе бер мөғжизә бит!

**Р. БАСИРОВ,**
**мәғариф һәм хеҙмәт ветераны.**
**Ғафури районы.**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

Днепр өсөн һуғыштарҙа яугирҙарыбыҙ массовый рәүештә героизм күрһәтә, ошоға тиклем Ҡыҙыл Армияның башҡа частарында ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә шул тиклем иҫ киткес ҡаһарманлыҡ һәм фиҙаҡәрлек өлгөләре күҙәтелмәй. Йөҙәрләгән офицер, сержант һәм рядовой яугирҙар орден һәм миҙалдар менән наградлана, СССР Юғары Совет Президиумы Указына ярашлы, бер юлы 55 яугир Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Донбасс ерендә батырҙарса һәләк булып ҡалған комдив, генерал-майор М.М. Шайморатов вариҫтары дивизиябыҙҙың яугирлыҡ данын быуаса күрелмәгән бейеклеккә күтәрә.

27 сентябрь иртәһенә 58-се гв.атлы полкының барса эскадрондары ла уң яҡ ярҙа плацдарм биләй, бер өҙлөкһөҙ дошман һөжүмен кире ҡағып тора. Полк командиры, гв. подполковнигы Таһир Кусимов, һәр саҡтағыса, иң ауыр һәм хәл иткес мәлдә яугирҙары менән бергә була. Ул эскадрон командирҙарын йыйып алып, яугирҙар алдында яңы бурыстар ҡуя. Хәҙер инде плацдармды дошманға бирмәү генә түгел, уны артабан киңәйтеү талап ителә. "Беҙ Ватаныбыҙ өсөн һуғышабыҙ, изге бурысыбыҙҙы намыҫ менән үтәп, халҡыбыҙ ышанысын аҡлайыҡ", - тип рухландыра командир яуҙаштарын. Эскадрон командирҙары полк командиры ҡуйған бурысты яугирҙарға еткерә, ҡылыссы, ут һәм миномет взводтарына һөжүмгә әҙерләнергә бойороҡ бирелә.

А.М. Рудойҙың 4-се һәм Петр Язенконың 2-се десант эскадрондары быға тиклем дә дошман менән алыштарҙа һынатманы. Полк командиры урынбаҫары, гв. капитаны Абдулла Әхмәҙиев та (Ҡырмыҫҡалы районының Ҡырмыҫҡалы ауылынан) 2-се эскадрон атлылары менән бергә ине. Башҡа эскадрондар ҙа хәл иткес алышҡа әҙерләнә. Нивки һәм Вяле ауылдары сигендә дошмандың оборона нығытмалары - окоптар, траншеялар, дзоттар: немецтар агасҡыуаҡтар менән ҡапланған ҡалҡыулыҡтарҙа уңайлы позициялар биләй. Уларҙың танкылары һәм үҙйөрөшлө орудиелары ла байтаҡ.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Беҙ үҫкәндә бөтәһе лә етеш йәшәмәне, әммә күрше-күлән, ауылдаштар араһында бер-береһенә ярҙамсыл, асыҡ йөҙлө, йылы мөнәсәбәттә булдылар.*



Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы

# МАТУРЛЫҠ

## Был гүзәл зат ҡулындағы

**"Матур ҡатын, ҡояш кеүек, бар донъяға нур сәсергә теләй", тигән бер тапҡыр һүҙле кеше. Был һүҙҙәрҙә йөҙ, буй-һын сибәрлеге тураһында ғына түгел, тәү сиратта гүзәл заттың күңел торошона бәйле ынтылышы сағылыш тапҡандыр һымаҡ. М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрынан килгән ҡунаҡтарыбыҙ - Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған, Башҡортостан һәм Татарстандың халыҡ артисы Илсөйәр Ибраһим ҡыҙы ҒӘЗЕТДИНОВА һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Сара Абдулхай ҡыҙы БУРАНБАЕВА менән әңгәмә ҡорғанда матурлыҡ темаһы, әлбиттә, үҙәктә булды.**

**Һеҙҙең өсөн матурлыҡтың асылы нимә?**

**Илсөйәр Ғәзетдинова:** Матурлыҡ тураһында һүҙ сыҡһа, мин тышҡы һылыулыҡты ғына уйламайым, ә кешенең күңел байлығын өҫтөн ҡуям. Ҡайһы берәүҙең буй-һыны, йөҙө беҙ күнеккән матурлыҡ критерийҙарына тулыһынса яуап бирмәһә лә, уның күңел матурлығын тойорға мөмкин. Бындай кеше менән аралашыуы рәхәт, уға тартылаһың һәм уның бер йылмайыуынан бар донъя яҡтырып киткәндәй тойола. Шундай эске матурлығы менән балҡып йәшәгәндәр бихисап беҙҙең арала.

**Сара Буранбаева:** Матурлыҡ кешегә тәбиғәттән бирелгән сибәр йөҙ, зифа буй-һындан ғына тормай, матурлыҡ кешегә иң тәүҙә ғаиләлә атай-әсәй тәрбиәһе аша һалына. Донъяның матурлығын күрә белгән генә башҡаларға ла шул нурҙы өләшә ала, ә быға беҙ бәләкәйҙән ғаиләлә өйрәнәбеҙ. Мәҫәлән, беҙҙең әсәй барыбыҙҙы ла һөйөп-яратып үҫтерҙе, беҙгә иң яратылған, иң һөйкөмлө бала, тимәк, иң матуры ла һеҙ, тигән тойғоно ла һеңдерҙе. Был бит бик мөһим тәрбиә. Ошондай тәрбиә алмаған кеше матурлыҡтың ни икәнен тулыһынса аса ла алмайҙыр ул.

**Тимәк, матурлыҡты йөҙ-ҡиәфәтегеҙгә, күңелегеҙгә һалыусылар атай-әсәйҙәрегеҙ, тиергә буламы? Ғөмүмән, ниндәйерәк ине атай-әсәй эргәһендәге бала саҡ осороғоҙ?**

**Илсөйәр Ғәзетдинова:** Күңел йылыһын өләшеүсе кешеләр бала сағымда күп булды. Миңә нисә йәш булғандыр, атайымдың туғаны, ҡоҙаса тейеш Ғәйшә әбей беҙгә йәшәргә килде. Әсәйем уҡытыусы, мәктәптә ике сменала уҡыта, атайым көнө-төнө колхозда эшләй. Ә Ғәйшә әбей беҙгә, балаларға, күҙ-ҡолаҡ булып, тәрбиә-тәртипкә күндереп, апайым менән мине ҡул эшенә өйрәтеп, беҙҙең менән йәшәне. Әсәйем тары ярмаһынан тәкмәк - ҡабартма бешерә лә: "Балам, бар, Хәтирә әбейенә керетеп сыҡ, бар Яҡын әбейенә (Хөснә апайҙы шулай тип йөрөттөк), бар Сибәр әбейенә алып бар", - тип ебәрә. Беҙҙең ауылда Тәтәй әбей, Сибәр әбей, Аҡ әбей тигән һәм башҡа шундай матур ҡушаматлы кешеләр күп ине. Аҡ әбей тигәнебеҙ минең атайымдың ҡуныр йөҙлө апаһы, Тәтәй әбей тигәнебеҙ ғәрип кеше ине. Ошо инәйҙәргә барып инһәң, "Әҙерәк бейеп күрһәтмәйһеңме һуң?" тиҙәр. Үҙем көй әйтеп, өйөрөлөп бейеп күрһәтһәм, хушбуй һәм одеколондан бушаған һауыттарҙы уйнарға биреп сығарырҙар ине. Беҙ үҫкәндә бөтәһе лә етеш йәшәмәне, әммә күрше-күлән, ауылдаштар араһында бер-береһенә ярҙамсыл, асыҡ йөҙлө, йылы мөнәсәбәттә булдылар. Бына шуға ла мин дә бик ҡунаҡсылмын. Кемделәр саҡырып, яратҡан ризыҡтарым менән һыйлап ҡайтарһам, күңелемә рәхәт. Бына ошондай әйберҙәр бөтәһе лә бергә йыйылып, кешенең күңелен биҙәйҙер ҙә, беҙ кемгәләр ҡарап, уны матур тип беләбеҙҙер.

**Сара Буранбаева:** Мин төҫ-башҡа атайға ла, әсәйгә лә оҡшамағанмын, ә әсәйемдең бер туған апаһы Рауза инәйемә тартҡанмын. Ғөмүмән, әле Илсөйәр апай һөйләгәндәрҙе тыңлап, уйлап ултырам: ысынлап та, бала саҡта беҙҙе ғаиләлә яратып үҫтерҙеләр, ошо һөйөүҙе мин туғандарым яғынан да тоя инем. Атайым



мине малай булыр тип көткән. Ололар һөйләүенсә, мин имгәкләп йөрөй башлағас ҡына ҡулына алып, иркәләй, иғтибар итә башлаған һәм ҡушылған исемемде үҙгәртеп, яңынан үҙенә оҡшағанды ҡуштырған. Апайым менән мине һәм һеңлебеҙҙе хан ҡыҙҙарылай күрҙе, ә ике ҡустымды бәләкәйҙән үҙе менән бергә эшкә өйрәтеп үҫтерҙе һәм улар 7-се кластан уҡ үҙҙәре аҡса таба башланылар. Беҙ, ҡыҙҙар, бик назлы, ауыр хужалыҡ эштәренә йәлеп ителмәй, китап уҡып һәм әхирәттәр менән күп аралашып үҫтек. Мин бесән саба, икмәк бешерә белмәнем, әммә ҡатын-ҡызға тормошта кәрәк аш-һыу ярыштырыу, ҡул эше кеүеккә һуныраҡ үҙем теләп өйрәндем. Әсәй ҡайсаҡ: "Ана, күрше ҡыҙы әллә нисә тапҡыр һыуға барып ҡайтты, һеҙ һаман китап уҡып ултыраһығыҙ", - тип һуҡранып алһа ла, бер ҡасан да яман итеп әрләгәндәре лә булманы, ҡайыш йә ҡул күтәреү тураһында әйтеп тә тораһы түгел. Хәҙер быларҙы уйлайым да, дөрөҫ тәрбиә булғанмы икән, тип шикләнәм. Нисек беҙ уғата наҙлыҡайланып, донъя ҡәҙерен белмәгән кешегә әүерелеп китмәгәнбеҙҙер?

**Илсөйәр Ғәзетдинова:** Беҙҙең быуын физик эшкә күнегеп үҫте бит инде ул. Башланғыс кластарҙа ғына уҡығанда уҡ ағайым менән утын бысырға тура килде, аҙаҡ утын ярырға ла өйрәндем. Мәктәп йылдарында прививкалар эшләтеү мотлаҡ ине. Ошо прививканан һуң икенсе көнөнә ярты класс уҡырға килмәй: ҡайһыныһының температураһы күтәрелгән, ҡайһыныһының укол ҡаҙаған урыны шешеп сыҡҡан. Ә мин шул көндө үк ҡайтып ике сәғәт эсендә бер сана утынды балта менән ярып ташлай инем дә, температурам да күтәрелмәй, ҡулым да шешмәй. Кәрәкмәгәнсә "артыҡ уңған кеше инем". Хәҙер әкренәйҙем инде, әммә кәрәге тейһә, ҡайҙан киләләр ул көс, йыш ҡына йәш саҡтағы уңғанлығым килә лә сыға.

Мин шулай бик әлгәр, шуҡ булдым һәм ҡайны саҡ үҙемдең холоҡто ла күрһәтеп алғылағанмын. Беҙҙә аҡ һәм ҡара солан була торғайны, ағында бер караүат тора, аҙаҡ мин унда Ленин мөйөшө эшләп ҡуйҙым. Ә ҡара соланда он, ярмалар һәм башҡа кәрәк-яраҡ һаҡланды. Бер мәл шулай минә тәртип боҙған өсөн аҡ соланға бикләп ҡуйғандар. Йөрөй торғас, ҡолаҡ һалһалар, нимәләр "шыҡ" итә лә, бер аҙ тынып торғас, тағы ла шул тауыш сыға икән. Асып ҡарарға булғандар былар, мин: "Ярай астығыҙ, атыу бөтә күкәйегеҙҙе ашап-эсеп бөтөрә инем", - тип торам ти. Әллә 5-6 күкәй һытып эскәнмен. Шул хәлдә йыш ҡына көләп иҫкә алды апайым, бына шундай булғанмын мин. Мәктәп йылдарында ла бик әүҙем булдым, хатта кеҫәлә ике ҡулъяулыҡ йөрөтә инем: береһе үҙемә, икенсеһе маңҡалап йөрөгән малайҙарҙың танауҙарын һөртөр өсөн.

**Заман ҡатын-ҡыҙҙары һылыулығын һаҡлау өсөн фитнеска ла йөрөй, моданы ла ҡуҙәтә, ҡашын-керпеген, тән "етешһеҙлектәрен" дә төҙәтә. Ә һеҙ йөҙ, тән матурлығын һаҡлау өсөн нимәләр эшләйһегеҙ?**

**Сара Буранбаева:** Йәш саҡта бер туйҙа булырға тура килде. Шунда ауылдың аҡһаҡалы ла саҡырылғайны, уның тураһында барыһы ла оло хөрмәт менән телгә алды. Шуға, йәштәргә мөрәжәғәт итеп әйтер һүҙен түҙемһеҙләнеп көтөп ултырҙым. Ул бары тик: "Һәр нәмәлә сама кәрәк", - тине.

Йәш саҡтағы аҡыл менән "Нимә тураһында әйтергә теләне инде ул, бер аҡыллы һүҙ һөйләмәне", тип уйлағаным һаман хәтерҙә. Тик йәшәййәшәй генә аҡһаҡалдың был һүҙҙәрендә ниндәй тәрән мәғәнә йәшеренеүенә төшөндөм.

Һәр заманда ҡатын-ҡыҙ дөйөм ҡабул ителгән гүзәллек ҡанундарына ярарға тырыша. Бөгөн, мәҫәлән, һәр ҡыҙ үҙенә килешәме-юҡмы ирендәрен бүрттерә, йә булмаһа бер иш ҡаштар һыҙҙыра, барыһы ла бер үк керпек йәбештертә. Ә бына беҙҙең театрҙа эшләгән ҡыҙҙар был йәһәттән барыһы ла бик аңлы, үҙенең тәбиғи матурлығын һаҡлай белә. Уларға һоҡланып ҡарайым. Тимәк, матур булып күренеү өсөн дә сама белергә кәрәк.

Мин үҙем ваҡыт булғанда биткә күнекмәләр яһарға, бассейнға йөрөргә, күберәк хәрәкәт итергә тырышам. Төрлө физик күнекмәләрҙе беләм, әммә даими эшләмәйем. Шулай ҙа һәр актриса кеүек, үҙемдә сәхнә өсөн әҙер формала тоторға тырышып торам. Илсөйәр апай, бәлки, үҙе лә әйтер, мин уның көн дә зарядка яһауы, ролгә әҙерләнгәндә аҙ тукланыуын беләм.

**Илсөйәр Ғәзетдинова:** Беҙҙең быуынға хәҙерге һымаҡ төрлө косметик саралар эләкмәне. Хәҙер төрлө тәҡдимдәр күп, әммә мин Хоҙайҙың биргәненә шөкөр итәм. Әммә кәрәкле кремдарға аҡса йәлләмәҫкә тырышам. Көн дә күнекмәләр эшләйем, Сара әйтте инде. Ә бына йәйгеһен баҡсала ял иткәндә үҙемде тукланыуҙа сикләмәйем, шуға таҙарынып китәм. Эшкә ике аҙна ҡалғас, тотонам үҙемде бер формаға килтерергә. Уның өсөн кискеһен ашамаҫҡа, еңел үҙләштерелгән ризыҡҡа өҫтөнлөк бирергә, витаминлы һәм файҙалы ризыҡтар менән тукланырға кәрәк. Быларҙың барыһын да йәштәр хәҙер беҙҙән дә яҡшыраҡ белә.

40 йәштәр тирәһе ине миңә, урамда билдәле бер ханым туҡтатып, сәхнәнән бик сағыу күренеүемде әйтте һәм тормошта ла аҙыраҡ биҙәнә башларға ваҡыт еткәнлеге тураһында киҫәтте. Шул йәшкә тиклем сәхнәгә сыҡҡанда ғына грим һалдыра ла, көндәлек тормошта косметика ҡулланмай, хатта иренемде лә буямай торғайным. Әммә киҫәтеүҙе иҫәпкә алып, биҙәнеп ҡарарға булдым һәм көҙгөгә баҡһам, әллә ниндәй ят кеше ҡарап тора һымаҡ, үҙемде шул ҡиәфәттә ҡабул итә алмай оҙаҡ аҙапландым. Шулай интегә-интегә биҙәнергә өйрәнгәйнем, хәҙер битемә, күҙемә, иренемә һөртмәйенсә урамға ла сыҡмайым.

**Сара Буранбаева:** Кешене кейеме лә биҙәй бит ул. Ҡатын-ҡыҙҙың зауыҡлы итеп кейенә белеүе мөһим. Бер ҡасан да күҙгә салынған беренсе әйберҙе эләктереп кейеп сығып киткәнем булманы. Әллә бала саҡтан атайым шулай өйрәткәнгәме - ул эш буйынса командировкаларға йөрөгәндә апайым менән миңә һәр ваҡыт матур-матур күлдәктәр, әсәйемә шул заман модаһындағы кейемдәрен алып ҡайтыр булды. Студент саҡтарым үткән быуаттың етешһеҙ туҡһанынсы йылдарына тура килһә лә мин үҙемә килешле кейемдә йөрөнөм. Йыш ҡына туҡыма һатып алып, күлдәктәрҙе үҙем бесеп, тегеп ала инем. Хәҙер генә бөтә донъя унайлылыҡты өҫтөн ҡуйып, гүзәл заттар ҙа салбар, кроссовки, үксәһеҙ башҡа төр аяҡ кейемдәренә күсеп бөттө. Ә беҙҙең заманда күлдәк һәм бейек үксәле туфлиҙарҙа ғына йөрөй торғайныҡ.

**Илсөйәр Ғәзетдинова:** Эйе, ҡыҙҙар һәр ваҡыт матурлыҡҡа ынтыла инде ул. Беренсе курста мин, ауыл ҡыҙы, зауыҡ менән кейенә лә белмәгәнмендер инде. Ә бына икенсе курсҡа килгәндә модаға ярашлы капрон ойоҡтар кейеп, толом-толом сәстәремә прическалар яһап йөрөй башланым. Ҡышҡы һыуыҡтарҙа ла шулай ҡупшыланып йөрөп, аяҡтарға һыуыҡ үткәреп, аҙаҡ бик һыҙландым. Бөгөн кеше алдында матурлыҡ һәм унайлыҡ, йә һаулыҡҡа файҙалы булыу-булмау араһында һайлау тормай, шуныһы менән дә оҡшай хәҙерге заман миңә.

**Шундай мөмкинлек бирелеп, йәшлегегеҙ һәм бөгөнгө**

✓ *Әсә булыу бәхетен татымаған, яңғыҙлыҡта йәшәгән ҡатын-ҡыҙ ысын мәғәнәһендә бәхетле, матур була алмайҙыр кеүек. Сөнки иренән һөйөлөп, әсә булыу бәхетен татыу - уның тәбиғи асылы.*

# ДОНЪЯНЫ ҠОТҠАРЫР!



## иң көслө ҡорал

**осор араһында һайлап булһа, ҡайһыныһы күңелегеҙгә яҡыныраҡ?**

**Илсөйәр Ғәзетдинова:** Бик ҡатмарлы һорау минең өсөн. Шулай ҙа йәшлегем, оло тормошҡа аяҡ баҫҡан, ғаилә ҡорған йылдарымды бөгөнгө осорҙа йәшәгем килмәҫ ине. Сөнки хәҙерге байманлыҡҡа беҙ йәшәй-йәшәй, өйрәнә-өйрәнә яйлап килдек һәм күк йөҙөбөҙ аяҙ булды. Мин ул йылдарҙы бик һағынып иҫкә алам. Рәис ағайың менән 4 йыл дуҫлашып йөрөнөк, шунан 1976 йылдың көҙөндә ике яҡлап та туй яһап өйләнештек. Ә ғүмеремдең ҡайһы осорон һайлар инем тигән һорауға: Хоҙай Тәғәләнең биргәненә һәм һәр миҙгелдең үҙ осорома төшкән өлөшөнә ризамын.

**Сара Буранбаева:** Ундай мөмкинлек бирелһә лә тормошомдоң һәр миҙгеле үҙ урынында, тип иҫәпләйем. Бөгөнгө етеш, әммә ығы-зығылы заманды ҡабул итеп бөтмәйем. Йәштәр тормоштоң тәмен, йәмен тойоп өлгөрмәй, кешеләр бер-береһенә иғтибар итмәй, ваҡыт ағышы йәшен тиҙлегендәй шәп кеүек. Беҙ күберәк аралаштыҡ, йәшлегебеҙ илдәге һынылыш осорона тура килеп, етешһеҙлек киселәк тә, күңелдәребеҙ асыҡ, ихлас булдыҡ. Бөгөн һәр кем үҙенә бикләнгән, бигерәк тә йәш-елкенсәк телефон донъяһына сумған. Өлкәндәр матди байлыҡ артынан ҡыуа, балаһын да үҙ кимәлендәге кешеләрҙең ул-ҡыҙҙары менән ҡауыштыра, машинаһына ҡарап хужаһы тураһында фекер йөрөтә, кейеменде һәм нисек ял итеүеңде тикшерә. Ә бит миңә киләсәктә киленгә ҡәйнә булырға ла кәрәк. Шулай уйланып китһәм, ҡайһы саҡта йәшлегемә кире ҡайтырға теләп китәм.

▸ **Ҡатын ҡыҙҙың төп тәғәйенләнеше ир ҡатыны, әсәй булыу. Һеҙ шул йәһәттән бәхетлеме?**

**Илсөйәр Ғәзетдинова:** "Бәхетлемен" тигән һүҙҙе бер кемгә лә ҡысҡырып әйткәнем юҡ. Һәр кем үҙенсә бәхетле була. Ике төрлө һөнәр кешеһе бер-береһен аңлап, ҡырҡ алты йыл бергә йәшәйҙәр, ҡайны-ҡәйнәгә тулы мәғәнәһендә килен була алғанмын икән, балабыҙға тейешле тәрбиә биреп, уның оло тормош юлынан ныҡлы баҫып атлап барыуын күрәбеҙ икән, шөкөр. Бөгөн беҙ балаларыбыҙға ҡәҙерле атай-әсәй, ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә яратҡан олатай-өләсәй. Миңә шундай яҙмыш ебәргәне өсөн Хоҙай Тәғәләгә рәхмәтемде генә белдерәм, бәхетлемен тип ҡысҡырмайым. Ғөмүмән, донъяға килгән һәр кеше үҙ бәхете менән тыуа. Тик шул бәхетенә үҙе ҡул һалмаһын: усал булып үсмәһен, кешегә насарлыҡ теләмәһен.

**Сара Буранбаева:** Әсә булыу бәхетен татымаған, яңғыҙлыҡта йәшәгән ҡатын-ҡыҙ ысын мәғәнәһендә бәхетле, матур була алмайҙыр кеүек. Сөнки иренән һөйөлөп, йорттарында ырыҫ, ҡот һаҡлап, әсә булыу бәхетен татып, тирә-йүндәгеләргә наҙын, күңел йылыһын бүлеп йәшәү - уның тәбиғи асылы. Ошо йәһәттән беҙҙең атай-әсәйҙәр тәрбиәне дөрөҫ биргән, ҡорған оябыҙҙы бөтөн итеп, ғаиләбеҙҙе һаҡлап йәшәүебеҙ менән бәхетлебеҙ. Һәр ғаилә үҙенсә үткәрә һынауҙарҙы, шулай ҙа тәү сиратта бер-береңде аңларға тырышыу, тыңлай белеү мөһим.

**Илсөйәр Ғәзетдинова:** Беҙҙең быуын йәйҙе гастролдәрҙә үткәрҙе, Саралар йәш саҡта ла театр оҙайлы гастролдәргә йыш сыға ине. Бер гастролдән һуң хеҙмәттәшебеҙ Рәүис Заһитовтың балалары уны танымай торған хатта, тип көләп һөйләгәндәре хәтерҙә. Бына был да ғаиләләге мөнәсәбәттәр өсөн бер һынау. Шулай ҙа ошоға тиклем бик лайыҡлы үтеп киләбеҙ был һынауҙы.

▸ **Һеҙ уйнаған ролдәр бихисап. Үҙегеҙ тыуҙырған образдарҙың береһенә оҡшарға теләгән, үҙегеҙҙә лә шундай сифаттарҙы тәрбиәләргә ынтылыш тыуҙырған күңелегеҙгә яҡын, матур ролдәрегеҙ булдымы?**

**Сара Буранбаева:** Уйнаған ролдәребеҙ беҙҙе ниндәйҙер кимәлдә тәрбиәләй, нимәгәләр өйрәтә. Һәр береһе күңелдәрҙә йәшәй. М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәһендә 25 йыл элек уйнаған ролдәремде һаман да күңелемдә йөрөтәм. Мостай Кәримдең Аҡйондоҙон күп уйнарға тура килмәһә лә, уның моңо күңелемдә йәшәй. Тәңкәбикәнең ниндәйҙер сифаттары сағылып-сағылып киткән төҫлө. Ә бына Шәфәғен уйнарға насип булманы, әммә шул сабыр, түҙемле, һоҡланғыс образға ғашиҡмын. Милли йәштәр театрында Азат Нәҙерғолов һәм Башҡорт академия драма театрында Ғабдулла Ғиләжев ҡуйылышында уйнаған Гөлнәзирәләр - икеһе ике төрлө ине. Әммә мөхәббәте өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер Гөлнәзирә мөхәббәттә тоғролоҡ үрнәге булып зиһенемдә уйылып ҡалды. Әнғәм Атнабайҙың "Мөхәббәт тураһында йыр" спектаклендә Дилбәрҙе шул тиклем яратып уйнаным, уның матур-матур һыҙаттары миндә әле лә йәшәгән кеүек. Бәлки, киләсәктә "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ"та башҡорт ҡатын-ҡыҙының идеалы - Оло Инәйҙе уйнарға насип булыр.

**Илсөйәр Ғәзетдинова:** Театр донъяһына килеп кергәс тә миңә бирелгән тәүге ролдәр ауыл ҡыҙҙары булды. Гел тәбиғәтемә тап килгән сая, шаян, бөтә ауырлыҡтарға еңел ҡарап, тиҙ генә эшләп ҡуя торған ҡыҙҙар ролен башҡарҙым. "Һыу юлы", "Йырланмаған йыр" спектаклдәрендә ауыл ҡыҙҙары образдарын тыуҙырҙым. "Бәхтигәрәй" спектаклендәге Мөнирә һөйгән йәре менән хат ҡына алышып өлгөргән, әммә нисә йәштә булған ҡатын-ҡыҙға ла үрнәк булырлыҡ хисле образ ине. Йәш саҡта йырлы героиняларҙы уйнау бәхете бөтә кешегә лә татып бөтмәй. Әммә мин был яҡтан да зарлана алмайым. "Ғәлиәбаныу"ҙа төп героиняны, "Ҡара йөҙҙәр" - Ғәлимә, "Еҙнәкәй"ҙә - Сажидә, "Бажалар"ҙа - Зөлдәнә, "Тальян гармун"да - Һөйөклө, "Тере мәйет"тә - сиған ҡыҙы Маша һ.б. бик күп моңло образдар ижад иттем. Улар араһында егерме йыл дауамында сәхнәләрҙән төшмәгән Ғәлиәбаныуым йөрәгемдә айырым урын биләй. Йәш героиняларҙы уйнайһың-уйнайһың да, өлкән быуын кешеләрен уйнауға күп артистар күсә алмай аҙаплана. Әммә мин ҡаймаҡ йотҡан кеүек кенә күстем дә киттем. Был йәһәттән Азат Әхмәҙулла улы Нәҙерғоловҡа бик рәхмәтлемен, тап ул эшләгән осорҙа өлкән быуын кешеләрен уйнай башланым. "Айгөл иле"ндә Зөлхәбирә, "Аты барҙың - дәрте бар"ҙа Октябрина, аҙағыраҡ "Балаҡайҙарым"да Хазина образы тыуҙы. Һәр бер матур ролем менән тыуған ауылыма йәки районыма ҡайтырға тырыштым. Туғандарымдың: "Апай, илап тик ултырҙыҡ, хас әниемһең", - тиеүенән дә юғарыраҡ баһа кәрәкмәй ине. Үҙең теләгән генә ролдәрҙе уйнап йөрөп булмай, ә бына холоҡ-фиғеленә тап килгәне булһа - бәхет.

▸ **Әйткәндәй, асылығыҙға тап килмәгән, һеҙгә бөтөнләй ят тойолған ролдәр булдымы?**

**Илсөйәр Ғәзетдинова:** Ундай ролдәргә мин ауырыраҡ индем. Сираттағы бер съезд алдынан Әсхәт Мирзаһитовтың "Ғүмер ике килмәй" тигән спектаклендә яһил, усал, мөхәббәтһеҙ, ҡустыһы менән йөрөп, ағаһына кейәүгә сығып тормош көткән ҡатынды уйнарға тура килде. Спектаклде тиҙ арала сығарҙыҡ. Бик интегеп эшләнем, әммә шул тиклем шәп килеп сыҡты. Гастролдәрҙә йөрөгәндә кешеләр: "Балаҡайым, рәхмәт, киленем шулай булырға ярамай тигән үрнәк кенә ала күрһен инде", - тип әйтеп ҡалды. Тимәк, тамашасыбыҙ күңеленә, былай булырға ярамай, тигәнде еткерә алғанмын икән, шул кире образдар ҙа кәрәк булған. Театрыбыҙға Вәзих Сәйфуллин килгәс, "Төштәр оҙон булмай"ҙа картуф та әрсей белмәгән, иркә генә ҡала ҡыҙын уйнарға тура килде. Мин бала саҡтан дөбөр-шатыр бөтә эште эшләп үҫкән кеше, физик яҡтан да, асылым менән дә ундай наҙлыҡай түгел инем. Ярай әле бер аҙ уйнағас, ул ролдән "ҡотолдом".

**Сара Буранбаева:** Шулай, теләйһеңме-юҡмы, матур героиняларҙы ғына уйнап йөрөп булмай. Актер кеше үҙен камиллаштырырға, төрлө холоҡло образдар тыуҙырырға тейеш. Йәш ҡыҙҙар роленән яйлап әсәй, өләсәйҙәргә күсергә тура килә һәм быны аңлап ҡабул итергә кәрәктер. "Ай тотолған төндә" спектаклендәге Тәңкәбикә ролен үҙемдең берҙән-бер улыма әсәй булғас ижад иттем һәм миңә ул ҡатынды аңлауы шул тиклем ауыр бирелде. Үҙем әсәйем кеүек бала йәнлемен, ә Тәңкәбикә, йола, тип, балаларының күңелен ҡыйырға һәләтле кеше. Шулай, бер уйнағанда Аҡъегет ролендәге Руслан Хайсаровтың "Әсәй, айырма мине", тип өҙөлөп ялбарған мәлендә уның күҙҙәренә баҡтым да, йөрәгемдән тот-то, әйтер һүҙемде әйтә алмайым да ҡуям, ҡалтыранам. Эстән генә үҙемә: "Бирешмә, Тәңкәбикә ундай түгел!" - тим. Көскә ялғап алып киттем шул урында. Күңелең менән ҡабул итмәһәң, аңың менән эшләргә тура килә шул.

▸ **Әңгәмәбеҙҙе йомғаҡлап, гүзәл заттарға әйтер һүҙҙәрегеҙҙе лә еткерәйек әле...**

**Сара Буранбаева:** Ҡатын-ҡыҙҙар иңенә яуаплылыҡ күберәк һалынған, беҙ - донъя тотҡаһы. Ғаиләләге татыулыҡ, ҡот, ир менән мөнәсәбәттәр, баланы һәр яҡлап бағып үҫтереү беҙгә бурыс итеп йөкмәтелгән. Һәр гүзәл зат ире өсөн матур ҡатын булырға, балаһы өсөн ул тиҫтерҙәре алдында оялмаҫлыҡ матур әсәй булырға ынтылырға тейеш. Бала күңеленә яҡшылыҡ, изгелек, әхлаҡ төшөнсәләре менән бер рәттән, матурлыҡты күрә белеү һәләтен дә үҫтереүҙе хәстәрләү ҙә - беҙҙең бурыс. Улыбыҙ бәләкәйҙән ҡурай, баян, гитарала уйнарға өйрәнде, бергәләп йырлашып та алабыҙ. Тирә-яҡтағы тәбиғәттең хозурлығына иғтибар итергә лә өйрәтәм уны һәм ул бөгөн килеп: "Әсәй, ҡара ниндәй йәйғор ҡалҡҡан", - ти икән, тимәк, күңелендә шул орлоҡтар шытым биргән. Матурлыҡты күрә белгән кеше насар булмай, тип уйлайым һәм йыуаныс табам. Матурлыҡ донъяны ҡотҡарыр, тип тә юҡҡа ғына әйтелмәгән һәм был беҙҙең, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡулындағы иң көслө ҡорал. Шуны аңлап, оло яуаплылыҡ тойоп йәшәйек.

**Илсөйәр Ғәзетдинова:** Ғаиләлә төрлө хәлдәр булыуы бар, татыу һәм тыныс көндәр араһына уртаҡ тел таба алмай киткән осраҡтар ҙа килеп инергә мөмкин. Шундай мәлдә ир һәм ҡатын араһындағы аңлашмаусылыҡтарҙы бала эргәһендә асыҡлау ярамай, был уның аңына һеңеп ҡалмаһын. Бигерәк тә йәш ғаиләләр, балалар алдында түбәнлеккә төшөп, ҡысҡырышыуҙарҙы уларға ишеттермәгеҙ. Бала өсөн һәр ваҡыт матур күңелле атай-әсәй булып, туғандарығыҙ алдында йөҙөгөҙ яҡты булыуҙан да өҫтөнөрәге юҡ. Тик яҡшылыҡҡа, матурлыҡҡа күңелегеҙ менән ынтылып йәшәгеҙ һәм тирә-яҡтағыларға ла шул нурығыҙ менән бүлешергә онотмағыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт халҡында ҡояшты ла "апай", тиҙәр, гүзәл заттан тимәк. Шуға, ҡатын-ҡыҙҙарҙың да ҡояш кеүек бар тирә-йүнгә нур һибергә, йөрәк йылыһын өләшергә, күңел матурлығы менән бүлешергә ынтылышын аңларға мөмкин. Шулай булмаһа, был тормоштоң йәме, ҡото, ырыҫы ҡалыр инеме лә, уның тәмен тойоп йәшәй алыр инекме?**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ ***Ир туҡтамай вокзалға инеп китте, ҡатындың ҡулындағы төйөнсөктәре ергә төштө... Ул иҫе китеп Мирға төбәлде, ә ике күҙенән ике бөртөк эре йәше атылып сыҡты ла, түңәрәк кенә бите буйлап ағып китте. Мөғлифә...***






## Ҡайтыу

Ҡайтыр көнө ноябрь баштарында ине. Ҡара көҙҙөң һалҡын көнөндә армия сафына алынһа, өс йылын тултырып, Ҡотлоюлына ҡайтып төшкәндә ап-аҡ итеп ҡырпаҡ ҡар һалып ҡуйған ине. Аҡ донъя, аҡлыҡ-сафлыҡ... Уның ауыр уйҙары ла, бушҡа ғына көйәләнгәндәй, иреп юҡҡа сыҡты. Бәлки, һары сәсле, зәңгәр күҙле ҡыҙ булмағандыр ҙа уның тормошонда? Бәлки, ул төш кенә күргәндер, йә зәңгәр күккә төбәлеп шәмәхә күҙҙәр хаҡында хыялланып ятҡандыр? Ауылда бөтәһе лә ябай, аңлайышлы... Ябай аш-һыу, алсаҡ һөйләшеүҙәр, ҡыланмай ғына ихлас итеп йырлашып бал эсеүҙәр... Ҙур кешеләй өйҙән-өйгә йөрөтөп һалдатты ҡунаҡ итеүҙәр... Табындары Германиялағы кеүек һыйҙың төрлөлөгөнән һығылып тормай-тороуын: итле бишбармаҡ, ҡоротло һурпа, майлап, баллап, йәки ҡаҡ ҡушып сәй эсеү. Кемеһендә улары ла юҡ, бары бутҡа менән ҡоймаҡ ҡына була. Етеш түгел ине әле йәшәү 1960 йылда, колхоз һаман да аҡсаға йәлсемәй, булғаны һалымға, ашау-эсеүгә китеп торған заман... Юҡ, аш һайлап, тикшереп-сағыштырып ултырыу башына ла килмәне Мирҙың. Уға ошо эскерһеҙ һөйләшеүҙәр, ипле генә итеп мәрәкәләп шаяртып алыуҙар, бер иле лә шаштырмай ғына маҡтап ҡуйыуҙар шул хәтлем яҡын һәм үҙ ине. Башҡа тормош барлығын ул шунда уҡ уйынан да, йөрәгенән дә һыҙып ташланы. Тамырландырманы.

Ә шулай ҙа иланы бер көн Мир. Киске эңер ине. Эңер ҙә түгел, төн ауышҡайны. Ауылда иртә яталар, сөнки таң һарыһынан эшкә. Әсәһе йоҡларға ятҡас, тышҡа сыҡҡайны Мир. Уның үкһеп илағанын ишетеп, ғәзизе өйҙән йүгереп сыҡты:

- Балаҡайым! Улым! Ни булды? Ағайың? Ағайыңа бер-бер хәл булғанмы? Ҡайҙа ул?

- Юҡ, әсәй, борсолма!.. - Егет алдындағы уртаға йыртылған гармунға, күректәре арҡыс-торҡос булған, көмөш телдәре емерелгән, яратҡан өр-яңы хромкаһына ымланы. Өй башына иҫке юрғанға төрөп, бәйләп киткән тальянын ул танманы. Дуҫы үлгәндәй, хыялы селпәрәмә килгәндәй хис итте. Йөрәге янды. Тегендә урыҫ иптәше Мишкаға иҫке гармунын арзан ғына хаҡҡа ҡалдырып киткәндә күпме хыялланды ул зыңғырлатып бер тальянында һыҙҙырырға. Ә ул... көтмәгән. Үлгән. Кемдең ҡулы барған уны шулай тураҡларға?

- Эй, улым... Башыбыҙға ҡайғы төшкәнме тип торам... - Әсәһе еңел һулап, улы эргәһенә тупһаға терәлде. - Баш һау булһа, был ни... табылыр. Өр-яңынан алырһың!

- Кем?

- Кем булһын, ҡустыларың, шилмалар! Ҡайҙан күргәндәр, ҡайҙан тапҡандар! Беҙ ни көнө буйы эштә... Улар сарҙаҡҡа менеп, гармунға тейер тип кем уйлаһын! Икәүләп талашып, бүлешә алмай, уртаға ярып, күңелдәре булған инде... Мин дә иланым... Тик ҡалайтаһың... Булыры булған. Аталары кәрәктәрен бирҙе лә ул, һуң! Нишләтмәк?

- Бәлки, төҙәтеп булыр...

- Мин дә уйланым. Аша ауылда гармун яһаусы оҫта бар бит, шуға апарып ҡарамаһаң. Бик шәп итеп йүнәтә тиҙәр уны.

- Яңынан да алырға булыр ине. Тик көмөш телдәре генә йәл. Күпме ерҙә гармун, баян күрҙем, хәҙер былай көмөш телле итеп яһамайҙар икән. Зыңғырлап тормай...

- Апар, улым, апар... Йүнәтә алһа мәгәр...

Алып барҙы Мир оҫтаны эҙләп, йүнәтеп бирҙе алтын ҡуллы кеше. Оҙаҡ йылдарға етте ул иҫтәлекле, яралы гармун... Аҙаҡ инде өр-яңы баянын да, аккордеонын да алырға насип булды.

...Аккордеонды ул иң беренсе тапҡыр немец ҡартының өйөндә күрҙе. Ҙур комод өҫтөнә матур буҫтау менән ҡаплап ултыртылған ине ул. Башта уға иғтибар итмәгән. Бер саҡ Иоланта менән икәүҙән-икәү өйҙә саҡта стеналағы рәсемдәрҙе ҡарап, уныһын тотоп, быныһын тотоп йөрөгәндә күҙе ошо ят әйбергә төштө.

- Ә бында нимә? Нимәне йәшереп һаҡлайһығыҙ? - тип шаяртты

Мир ҡыҙҙы, үҙенсә унда бәләкәй семәрле һандыҡ эсендә берәй Библиямы, диндәренә ҡағылышлы монаят яталыр тип уйлағайны. Семәрле һандыҡ тигәне семәрле, тирә-яғына көмөш селтәр йүгертелгән музыка ҡоралы булып сыҡты. Ҡыҙ алып, оҙон аҡлы-ҡаралы телдәренә баҫҡылап күрһәтте.

- Ағайым уйнаған булған унда. Хәҙер уның иҫтәлеге булып ултыра.

Башы менән генә ымлап рөхсәт һораны ла, ят инструментты ҡулына алды егет. Һалҡын, ауыр әйберҙе улай борғолап, былай борғолап, телдәренә улай-былай баҫҡылап ҡараны ла, һин дә мин "Катюша"ны уйнаны ла ебәрҙе. Иоланта шатлығынан сәпәкәйләп ебәрҙе хатта! Нисәмә йылдар тик ятҡан, телһеҙ инструмент терелгәндәй хис итте ул. Был хәлде атаһы менән әсәһенә һөйләгәс, улар ҙа Мирҙың аккордеонда уйнауын һоранылар. Инәлтеп торманы егет, руссаһын да, башҡортсаһын да рәхәтләнеп уйнаны.

*Ҡарағайлы ҡарурманды*
*Үтер көндәр булырмы?*
*Ҡаршы килеп, ҡул бирешеп,*
*Күрешер көндәр булырмы?* - тип һуҙып йырлап та ебәрҙе. Күҙ алдына ғәзиз Башҡортостаны, тыуған ауылы Ҡотлоюл, йүкә ағастарының хуш еҫле сәскә атҡан ваҡыттары, япраҡтарын елберләткән моңһоу ҡайындары килеп баҫты. Әсәһе, Рим ағаһы, уның кескәй генә ике улы, күрше апай менән уның ҡыҙы Мөғлифә, иптәш егеттәре... Мондо тәржемәләү кәрәкмәй: Коссмандар ҙа йырҙың тәьҫиренә бирелеп, уйға батып киттеләр. Ошо аккордеон, унан сыҡҡан тылсымлы моңдар совет һалдаты менән немец ғаиләһен яҡынайтты ла шикелле. Тик шул саҡта ғына ул Юрген ҡарттың әбейенең илағанын да, йылмайғанын да күрҙе. Улын юғалтҡан әсә ҡайғыһын аңлағандай ҙа булды...

## Мөғлифә

Ә күрше ҡыҙы Мөғлифәне күрҙе ул, көтмәгәндә-уйламағанда тимер юл вокзалы алдында тап итте. Армиянан ҡайтҡас, Мир иптәше менән вагон бушатып, аҙ-маҙ аҡса эшләп алырға тип йыш ҡына буш ваҡыттарында вокзалға йөрөүҙе ғәҙәт итеп алғайны. Сираттағы "төшөмлө эшкә" барыуҙарына станция алдында ике-өс йәштәр тирәһендәге балаһын күтәргән ир менән ике ҡулына ике төйөнсөк тотҡан ҡатын тап булды. Былай саҡта мыжғып торған кешеләргә башын да бороп ҡарамаған Мир ниндәйҙер көскә буйһоноп, ҡаршыһына килгән кешеләргә ҡарайһы итте һәм... Ир туҡтамай вокзалға инеп китте, ҡатындың ҡулындағы төйөнсөктәре ергә төштө... Ул иҫе китеп Мирға төбәлде, ә ике күҙенән ике бөртөк эре йәше атылып сыҡты ла, түңәрәк кенә бите буйлап ағып китте. Мөғлифә...

- Иҫәнме, Мөғлифә!

- Мир!

- Нисә йылдан һуң? Ҡайҙа китеп бараһығыҙ?

- Мәскәү яғына.

- Мәскәү? Ҡайһылай алыҫҡа юллանғанһығыҙ! Ниңә улай?

- Иремдең апаһы шунда йәшәй. Эш тә бар, аҡсаһы ла мул, тип саҡырғайны.

- Әле инеп китеүсе һинең ирең инеме ни?

-Эйе. Улыма өсөнсө йәш... Их, Мир! Бәлки, шул бала һинеке лә булырға мөмкин ине бит...

Ҡатындың һүҙҙәре йөрәгенән инрәп сыҡты. Аптырап ҡалды егет, көтмәгәс, ниңә мине ғәйепләгәндәй әйтә һуң?

- Көтөп алырға ине...

- Мин... Һин бит үҙең...

Шул саҡ вокзалдың ишеге асылып, ир-ат тауышы уның һүҙҙәрен бүлде.

- Мөғлифә! Нимә ҡатып ҡалдың анда? Әйҙә, билет алырға! Поезға һуңлатаһың бит!

Мөғлифә ерҙә ятҡан төйөнсөктәрен алып, вокзалға ашыҡты.

- Хуш!- тигән һүҙе шым ғына әйтелһә лә, Мирҙың ҡолағында оҙаҡ яңғырап торҙо...

Мөғлифәнең әсәһенең мөнәсәбәте лә үҙгәргәйне Мирға ҡарата. Әлбиттә, тип уйланы егет, беҙ инде бала-саға түгел, кәләш-кейәү тип шаяртырға ла ярамай, Мөғлифә күптән кейәүҙә, бала әсәһе. Инде ике күршенең һәр береһенең үҙ хәстәре, үҙ мәшәҡәте. Донъялар рәтләнеп бара, элекке кеүек йә тоҙ, йә шырпы, йә күмер тип бер-береһенә көнөнә ҡырылмаһа ҡырҡ мәртәбә инеп сыҡмайҙар. Шулай ҙа аралар һыуыныуын әсәһе лә ауыр кисереп йөрөгән икән. Бер көн шәп-шәп атлап ҡайтып инде лә, утынлыҡта таҡта ҡалдыҡтарын ярып торған улы эргәһенә килеп етер-етмәҫтән хәбәр һалды.

- Барҙым әле, йәнем көйөп, үртәлеп барҙым. Мәйтәм, үҙеңдең ҡыҙың көтмәйенсә кейәүгә сығып китте, улымдың йөрәген яраланы. Ә һин күҙ йәшереп, баш баҫып йөрөйһө урынға, беҙҙе ғәйепләп, ҡырын-мырын ҡарап йөрөйһөң! Йә әйт, кем ғәйепле, тип тура бәреп әйттем үҙенә. Аптыранып китте күршем. "Атаҡ! Хәҙер минең ҡыҙ ғәйеплеме? Мир бит үҙе хат яҙған, көтмә, бында мин икенсе ҡыҙ менән осрашам. Кәләш итеп апҡайтырға уйлайым", тип. "Булмаҫ! Анда һиңә әрмелә әҙерләп ҡуйғандар ти икенсе ҡыҙ! Үҙенең хыянатын беҙгә япһармаҡсымы!" тейем, дөрөп алып барам. Ә күршем шуны ғына көткәндәй, шарт ишекте ябып инеп китте. Мин ҡысҡырам, сыҡ, һөйләшеп бөтәйек, тимен. Сыҡты, ҡулында хат. "Мин бер немканы яратам. Моғайын, өйләнешербеҙ. Мине көтмә, Мөғлифә. Йәш ғүмереңде заяға үткәрмә, мин бит һине яратманым", тип яҙылған... Мир, был ниндәй хат, улым? Ниндәй немка? Ҡайҙа ул? Әллә һин тегендә, ярман ерендә өйләнеп ҡайттыңмы?

Ауыр булды был һөйләшеү икеһенә лә. Ярһыған, рәнйегән әсәһенә саҡ аңлатты Мир хәлдең айышын. Эйе, дуҫлашты, һөйләште. Әммә яратыу, кәләш итеп алып ҡайтыу тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел ине. Кемдер уҫал шаяртҡан ғына Мөғлифәне. Бәлки, берәй әхирәтелер, бәлки... Шулай ҙа Мирҙың да, әсәһенең дә күңелендә бер төйөр ҡалды. Кемгә кәрәк булды икән уларҙы айырыу? Бәлки, Мөғлифәнең әлеге иренәлер? Ситтән генә яратып йөрөһә, Мирҙың хатын алып, уҡып, немка тураһында белгәс, шуға оҡшатып үҙгәртеп хат яҙып һалғандыр... Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә, бер саҡ асылыр әле ул сер, тип йыуатты әсәһен улы. Әллә үҙен дә ышандырырға тырыштымы?

## Германияға сәйәхәт

- Ниндәйерәк ул Германия? Кешеләре ниндәй? - Был һорауға Мир Зиннәтуллин көлөп кенә ҡуйҙы. Нимә тиһен инде? Ике аяҡлы, ике ҡуллы беҙҙең кеүек үк кешеләр. Бәлки, беҙҙең башҡорттарға, йә урыҫтарға ҡарағанда йәмһеҙерәктер. Беҙҙең башҡорттар ҡара сәсле, ҡуңыр йөҙлө сағыу булһа, урыҫтар һары сәсле, зәңгәр күҙле, әммә шулай уҡ сағыу халыҡ, матур. Ә немецтар аҡһыл, төҫһөҙ, нисек тиҙәр әле урыҫтар - белобрысый кешеләр, тиһенме ни? Барырбыҙ, күрерһегеҙ, тиеү менән сикләнде. Ә үҙенең күҙе алдына шәмәхә күҙле, аҡһыл сәсле йәш ҡыҙ Иоланта-Миләүшә килеп баҫты. Ниндәйерәк ҡатын икән ул хәҙер? 25 йыл эсендә ул тулы, ауыр кәүҙәле, һырҙар ҡаплаған йөҙлө йәмһеҙ ҡатынға әүерелдеме икән? Мир ҙа йәшәрә бармай инде, маңлайына тәүге һырҙар ятты, ике сикәһендәге шырт сәстәренә һиҙелер-һиҙелмәҫ көмөш юлаҡтар йүгерҙе. Кәүҙәгә артыҡ үҙгәрмәне, уның ауыр механизатор эше менән һимереп китеү ҡурҡынысы янамай ҙа, тоҡомдары ла һомғол буйлы. Һәр хәлдә, танымаҫлыҡ булып китмәне, мәктәп эскәмйәһендә бергә ултырып уҡыған иптәштәре, утыҙар йылдан һуң да танып тора, шул уҡ ҡалғанһың, тип тә ебәрәләр. Әлбиттә, Иоланта менән ул осрашыу эҙләмәйәсәк, тик ниңәлер ике йыл ярым хеҙмәте үткән илгә барғас, ҡапыл күңелендә үткәндәр ҡалҡып сыҡты. Төпкә йәшерелеп, баҫырылып, онотторып ҡуйған хәтирәләр, көл аҫтында бысҡып ятҡан күмер ише, саҡ ҡына көлдө ситкә һепергәс, леүкеп китергә әҙер торғандай, ҡылт итеп иҫкә лә төштөләр. Ләкин Мир элекке дыуамал, ҡыҙыу ҡанлы еңел-елпе егет түгел, үҙ хистәрен йүгәнләй, аҡылын алға ҡуя торған кем олоһо, кем кесеһе булған ир-уҙаман. Кәрәк саҡта нөктә ҡуйырға ла, өҙә һуғып туҡтатырға ла белә. Был юлы ла шулай итте: етте, иҫләнең, бөттө. Һин ялда, сәйәхәттә, үткәндәр үткәндәрҙә ҡалһын. Башың да, уйҙарың да ял итергә, көс туплаларға, матурлыҡты күреп, күңел бушлығын гүзәллек менән тултырырға тейеш!..

Күп ҡалаларҙы үттеләр, күп иҫтәлекле урындарҙа, концерттарҙа, театрҙарҙа, музейҙарҙа булдылар. Бөтәһе өсөн дә матурлыҡ, рухи күтәренкелек, күңел бөтөнлөгө, зауыҡ бүләк иткән онотолмаҫ сәйәхәт әҙерләнгәйне. Гид булып йөрөүсе, рус телен үҙ телендәй ифрат яҡшы белгән немка Ланге Бриджит үҙенең бурысын бик һәйбәт атҡарған, немецтарға хас теүәллекте яратҡан, бер минутты ла бушҡа әрәм-шәрәм итмәүсе юғары кимәлдәге белгес булып сыҡты. Һәр һорауға, һәр үтенескә ҡолаҡ һалып, асыҡ, аңлайышлы яуап биреп, аңлатып йөрөнө. Уға ҡарап, был ҡатындың белмәгән нәмәһе юҡ, тип уйларға мөмкин. Итәғәтле, мөләйем, тыныс. Буш ҡына нәмәгә көйөп, сарбайлап, йүгермәләп, ҡаңғырып йөрөй торған ауылдаштары менән сағыштырһаң, ер менән күк араһы. Уларҙы нисек шулай тәрбиәләйҙәр икән? Шул ҡәҙәр ҙә һалҡын ҡанлы булырҙар икән, тип аптырана Мир. Яҡшы яҡтары күп булһа ла, үҙенең ихлас, эсендәге тышында булған бер ҡатлы халҡын, яҡындарын ул был юғары мәҙәниәтле немецтарҙан күпкә өҫтөн ҡуя. "Беҙҙең кеүек алсаҡ халыҡ бер ерҙә лә юҡ, - тине ул юлдаштарына ла. - Немецтар балыҡ кеүек, өнһөҙ, һүҙһеҙ, хисһеҙ. Эшләйҙәр, уңғандар, әммә йөрәктәре беҙҙеке кеүек типмәй, хистәре урғылып ташып тормай".

**(Дауамы. Башы 45-50-се һандарҙа).**

✓ *Бына-бына ас эттәр уларҙы өҙгөләп ташлаясағын аңлап, баштарыбыҙҙы аҫҡа эйҙек. Ҡайһы берәүҙәр ҡулдары менән йөҙөн ҡапланы, ҡайһылары, был вәхшилекте күрмәҫ өсөн, боролоп баҫты. Шул ваҡыт көтөлмәгән хәл булды.*



*АФАРИН!*

# МИЛЛИ КЕЙЕМДӘРГӘ...

## һөйөү һәм ҡыҙыҡһыныу бар

**Башҡортостандың Милли музейы боронғо дәүерҙән хәҙерге көнгә тиклем ошо төбәктең, республиканың, бында йәшәгән күп төрлө милләттәрҙең тарихын, мәҙәниәтен, тормош-көнкүрешен, ғөрөф-ғәҙәттәрен һәм кәсептәрен тулыһынса яҡтыртҡан бер ҙур үҙәк булып тора. Республиканың төп музейы шулай уҡ төрлө темаларға арналған, ҡыҙыҡлы, фәһемле һәм кәрәкле күргәҙмәләр майҙаны булараҡ та сығыш яһай. Күптән түгел Милли музейҙа биҙәү-ғәмәли сәнғәт оҫтаһы Зөлфиә Краснованың һәм башҡорт милли кейемдәрен тергеҙеүсе Флорид Вәхитовтың "Сығанаҡтарҙан бөгөнгөгә тиклем" ("От истоков к современности") тип аталған күргәҙмәһе эшләне.**





Туймазы ҡалаһында йәшәүсе Зөлфиә Краснова һәм Флорид Вәхитов ойошторған "Тамға" ижади берләшмәһе үҙ алдына башҡорт халҡының матди байлығын өйрәнеү, тергеҙеү һәм киң йәмәғәтселеккә еткереү бурысын алған. Әлеге күргәҙмәлә лә оҫталар мәғлүмәтле, милләтебеҙҙең йөҙөн, булмышын һәм көнкүрешен сағылдырған бай коллекция тәҡдим итте. Музейға килеүселәр иғтибарына "Тамға" берләшмәһенең шәхси коллекцияһынан биҙәнеү һәм көнкүреш әйберҙәре, традицион башҡорт балаҫтары, шаршау, балалар бишеге, ағас һауыт-һаба һәм башҡа әйберҙәр тәҡдим ителде. Шулай уҡ күргәҙмәлә ҡуйылған янсыҡтар коллекцияһы, ҡушъяулыҡтар, һаҡал, селтәр, яға кеүек биҙәүестәр, фестивалдәр өсөн әҙерләнгән төрлө биҙәкле таҫтамалдар, туй йолаһын атҡарыу өсөн тәғәйенләнгән "Туй йолаһы" комплекты тамашасылар иғтибарынан ситтә ҡалманы. Ә экспозицияның төп өлөшөн башҡорт ир-егеттәре һәм ҡатын-ҡыҙҙары кейеменең тергеҙелгән өлгөләре, шулай уҡ мишәрҙәрҙең традицион кейемдәре тәшкил итте. Күргәҙмә авторҙары белдереүенсә, экспозицияның төп маҡсаты башҡорт халҡы мәҙәниәтенең күп төрлөлөгөн генә түгел, ә уның хәҙерге заманға яраҡлаша һәм уның бер өлөшө була алыуын күрһәтеүгә лә ҡайтып ҡала. Ысынлап та, күргәҙмәлә урын алған, этнографик глэмпингтар өсөн махсус етештерелгән этностилдәге интерьер әйберҙәре, милли биҙәктәр менән һырланған туристик келәм һауыттары, сувенир продукцияһы һәм шулай уҡ этностиль ҡулланып эшләнгән заманса кәрәк-яраҡ әйберҙәр бер кемде лә битараф ҡалдырманы.

Бөгөнгө көндә миллилеккә йөҙ бороу, уға таяныу, ата-бабаларҙан аманат булып ҡалған ғөрөф-ғәҙәттәрҙе атҡарыу, ғөмүмән, үҙ асылыбыҙға ҡайтыу һәм үҙ тамырҙарыбыҙҙы барлау "модаға" әйләнеп бара. Шул иҫәптән башҡорт милли кейеменә һәм биҙәнеү әйберҙәренә лә иғтибар бермә-бер арта - республиканың төрлө төбәгендә йәшәүселәр оло быуындан ҡалған милли кейемдәрҙе төп сығанаҡ итеп алып, матур, сағыу һәм шул уҡ ваҡытта ыҡсым, күркәм милли кейем тегеп кейә. Шулай ҙа төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының милли кейемдәре өлгөләрен киң йәмәғәтселек иғтибарына сығарыусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. "Тамға" ижади берләшмәһендә нәҡ ошондай оҫталар тупланып, төньяҡ-көнбайышта йәшәгән милләттәштәребеҙ тураһындағы мәғлүмәти бушлыҡты тултырырға ярҙам итә.

Ғөмүмән, үҙҙәренең эштәре менән төрлө кимәлдәге фестиваль, күргәҙмә һәм фәнни-ғәмәли конференцияларҙа ҡатнашып, башҡорт халҡының үткәне һәм бөгөнгөһө тураһында "һөйләп" йөрөүсе "Тамға"ларҙың эшмәкәрлеге баһалап бөткөһеҙ. Уларҙың тағы ла һоҡланыуға лайыҡ сифаттары - үҙҙәренең оҫталыҡтары менән балаларҙы ла таныштырыу, теләге булған һәр кемгә өйрәтергә тырышыу, тәжрибә-оҫталыҡ менән бүлешеү. Әлеге күргәҙмә сиктәрендә лә улар Милли музейҙа ошо йүнәлеш менән ҡыҙыҡһынғандар өсөн бер нисә оҫталыҡ дәресе һәм түңәрәк өҫтәл ойошторҙо. Мәҫәлән, Гөлнара һәм Флорид Вәхитовтар үткәргән оҫталыҡ дәресендә уҡаиҙеү эшләү тураһында бик күп мәғлүмәт тупларға һәм уны үҙ ҡулдарың менән эшләп ҡарарға мөмкин ине. Оҫталыҡ дәресендә ҡатнашыусылар фекеренсә, республикала боронғо өлгөләрҙе бер ҙә үҙгәртмәйенсә тергеҙеп, уларҙы элекке замандарҙа ҡулланылған алымдар менән эшләргә өйрәтеүселәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ, һәм "Тамға"лар шундай оҫталарҙың береһе.

Йәштәрҙә, замандаштарыбыҙҙа милли кейемгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыуҙың төп сере - уның хаҡында матур итеп һөйләү, аңлата белеүҙәләр, тимен. Һәр милли кейем йәки биҙәүес үҙе хаҡында һөйләүҙе "талап" итә: ҡайһы тараф башҡорттарыныҡы ул, ниндәй ваҡыттарҙа етештерелгән, нимәләр ҡулланып биҙәлгән, уны эшләү алымдары һәм ысулдары ниндәй һәм башҡалар. Заманса телдә әйтһәк, презентация була инде. Оҫтаның үҙенең әйберҙәре һәм эш алымдары тураһында ҡыҙыҡлы, ентекле һәм иғтибарҙы йәлеп итерлек һөйләй белеүе лә уның эшенә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыуға булышлыҡ итә. Был йәһәттән дә "Тамға" оҫталарына һүҙ тейҙерерлек түгел. Күргәҙмә сиктәрендә уҙғарылған "Музей экспонаттарын тергеҙеү технологиялары: Рәсәй халыҡтарының милли кейемдәре, уҡалар, көнкүреш һәм интерьерҙа текстиль әйберҙәр" тип аталған түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар күп булды. Сара спикерҙары музей экспонаттары, боронғо ғаиләләрҙең һәм этнограф ғалимдарҙың фотоһүрәттәре нигеҙендә репликалар эшләү серҙәре менән бүлеште, уҡаларҙың дизайнын һәм схемаһын эшләү тураһында һөйләне. Шулай уҡ түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашыусылар хәҙерге заманда милли кейемдәрҙе реконструкциялау һәм милли элементтарҙы бөгөнгө көндә ҡулланыу кеүек мәсьәләләр хаҡында уртаға һалып һөйләште. Онлайн һәм оффлайн форматта ойошторолған һөйләшеү йәнле, ҡыҙыу барҙы, республиканан ғына түгел, Рәсәйҙең төрлө төбәгенән сараға онлайн ҡушылыусылар спикерҙарҙан үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптар алды.

Һәр заманда ла теге йәки был милләттең тарихи күсәгилешлеген нәҡ "Тамға" оҫталары кеүек үҙ эшенә мөкиббән киткәндәр булдыра. Үҙ асылының саҡырыуымы был, милли аңдың ҡылдары тирбәлеүеме, милли тойғоноң өҫтөнлөгөмө? Барыһы ла бергәләр, күрәһең, сөнки был тойғолар бергә тупланғанда ғына кеше бөтә булмышын биреп, үҙ милләтенә хеҙмәт итә. Зөлфиә Краснова, Гөлнара һәм Флорид Вәхитовтар нәҡ ошондай милләт ынйыларының өлгөләре булып тора ла инде. Уларҙың Башҡортостандың Милли музейында үткән "Сығанаҡтарҙан бөгөнгөгә тиклем" исемле күргәҙмәһе һәр кемгә арауыҡ һәм ваҡыт араһында сәйәхәттә булырға мөмкинлек бирҙе.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Әлеге көндә Башҡортостандың Милли музейында "Тамға" башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсы лауреаттарының күргәҙмәһен ҡарарға мөмкин. Ул 2023 йылдың 8 ғинуарына тиклем эшләйәсәк. Билеттарҙы "Пушкин картаһы" менән алырға мөмкин. Шулай уҡ республиканың төп музейында башҡорт халҡының уникаль кейем өлгөләре, милли аш-һыуы, музыка уйын ҡоралдары, тормош-көнкүреш әйберҙәре менән дә танышырға мөмкин.**

**Гөлназ МАНАПОВА.**

*СӘХИФӘНӘН*

# БӨЙӨК КӨС



Воркутанан йыраҡ түгел яңы шахта төҙөргә ебәрҙеләр. 1947 йыл. Беҙҙең бригадала ике мулла ла бар, бер туғандар, ағалы-ҡустылы. Йома көндәрендә намаҙ уҡыйҙар. Уларҙы шуның өсөн, лагерь хужаһы ҡушыуы буйынса, һаҡсылар хәлдәре бөткәнсе туҡмай. Бында эләккәнсе төрлө лагерҙарҙа булғандар. Намаҙ уҡығандары өсөн бер ерҙә лә яратмағандар, береһе лә үҙҙәрендә тоторға теләмәгән. Беҙҙең начальник та уларҙан ҡотолорға уйлаған.

Бер йома көндө теге ике ағалы-ҡустылы туғандар йәнә йома намаҙына бүленгәс, һаҡсылар алты эт алып килде. Ас эттәрҙең олоуы ҡотто алырлыҡ ине. Лагерь хужаһы намаҙ уҡыусыларҙы килтерергә бойорҙо. Тотҡондар тын ҡалдылар, быны нимә аңлатҡанын белә инек беҙ. Алты ас эт уларҙы эҙ тә итмәй ботарлап ашап бөтөрәсәк...

Бына уларҙы алып килделәр: алдан ағаһы, арттан ҡустыһы килә. Теге алты ас этте бәйҙән ысҡындырып ебәрҙеләр. Үҙҙәре янына эттәр сабып килгәндә аңлап, тегеләр уларға ҡаршы боролоп баҫты. Икеһе лә, ҡулдарын өҫкә күтәреп, ирендәрен ҡыймылдаталар. Бына-бына ас эттәр уларҙы өҙгөләп ташлаясағын аңлап, баштарыбыҙҙы аҫҡа эйҙек. Ҡайһы берәүҙәр ҡулдары менән йөҙөн ҡапланы, ҡайһылары, был вәхшилекте күрмәҫ өсөн, боролоп баҫты.

Шул ваҡыт көтөлмәгән хәл булды. Теге икәү янына килеп еткән ас эттәр улар тирәһендә әйләнеп йөрөй башланы. Асыуланып өргән тауыштары тынды, эттәр, хужаларын күргәс, һөйөнөстән сыйнаған тауыш сығара бит, былар ҙа шулай итеп улар тирәләй ҡойроҡ болғап йөрөргә тотондо. Ас эттәрҙең был хикмәттәрен аңлап булмай ине. Бына улар теге ике мулланың аяҡтарын яларға керешеп ките. Эттәрҙең тауыштары тынғас ҡына беҙ тегеләрҙең ниндәйҙер көйгә доға уҡыуҙарын ишеттек. Уларҙың "Аллаһу Әкбар!" тигән тауыштары йөрәктәрҙе телде. Тотҡондар ғына түгел, һаҡсылар ҙа ҡыҫҡырып иланы.

Лагерь начальнигының да йөҙө үҙгәргәйне. Ул бер кемгә бер һүҙ өндәшмәйенсә, китеп барҙы. Бер ҡарауылсы эттәрҙе һыҙғырып саҡырып алды, теге икәүгә башҡалар янына баҫырға ҡушты. Мин аңланым: Бөйөк Көс бар! Тырыша-тырыша Уның юҡлығын иҫбатларға ынтылһалар ҙа, Ул бар! Ер йөҙөндәге барлыҡ көстәрҙе бергә ҡушһаң да, еңеп булмаҫлыҡ Көс бар!..

**Авторы билдәһеҙ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺИМЕРМӘГЕҘ, ЙӘМӘҒӘТ!

■ Оберн университеты ғалимдары ҡыҙыҡлы асыш яһаған. Кеше көндөҙ үҙен бәхетле тойоп йөрөй икән, төндә насар йоҡлай. Тикшеренеүҙәрҙә 17 йәшлек үсмерҙәр ҡатнашҡан. Ғалимдар аҙна буйына смартсәғәттәр ярҙамында уларҙың йоҡоһо тураһында мәғлүмәт йыйған. Һәр иртә үсмерҙәр нисек йоҡлауы, ә кисен көндөҙ ниндәй кәйефтә йөрөүе хаҡында яҙып барған. Һөҙөмтәлә, яҡшы кәйефтәгеләр тынғыһыҙыраҡ йоҡлаған, ә насар кәйефтә булыусыларҙың йоҡоһо тыныс булған, улар оҙағыраҡ та йоҡлаған. Ғалимдар был тикшеренеүҙәрҙе башҡа йәштәгеләр менән дауам итергә уйлай.

■ Сеченов университетының Йәмәғәт сәләмәтлеген өйрәнеү үҙәге 2022 йылда мониторинг үткәреп, рәсәйҙәрҙең артығында артыҡ ауырлыҡ күҙәтелеүен билдәләгән. Тикшеренеүҙәрҙә 2150 кеше ҡатнашҡан, респонденттарҙың уртаса йәше - 45 йәш. 52 процент кешең ауырлығы тейешенән артыҡ, уларҙың 22 процентында һимеҙлек асыҡланған. Бөтөн донъяла был һан - 13 процент. Статистикаға ярашлы, айына килеме 20 мең булған граждандар төркөмөндә артыҡ ауырлыҡтары булғандар 30 процент һәм был категориялағы 30 процент кешелә һимеҙлек күҙәтелә. Шул уҡ ваҡытта, халыҡ үҙен физик йәһәттән ярайһы әүҙем иҫәпләй. 55 проценты аҙнаһына бер нисә тапҡыр спорт менән шөғөлләнә, 74 проценты спорт залына һирәгерәк йөрөй. Әммә ниндәйҙер ауырыу менән, мәҫәлән, диабет менән ауырыусылар араһында физик күнекмә яһаусылар 8 процент ҡына. Тап ауырыу кешеләр өсөн физик әүҙемлек күберәк кәрәк, шул саҡта ғына уларҙың хәле күпкә яҡшыраҡ буласаҡ.

■ Көньяҡ Австралия университеты ғалимдары 60 йәштән үткәндәргә сәләмәт тҡланыу мөһим тип белдерә. Йәшелсәләрҙе күп ашау, үҫемлек майҙары ҡулланыу, шәкәрле ризыҡтарҙан баш тартыусылар араһында когнитив һәм функциональ хәләттәр ҙә юғары кимәлдә һаҡланған. Енесенә, йәшенә, тән ауырлығына ҡарамайынса, быңдай диета тотоп йәшәүселәр үҙ аллы магазинға йөрөү, өй йыйыштырыу, ашарға бешереү кеүек эштәрҙә лә әүҙем булып ҡалған.

■ Табип-инфекционист Евгений Тимаков белдереүенсә, Рәсәйҙә иммун системаһын ҡаҡшатып, өҙлөгөүгә килтереүсе инфекциялар әүҙемләшәүе ихтимал. Ғәҙәти һалҡын алдырып ауырыуҙан һуң да өҙлөгөү барлыҡҡа килеп, менингококк, пневмококк һәм башҡа бактериаль инфекциялар ҡушылыу ҡурҡынысы күбәйә. Табип билдәләүенсә, төрлө инфекциялар, шул иҫәптән менингит менән ауырыуҙар артыуы кешеләрҙең прививка яһатмауы менән бәйле. Бынан тыш, коронавирустан һуң күптәрҙә организмдың иммун һағы үҙгәргән. Йәғни, коронавирус иммунитетты түбәнәйтеп, өлөшләтә уның "хәтер"ен юя. Ябай кисҡен респиратор ауырыу ҙа иммунитетты түбәнәйтә һәм менингококк эләктереү хәүефен арттыра. Ноябрь аҙағында Мәскәү янында Ozon маркетплейсы складыхеҙмәткәрҙәре араһында менингит ауырыуы таралғайны. Улар барыһы ла бер урында ятаҡта йәшәгән. Декабрь башына был сир таралыу хәүефе туҡтатылды, тип хәбәр иттеләр. Менингококк инфекцияһы тиҙ тарала һәм үлем осраҡтары ла юғары. Сирҙән һауығыусылар араһында ишетеү, таныш-белеү һәләттәрен юғалтыусылар күп.

ХӘТЕРКИТАП

# УЛ ЙЫЛДАРҘА ЛА...

## тылдың фронтҡа хеҙмәт иткәне тураһында

**1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ла тыл фашист илбаҫарҙарын еңеүҙә ҙур роль уйнай. Ауыл халҡы фронтты бөтөн кәрәк-яраҡ менән тәьмин итә. Башҡорт АССР-ы хеҙмәтсәндәре, барлыҡ совет халҡы кеүек үк, Ҡыҙыл Армияны матди-техник яҡтан тәьмин итеүгә ҙур өлөш индерә. Башҡортостан Республикаһының Милли архивы фондтарында XX йөҙ йыллыҡтың иң ауыр һыҙ һәм ҡанҡойғос һуғышы ваҡытында тылдағы тормошто сағылдырған документтар һәм материалдар бик күп һаҡлана.**

Бөйөк Ватан һуғышының тәүге айҙарында Ҡыҙыл Армияға Башҡорт АССР-ының эшкә яраҡлы барлыҡ ир-аты тиерлек мобилизациялана. Уларға алмашҡа завод-фабрикаларға, ауыл хужалығына ҡарттар, ҡатын-ҡыҙҙар һәм үсмерҙәр килә. Ҡайһы бер документтарға мөрәжәғәт итәйек. Беренсе документта, 22 июндә Өфө ҡалаһының "Ударник" клубы эргәһендәге майҙанда киске сәғәт 8-ҙә 10 меңдән ашыу кешенең ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә комитеты секретары Георгий Дорофеевтың илебеҙгә Германияның баҫып инеүе тураһындағы сығышын тыңлауы тураһында яҙыла. Хеҙмәтсәндәр үҙҙәренең сығышында еңеүгә ышаныс һәм ҡаҡшамаҫ тәүәккәллек белдерә. "Ил оборонаһын нығытыуға барлыҡ көсөбөҙҙө һәм энергиябыҙҙы бирербеҙ. Илгә күпме кәрәк, шунса иген тапшырырбыҙ!" - ти Дәүләкән районы хеҙмәтсәндәре. Республиканың башҡа район һәм ҡалаларында ла митингылар шундай сәйәси күтәренкелек менән үтә.

Башҡортостанда мобилизация шул уҡ көндә башлана. Кешеләр Ватанды яҡлау һәр граждандың намыҫындағы хәрби бурыс булыуын аңлап фронтҡа китә. Үҙ теләге менән фронтҡа китергә теләүсе ирекмәндәр бик күп була. Был хаҡта факттар дәлилләй. Ҡыйғы районы хәрби комиссариатына беренсе көндә үк 64 ғариза яҙыла, шуларҙың 5-һе - медицина белемле ҡатын-ҡыҙҙан. Бөйөк Ватан һуғышының дөйөм халыҡ характерында булыуын халыҡтың фронтҡа ярҙамы, оборона фонды ойоштороу хәрәкәте лә раҫлай. Кешеләр, үҙ ауыҙынан өҙөп, аҡса, дәүләт займы облигациялары, шәхси ҡиммәтле биҙәүестәрен тапшыра. Фронт һәм тыл бер бөтөнгә әүерелә. "Красная Башкирия" гәзитенең 1941 йылдың 5 ноябрендәге һанында был хаҡта: "Хәҙер хеҙмәтсәндәр башланғысы менән һәр ерҙә Ҡыҙыл Армия өсөн йылы әйберҙәр йыйыу бара. Совет патриоттарының был хәрәкәте мөһим дәүләт бурысына әүерелә. Был эш Белорет, Ишембай, Баймаҡ, Борай, Илеш һәм башҡа районда ра яҡшы ойошторолған", - тип яҙыла.

Һуғыш йылдарында Башҡортостан хеҙмәтсәндәре фронт ихтыяжына 2 миллиард һумдан ашыу ирекле иғәнә тапшыра, бынан тыш, хәрби техника төҙөүгә 2,5 миллиард 500 мең һумдан ашыу аҡса бирә. Ошо иғәнәгә төҙөлгән "Башҡортостан колхозсыһы", "Башҡортостан уҡытыусыһы", "Башҡортостан пионеры", "Башҡортостан нефтсеһе", "Башҡортостан комсомолы", "Белорет металлургы" танк колонналары, "Александр Невский", "Полководец Суворов", "Салауат Юлаев", "Өфө" бронепоезы гитлерсыларҙы аяуһыҙ ҡыра.

1941-1945 йылдарҙа Башҡортостандан ғына фронтҡа 470 мең йылы әйбер, 360 вагон посылка йыйып оҙатыла. Ҡыҙыл Армияның аҙыҡ-түлек фондын ойоштороу тәрән илһөйәрлек сағылышы була. Республика колхоздары һәм колхозсылары был фондҡа пландан тыш 94 мең тонна иген, 47 мең бот ит, 2 мең бот май, 5,5 мең бот бал һ.б. тапшыра. Хеҙмәтсәндәр фронттағы яугирҙарға бүләк итеп 83 мең пар бийма, 21 мең ҡыҫҡа тун, 36 мең ҡолаҡсын бүрек, 300 мең йөн ойоҡ, силғау, бейәләй һ.б. - барлығы 510 мең әйбер ебәрә. Стаханов хәрәкәте көсәйә, хәрби әҙерлекте нығытып, Башҡортостан хеҙмәтсәндәре Ҡыҙыл Армияға арыу-талыуһыҙ ярҙам итә. Завод һәм фабрикалар коллективтары юғары йөкләмә ала, пландан тыш продукция етештереү өсөн эштән һуң да көс түгә.

Мәҫәлән, 3-сө төҙөлөш тресы бригадаһы йөкләмәһен үтәгәнгә тиклем эш урынынан 18 көн буйы китмәй. Өфө ПРЗ-һының ҡаҙансылар бригадаһы һуғышҡа тиклем 12 көндә эшләгән күләмде 3 көндә үтәй. Өфө паровоз депоһы токары И. Федосеев, армияға алынған иптәше өсөн эшләп, көнөнә 4-әр норма бирә. "Ишембайнефть" тресында А. Гончаренко, Ш. Ҡотлозаманов, М. Ҡобағошовтың быраулаусы мастерҙар бригадаһы көн һайын йөкләмәне 200-250 процентҡа үтәй ("Ҡыҙыл Башҡортостан" гәзите ("Красная Башкирия"), 31.10.1941 й.). БашТАСС хәбәр итеүенсә, Өфө тау ҡорамалдары заводы июнда 63 мең һум саф табыш ала, стахановсылар көндәлек нормаларын 312 һәм унан да юғары процент менән үтәй. Быраулаусы (сверловщик) Ғәзизов, токарь Кинйәкәев производство нормаһын 400 процентҡа үтәһә, токарь Батурин ҡайһы бер көндәрҙә хатта 6-шар норма бирә.

Республиканың металлургия сәнәғәте, Дәүләт Оборона комитетынан задание алып, танк, артиллерия заводтары, снарядка әҙерләмәләр өсөн тиҙ арала ҡоростоң ныҡлы сортын сығарыуҙы, машина эшләү һәм металл эшкәртеү предприятиелары миналар, авиабомбалар, төрлө снарядтар һәм башҡа продукция эшләүҙе үҙләштерә. Хәрби машиналар өсөн яғыулыҡ та бик күп талап ителә. Өфө моторҙар эшләү заводы фронттың хәрби техникаһын тәьмин итеү буйынса Бөтә Союз социалистик ярышы инициаторы булып сығыш яһап, хеҙмәт ҡаһарманлығы күрһәтә - Оборона Дәүләт комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын 23 тапҡыр яулай.

Ағас эшкәртеү сәнәғәтенең эре предприятиелары авиация сәнәғәте, артиллерия сеңғылары өсөн фанера эшләүҙе үҙләштерә. Еңел, аҙыҡ-түлек, урындағы сәнәғәт предприятиелары һәм кәсеп кооперацияһы үҙ эшен үҙгәртеп ҡора. Өфө, Ишембай, Черниковка теген фа-

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ӘҘӘМ ЫШАНМАҪЛЫҠ СӘЙӘХӘТ

1944 йыл. Апрель. "Бәләкәй түбә", "Яйыҡ", "Ҡалҡан" колхоздары рәйестәре Ишмәкәй ауылынан Мөхәмәҙи Буранбаевты, Илтабандан Әхмәт Закировты, Ҡалҡандан Фәрзәнә Йоносованы саҡыртып ала. Мөхәмәҙи туғыҙ йәшендә инәйһеҙ ҡалған, тормоштоң әсеһен татырға өлгөргән етем. Бығаса мал ҡарап, ер тырматып, ашлыҡ һуғып, башҡа хужалыҡ эштәрен бөтөрөшкән ун алты йәшлек үсмерҙәргә талап бер үк:

- Ҡустым... һеңлем... Оло ағайҙарығыҙ һуғышта. Ҡайтҡандары ғәрип. Эш кешеләре етешмәй. Дошмандан азат ителгән ерҙәргә мал ҡыуышырға һеҙҙе лә ебәрмәй әмәл юҡ. Иртәгә үк Учалыға заготскотка барығыҙ...

Үсмерҙәр ниндәй оҙон, ҡыйын юлға сығасаҡтарын да белмәй, уны күҙ алдына ла килтермәй. Туйғансы ашарға алырға аҙыҡ-түлеккә ҡыҫаныс. Фәрзәнәгә өйҙән һоло ононан бешерелгән ике йөймә, Мөхәмәҙигә бер нисә һоло күмәсе бирәләр. Әхмәт байыраҡ, уның тоҡсайында - биш килограмм һоло. Үсмерҙәр ошо ризыҡтарын тотоп, өҫтә-



рендә бер ҡат күлдәк-ыштан, бишмәт менән Учалы ауылындағы мал йыйыу урынына юлға сыға.

Яҙ иртәләгән, ҡар иреп бөткән. Азат ителгән ерҙәргә оҙатырға колхоздарҙан тана-торпо йыйылар. Килгән малды ябып, ас тотоп булмай, көтөргә алып сығалар. Шул ваҡытта Фәрзәнә зыяратта бер ябыҡ эттең бала ҡулын кимереп йөрөткәнен күрә. Зыҡ ҡубып, шаулашып, эттән ҡулды һал-

брикалары хәрби кейем, маскировка халаттары, противогаз сумкалары тегә. Яңы Троицк буҫтау фабрикаһы шинель буҫтауы һәм техник туҡымалар сығара. Архангел, Баймаҡ, Борай, Маҡар райондарындағы урындағы сәнәғәт артелдәре саналар, бричкалар, саңғылар, махсус һауыт етештерә.

Һәр урында комсомол-йәштәр фронт бригадалары ойошторола, дошманды еңеүгә ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәре ҙур өлөш индерә. Күмертау районының "Алтын башаҡ" артеле колхозсыһы Анна Чуева уңыш йыйыу барышында көн һайын норма буйынса 400 көлтә урынына 2-3 мең көлтә бәйләй. ("Красная Башкирия", 1941 й., 7 сентябрь, № 212). Ауыл хеҙмәтсәндәре икмәктең дә танк һәм самолет, ҡорал һәм боеприпастар кеүек үк дәһшәтле ҡорал икәнен яҡшы аңлай. Башҡортостанда ла, бөтә ил кеүек үк, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ирҙәр һөнәрен үҙләштереүе киң ҡолас ала. Был инициатива менән Ишембай ҡалаһы ҡатын-ҡыҙҙары сығыш яһай. Шулай итеп, ҡатын-ҡыҙҙар нефтсе, металлург, станоксы, иретеп йәбештереүсе, тимерсе, шофер, балта оҫтаһы, ташсы, монтер булып китә. Һуғыштың тәүге көнөнән үк йәш колхозсылар тракторсылар һәм комбайнсылар курстарына йыйыла, 1941 йылдың июль урталарына уларҙың һаны 13 меңгә етә.

Республикала һәр урында Ҡыҙыл Армияға ярҙамға бөтә халыҡ ополчениеһы төҙөлә башлай. 15 августа уның төркөмдәрендә һәм отрядтарында барлығы 71 273 кеше иҫәпләнә. СССР-ҙың хәүеф аҫтында ҡалған районларынан көнсығышҡа халыҡты, мәҙәни һәм фәнни учреждениеларҙы, аҙыҡ-түлек, сеймал запасын һәм башҡа матди ҡиммәттәрҙе күсереү донъя тарихында тиңһеҙ, ысын мәғәнәһендә ҡаһарман һәм драматик эпопея була.

24 июндә ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә комитеты предприятие һәм учреждениелар эшен хәрби юҫыҡҡа үҙгәртеп ҡороу, госпиталдәр булдырыуға әҙерлек, мобилизацияның тәүге көндәре йомғаҡтары, Өфө нефть эшкәртеү заводында авиация бензинын сығарыуҙы арттырыу, 8 Март исемендәге теген фабрикаһын мобилизация заданиеһын үтәүгә әҙерләү тураһында бер нисә ҡарар ҡабул итә.

26 июндә БАССР Совнаркомы Стәрлетамаҡта В. И. Ленин исемендәге Одесса станоктар эшләү заводын урынлаштырыу тураһында беренсе ҡарар сығара. Шул уҡ көндө ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә комитеты мобилизацияланғандар һәм халыҡ араһында агитмасса эше, тимер юл буйынса хәрби йөк ташыу графигы үтәлеше тураһында һ.б. мәсьәләләрҙе тикшерә. Һуғыш башланғас, Башҡортостанға 172 предприятие эвакуациялана, уларҙа СССР-ҙың көнбайыш республикалары һәм өлкәләренән килгән 300 мең самаһы кеше эшкә урынлаштырыла. Нефть сәнәғәте наркоматы, СССР элемтә һәм дәүләт контроле, Рәсәй Федерацияһының, Украинаның һәм Литваның бер нисә наркоматын урынлаштырыу һәм уларҙың нормаль эшмәкәрлеген тәьмин итеү буйынса бурыс намыҫ менән башҡарыла.

Республикала Украина Фәндәр академияһы һәм Яҙыусылар берлеге, Киев опера һәм балет театры, Мәскәү нефть, медицина, китапхана, Орел педагогия институттары һ.б. эшләй. Башҡортостан территорияһында һуғыш йылдарында эвакуацияланған хәрби уҡыу йорттары дислокациялана, шул иҫәптән: Ҡыҙыл Армия Генераль штабы академияһы, В. И. Ленин исемендәге Хәрби-сәйәси академия, политсоставтың белемен камиллаштырыу курстары, Севастополь зенит-артиллерия, Гомель һәм Рига пехота училищелары, Хәрби-фельдшер мәктәбе һ.б. урынлаша. 1941-1942 йылдарҙа ғына был хәрби-сәйәси белем усаҡтарына, курстарға 5 мең хәрби йүнәлтелә.

Хәрби хәрәкәттәрҙең киң ҡоласлылығы, фронттағы ҙур юғалтыуҙар яу ялаһына яңынан-яңы резерв оҙатыуҙы талап итә. Һуғыштың тәүге айҙарында уҡ республикала запас һәм күнекмә хәрби частары ойошторола, улар хәрби бурыслылар иҫәбенән фронт өсөн резерв әҙерләй. Башҡортостан территорияһында 112-се (16-сы гвардия), 74-се, 76-сы, 113-сө Башҡорт кавалерия дивизиялары, айырым уҡсылар бригадаһы, Салауат Юлаев исемендәге танкка ҡаршы айырым Башҡортостан истребитель полкы һ.б. формалаштырыла. Дәүләт Оборона комитеты ҡарары нигеҙендә 1941 йылдың август-сентябрендә Әлкә ауылында 17-се запас уҡсылар бригадаһы ойошторола, ул бер нисә тапҡыр үҙгәртеп ойошторолоуҙан һуң 1944 йылда 12-се запас уҡсылар дивизияһы булып китә. Һуғыш йылдарында уның частарында һәм подразделениеларында 225,5 мең яугир әҙерләнә. Предприятиелар һәм учреждениелар формалаштырылған хәрби берләшмәләр һәм частарҙы шефлыҡҡа ала. Уларҙы транспорт саралары, төҙөләш материалдары, эш ҡоралдары менән тәьмин итә, ашханалар, клубтар йыһазландырырға ярҙамлаша. Мәҫәлән, 112-се Башкавдивизия өсөн республика хужалыҡтарынан 13 меңдән ашыу ат, егеү кәрәк-ярағы, кейем-һалым, фураж һ.б. тапшырыла.

112-се кавдивизияның "Ҡыҙыл атлылар" гәзите 87-се һанында яҙыуынса, бынан 80 йыл элек, 1942 йылдың 3 ноябрендә дивизияға Башҡорт АССР-ының хөкүмәт делегацияһы бара. Митингыла БАССР Совнарком Рәйесе Мөхит Вәлшин сығыш яһай. Ул кавалеристарға ҡайнар сәләм һәм башҡорт халҡының наказын еткерә, ҡыҙыл атлыларҙы артабан да ҡостәрен йәлләмәй тыуған илде фашист илбаҫарҙарынан яҡларға саҡыра. Үҙенең тәбрикләү һүҙендә БАССР-ҙың халыҡ артисы Бәҙәр Йосопова яугирҙарҙың әсәләре, ҡатындары, балалары, һеңлеләренән ялҡынлы сәләм еткерә. Һуңынан дивизия яугирҙары Сибаев, Нафиҡов, Әлибаев, Нәзиров, Белов сығыш яһай. Сығыштарҙы башкавдивизияның политругы Нәзиров йомғаҡлап ҡуя. Ул Башҡортостан халҡына сәләм әйтә һәм бай бүләктәре өсөн рәхмәт белдерә. Кавалеристар: "Беҙ уларҙың наказын үтәрбеҙ. Дошманды еңеп ҡайтырбыҙ!" - тип ышандыра.

Генерал-майор, бынан ике йыл элек Рәсәй Геройы исеменә лайыҡ булған Миңлегәле Шайморатов етәкселегендәге легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының ҡыйыу яугирҙары Тыуған илгә биргән антына тоғро ҡала. Күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн дивизия 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы тип үҙгәртелә. 3860 яугир орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә, уның сафынан 78 Советтар Союзы Геройы сыға, биш яугир Дан орденының тулы кавалеры була. Тап ошо дивизия СССР-ҙың ҡоро ер ғәскәрҙәре араһындағы дивизияларҙан иң күп Советтар Союзы Геройын бирә.

Шулай итеп, бөтә республика - олоһо-кесеһе - Еңеү көнөн бер сафта фиҙаҡәр хеҙмәт менән яҡынайта. Башҡортостандың күп милләтле хеҙмәт фронты фашистик Германияны еңеүгә ҙур өлөш индерә. Быны 2020 йылда Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Өфөгә "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" маҡтаулы исемен биреү тураһындағы Указы ла раҫлай.

**Ниязбай СӘЛИМОВ,**
**Башҡортостан Республикаһының Милли архивы директоры урынбаҫары.**

дырып алалар һәм ерләйҙәр. Күрәһең, бала үлгәс, ҡышҡы ҡаты һыуыҡта туң ерҙе соҡоп ҡәбер ҡаҙырлыҡ та ир-ат булмаған. Әле ас эт арлы-бирле күмелгән мәйеттең ҡулын умырып алған, һуғыш юҡ ерҙә ошондай йән өшөткөс күренеш, ә яу ҡырҙарында хәлдәр ҡот осҡостор инде.

Яйыҡ буйында ла халыҡ ас-яланғас көндәр кисерә, үҫтергәнде-йыйғанды фронтҡа оҙата, әле ҡара ергә баҫыуҙы дүрт күҙ менән көтә. Шулай ҙа башҡорттар бөлгөнлөккә төшкән колхоздарынан, үҙ ауыҙҙарынан өҙөп, илбаҫарҙарҙан хәтһеҙ ҡаза күргәндәргә, донъяһыҙ тороп ҡалғандарға ебәреү өсөн дүрт йөҙ баш самаһы тана-торпо йыйҙы. Бәлә-ҡаза күргәндәргә, ҡайғы кисергәндәргә ярҙам ҡулы һуҙыу башҡортта әүәлдән килгән изге йола. "Кешегә шәфҡәт ит, уҙаманға хөрмәт ит" тигән аманат әйткән олатайҙар. Ә һыйыр биреү ғәйәт ҙур шәфҡәт. Һыйыры барҙың һыйы бар бит.

Ошондай шәфҡәт өсөн тупланған мал өс көтөүгә бүленеп, һәр көтөүҙе ете кеше оҙата барырға тейеш була. Гуртоправтар, йәғни көтөү башлыҡтары итеп Әһел Мөбәрәков, Ғәбиҙулла Кәлимуллин, Петр Петухов тәғәйенләнә. Таныулы булһын, юғалмаһын өсөн таналарға тамға һуғыла. 5 апрелдә, төштән һуң, егерме бер кеше өс көтөүҙе әйҙәп, меңәр-меңәр саҡрымлыҡ юлға сыға. Әйҙәүселәр йәйәү. Тик сиған арбаларына оҡшатып тауар менән көпләнгән алты арбаға аттар егелеп, юл кәрәк-ярағы тейәлгән, бер мылтыҡ та һалынған. Баш осонда ҡыҙыл әләм елберҙәй. Ағас күсәрле башҡорт арбалары гәжәп ныҡ булған икән, ҡырылмай-нитмәй Украинаға хәтле тәгәрәй...

...Мең ғазап сигеп, малды Украинаға алып барып еткергән кешеләрҙе миҙал, орденға тәҡдим итеү түгел, уларға рәхмәт белдереүсе лә булмай. Киреһенсә, юлда зыянлаған өс танабашмаҡтың хаҡын түләтә уларҙан заготскот. Һуғыштан һуң еңеү көндәрен байрам иткәндә лә был ҡаһарманлыҡты иҫкә алыусы, билдәләүсе табылмай. Мәжлес-ҡунаҡта һүҙҙән һүҙ сығып, ошо турала яҡташтарына һөйләһәләр - ышанмайҙар.

...Башҡортостандың азат ителгән өлкәләргә, Украинаға эскерһеҙ ярҙамы, халҡыбыҙ тарихының онотолмаҫҡа тейешле был үткәне "Башҡортостан тарихы буйынса очерктар" китабында (11 том), "Красная Башкирия" (1944 йыл, 24 һәм 31 май, 14 июль), "Ҡыҙыл Башҡортостан" (1944 йыл, 31 май һәм 4 август) гәзеталарынан алынған мәғлүмәттәр нигеҙендә бер нисә һөйләм менән генә яҡтыртылған: "Республика байтаҡ ҡына азат ителгән өлкәләрҙең һәм ҡалаларҙың халыҡ хужалығын тергеҙеүгә ярҙам күрһәтте. Башҡортостан Украинаның Ворошиловград өлкәһенә шефлыҡ итте. 1943 йылда уға 90 вагондан ашыу промышленность ҡорамалдары һәм ауыл хужалығы кәрәк-яраҡтары ебәрелде. Курск, Ворошиловград, Ленинград, Смоленск, Воронеж, Харьков өлкәләренең малсылығын тергеҙеүгә Башҡортостандың колхоз крәҫтиәндәре 1943-1944 йылдарҙа 146 мең баш мал ебәрҙе, шул иҫәптән 8736 эш аты, 15739 һыйыр малы, 21671 һарыҡ.

Ә ошо ҡыҫҡа ғына мәғлүмәт, һандар ышығында күпме ваҡиғалар, хәлдәр, кеше яҙмыштары...

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**"Ғүмер артында - ғүмер" китабынан өҙөк.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Һеҙҙең хәлегеҙҙән килә торған ғәмәлдәр

Әгәр маҡсаттарығыҙ әҙәми икән, һеҙ уларға өлгәшәсәкһегеҙ. Ғаләмдә үҙ яғына бороу мөмкин булған башҡа көс юҡ. Һеҙ Аллаһы Тәғәлә менән бер командала ҡалаһығыҙ, уның менән берлек усағы тоҡандыраһығыҙ, көндән-көн уның ҡайнарлығын тояһығыҙ.

Ҡарағыҙ, Аллаһы Тәғәлә нимәгә һәләтле! Миллион йылдар элек таштар күҙәнәктәргә, тере йән эйәләренә әүерелгән. Ваҡыт үткәс, шул таштар кешегә әйләнгән, кеше хатта Айға осҡан. Әгәр шундай нәмәләрҙе атҡарып була икән, улар менән сағыштырғанда һеҙҙең маҡсаттарығыҙ - ябай ғына. Нисек сәләмәтлек? Проблема юҡ. Банкта аҡса? Әле үк иҫәптә ята. Бәхетле ғаилә? Ниндәй ауырлыҡтар бар? Эштә уңыш? Әҙер. Аңдың тыныслығы? Бынан да ябай бер нәмә лә юҡ. Һайлауҙарҙа еңеү, ниндәйҙер уйында оҫтарыу ниәте нисек? Әҙер, әҙер, әҙер... Тормошоғоҙ барлыҡ ауырлыҡтарҙан азат.

Мин Аллаһы Тәғәләнең һәләттәренә аптырауҙан туҡтай алмайым. Мин осон-осҡа саҡ ялғаған страховка агентының нисек итеп финанс уңышы бейеклегенә күтәрелеүен күрҙем. Мин аяғына ир-егеттәр "йығылған" илле йәшлек тол ҡатынды күрҙем. Мин урам малайынан уңышлы эшҡыуарға әйләнгән үсмерҙе беләм.

Әгәр үҙем ояласан, һаҡау малайҙан ысын яҙыусыға, бөтөн донъяға билдәле лектор һәм консультантҡа тиклем юл үтмәһәм, был китапты яҙа ла алмаҫ инем. Был эгоистик кәперенеү түгел, ә үҙ командамдың капитаны хөрмәтенә лайыҡлы маҡтау.

### Ғалимдар яйлап Аллаһы Тәғәлә яғына сыға

Ғалимдар йөҙәр йылдар ҡулланған төп күҙаллауҙар, парадигмалар яйлап үҙгәрә. Ньютондың иҫкергән ҡарашы Эйнштейндың яңы ҡарашы менән ҡыҫырыҡланды. Сағыштырып ҡарағанда, ул шулай күренер ине:

Ньютон: Донъя-өлөшсәләрҙән торған материя.

Эйнштейн: Донъя материя формаһында "ҡатырға" һәләтле энергетик полеларҙан тора.

Ньютон: Мейе, бөтөн тән буйынса таралған сигналдар кешелек аңының үҙәге булып тора.

Эйнштейн: Кешелек аңы - тотош йыһанды тултырған Дөйөм Аңдың бер өлөшө.

Ньютон: Беҙҙең тәндәребеҙ ирекле, бойондороҡһоҙ.

Эйнштейн: Беҙҙең тәнебеҙ дөйөм тәндең бер өлөшө булып тора.

Ньютон: Тәбиғәт ҡанундары үҙгәрешһеҙ.

Эйнштейн: Кеше аңы тәбиғәт ҡанундарын үҙгәртергә һәләтле, сөнки кешеләр дөйөм төҙөүҙә ҡатнаша.

Ньютон: Беҙ - рухиәтле булырға тырышҡан кешеләр.

Эйнштейн: Беҙ- кеше булырға тырышҡан рухиәтле йәндәр.

Әйҙәгеҙ, ғалимдарҙың прогресын алҡышлайыҡ. Бер заман улар ҙа беҙҙең кимәлгә етер, әммә был беҙҙең бер урында ҡатып ҡалырға тейешлекте аңлатмай...

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ДЕКАБРЬ ЮБИЛЯРҘАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**49-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡумта. Аҡмулла. Шәфәҡ. Мулла. Ҡомаҡ. Сәйхана. Өҫтәл. Ҡамыр. Апрель. Театр. Йод. Алтын. Иҙел. Ауыҙ. Мораҡ. Елкән. Ом. Таяҡ. Сауҙа. Рәсүлев. Теорема.

**Вертикаль буйынса:** Өмөтбаев. Математик. Литр. Ант. Айыл. Арарат. Асҡар. Ҡамыш. Йоҙаҡ. Дәүер. Фәхретдинов. Мәрке. Ата. Ҡаҡ. Алмас. Ауыл. Ынйы. Ҡар. Нуҡта.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Декабрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (3) дүшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:07 | 16:51 | 18:21 |
| 27 (4) шишәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:08 | 16:51 | 18:21 |
| 28 (5) шаршамбы | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:09 | 16:52 | 18:22 |
| 29 (6) кесе йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:09 | 16:53 | 18:23 |
| 30 (7) йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:10 | 16:54 | 18:24 |
| 31 (8) шәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:11 | 16:55 | 18:25 |
| 1 (9) йәкшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:12 | 16:56 | 18:26 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҮӘТ ӘЙ!*

# РАДИО... КҮРҺӘТӘ

**"Юлдаш" радиоһы коллективы тәүге тапҡыр спектакль сәхнәләштерҙе, ә республиканың төп телеканалы уның буйынса кино төшөрҙө. "БуранФМ" - йәш ғаилә, мөхәббәт һәм ябай кешеләр яҙмышында "Юлдаш" радиоһының уйнаған роле тураһында.**

Коллектив көн дә 24 сәғәт эфир уҙғарған арала ике ай дауамында спектакль әҙерләп, 30 июндә уны "Башҡортостандың иң әүҙем ауылы" конкурсында еңгән Әбйәлил районы Күсем ауылы клубында халыҡ хөкөмөнә сығарҙы. Спектаклдең телеверсияһында ролдәрҙе төрлө бүлек мөхәррирҙәре, реклама һәм СММ белгестәре, алып барыусылар, тауыш режиссерҙары башҡарҙы. Төп ролдәрҙә - "Теге өсәү" проекты алып барыусылары. Спектакль 26 декабрҙә "Родина" кинотеатрында күрһәтелә. Киске сәғәт 7-лә башлана, инеү ирекле.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**26-27 декабрь "Алтын асҡыс - Remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. 10.00, 12.00 6+

**28-29 декабрь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 10.00, 12.00 6+

**30 декабрь "Алтын асҡыс - Remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. 10.00 6+



## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**26 декабрь "Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 11. 00, 13.00, 15.00 0+

**Премьера! "Холодное сердце"** (В. Гауф), әкиәт. 10.00, 12.00 6+

**"Ҡыш бабай и Дед Мороз",** Яңы йыл тамашаһы. 12+

**27 декабрь Премьера! "Холодное сердце"** (В. Гауф), әкиәт. 10.00, 12.00, 15.00 6+

**"Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 11. 00, 13.00 0+

**28 декабрь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 10.00, 12.00 0+

**"Зимняя небылица"** (А. Горбунов), әкиәт. 11.00, 13.00 0+

**29 декабрь "Холодное сердце"** (В. Гауф), әкиәт. 10.00, 12.00 6+

**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), Яңы йыл әкиәте. 11.00, 13.00 0+

**30 декабрь "Новый год наоборот"** (И. Казакова), Яңы йыл әкиәте. 12.00 0+

**"Ҡыш бабай и Дед Мороз",** Яңы йыл тамашаһы. 16.00 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26, 27, 28, 29, 30 декабрь "Главный Новогодний утренник Уфы"** - "Урал батыр и Три богатыря" эпик әкиәт. 11.00, 13.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*

**29 декабрь Премьера! "Щелкунчик"** (А. Гофман, Ю. Ким инсц.). 12.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**26-29 декабрь Премьера! "Сказка о рыбаке и рыбке"** А.С. Пушкин, Л. Ниғмәтуллина инсц.), Яңы йыл тамашаһы. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**26-30 декабрь "Самый вкусный Новый год"** (Т. Ғилманова), әкиәт. 10.00, 13.00, 18.00 0+

**"Нарру Яңы йыл в сказочном царстве"** спектакле менән

**27 декабрь** Әбйәлил районында Гусево ауылында сәғәт 10.00, 11.30, 13.30, 15.30;

**28 декабрь** Красная Башкирия ауылында сәғәт 10.00, 12.00, 13.00, 16.00;

**29 декабрь** Баймаҡ районы Темәс ауылында сәғәт 10.00, 12.00, 14.00 гастролдәр. 0+

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ

# "ҠЫҘЫЛ ПАША"...

## Ватанына ҡайтты



**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры йәнә Нәжиб Асанбаевтың "Ҡыҙыл паша" пьесаһына мөрәжәғәт итте һәм әлегә ике тапҡыр ғына күрһәтелеп өлгөргән өр-яңы спектаклде меңдән ашыу кеше тамаша ҡылып, һөҡланыуҙарын белдерҙе.**

Сәғүд Ғәрәбстанында һәм Яҡын Көнсығыштың тағы бер нисә илендә СССР-ҙың беренсе тулы хоҡуҡлы вәкиле булған, партия һәм дәүләт эшмәкәре Кәрим Хәкимовтың тормош юлы тураһындағы спектакль иң тәүҙә уның тыуған яғында - Бишбүләк районында күрһәтелде. Театрҙың ижади төркөмө өсөн был үҙенә күрә бер һынау ҙа булды, ни тиһәң дә, тарихи шәхестең яҡташтары алдында сығыш яһау һәр саҡ тулҡынландырғыс та, оло яуаплылыҡ та өҫтәй. Спектаклдең ҡуйыусы режиссеры, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Айрат Абушахманов әйтеүенсә, йәйгеһен ижади төркөм менән Кәрим Хәкимов музейын ҡарарға килгәндә үк спектаклде башлап Өфөлә түгел, нәҡ Бишбүләктә уйнарға ҡарар ителә.

- Кәрим Ғәбдрәүф улының яҡташтарына спектаклде йылы ҡабул итеүҙәре һәм оло ижади юлға фатиха биреүҙәренә рәхмәтлебеҙ. Премьераны төп геройҙың тыуған ерендә уйнау маҡсатыбыҙ бойомға ашырылыуына ла шатбыҙ, - тип тәьсораттары менән бүлеште Айрат Абушахманов. - Спектаклде Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров янынан тергеҙергә тәҡдим иткәйне, күп тә үтмәй, беҙ был эште башланыҡ һәм ул бының өсөн театрға рәхмәтен дә белдергәйне. Шуға спектаклде сәхнәгә сығармай ҡалдыра алманыҡ. Хәкимовтың шәхесе бөгөнгә тиклем тулыһынса өйрәнелеп бөтмәгән, уның СССР-ҙа ғына түгел, бөтә донъя кимәлендә ниндәй әһәмиәтле шәхес булыуын да аңлап етмәйбеҙҙер. Спектакль Нәжиб Асанбаевтың үткән быуатта сәхнәләштерелгән пьесаһына нигеҙләнеп ижад ителде. Әммә унда геройҙың бала сағы тураһындағы өлөш юҡ ине. Йәйгеһен музейҙы барып күргәндән һуң уның тормошонон ошо мөһим осорон да өҫтәргә ҡарар итек. Спектакль өҫтөндә енел һәм ҡыҙыҡһынып эшләнек, сөнки Кәрим Хәкимовтың тормош һәм хеҙмәт юлы уғата заманса, бөгөн дә көнүҙәк.

Ғәрәп илдәрендә илсе булған совет дипломаты Кәрим Хәкимов тураһындағы легендар пьеса тәүге тапҡыр Башҡорт академия драма театрында 40 йыл тирәһе элек сәхнәләштерелгән. Яңы сәхнә әҫәре иһә, геройҙың туғандары һәм Бишбүләк районы Дүсән ауылындағы музей хеҙмәткәрҙәре менән тығыҙ бәйләнештә эшләү һөҙөмтәһендә, уның тормош юлы һәм эшмәкәрлегенә ҡағылышлы өҫтәмә мәғлүмәттәр менән тулыландырылған. Сәхнәләштереү авторҙары - Айрат Абушахманов һәм БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Динара Ҡәйүмова, ҡуйыусы рәссам - Альберт Нестеров, композитор - Рәмис Хәкимов, хореограф - Алина Мостаева, видеограф - Руслан Юлтаев. Төп ролде Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, талантлы актер Азат Вәлитов башҡара.

"Сәхнәлә дипломатты уйнауы ауыр, сөнки был һөнәр кешеләренең барлыҡ кисерештәре күнел төпкөләнә йәшерелгән һәм уларға хис-тойғоларын күрһәтергә һис ярамай. Ә сәхнәлә нәҡ тойғолар мөһим. Бына шунда сағыла ла инде уның ауырлығы. Мин тәүге тапҡыр уның тураһында документаль фильм ҡарағас, хайран ҡалдым. Ул шундай үҙенсәлекле, бөйөк, күнел донъяһы бай шәхес. Уның шул заманда СССР өсөн эшләгән барлыҡ эштәре бөгөн дә көнүҙәк. Уның кеүек кешеләр әлегә тиклем яңынан донъяға тыумағандыр кеүек тойола миңә. Һәм шундай яҡташыбыҙ булыуы менән ғорурланам", - тине Азат Вәлитов.

Быйыл Кәрим Хәкимовтың тыуыуына 130 йыл тулды. Пьесаны яңынан сәхнәләштереү шәхестең илебеҙ тарихында ниндәй ҙур роль уйнауын тағы бер тапҡыр хәтерҙәребеҙгә төшөрҙө. Спектаклдең тәүге тамашасылары араһында Бишбүләк районы хакимиәте башлығы Артур Зарипов, ауылдаштары һәм туғандары ла булды. "Беҙ Лек Вәлиевтың Нәжиб Асанбаев пьесаһы буйынса ҡуйған спектаклен ҡарап үҫтек. Әммә бөгөнгө премьера - ул бөтөнләй икенсе тарих. Көнелдәрҙең һәм йөрәктәрҙең төпкөләнә үтеп инде. Ижади төркөм Кәрим Хәкимовты художестволы күҙлектән бөтөнләй икенсе кеше итеп күрһәтә алған. Бында ул хәҙерге заманға яҡынлараҡ. Был үҫеп килгән быуынды тәрбиәләүҙә оло әһәмиәткә эйә. Спектакль оҙон ғүмерле булһын һәм уны күберәк тамашасылар яратып ҡараһын", - тип теләк-тәьсораттары менән уртаҡлашты илсенең дүртенсе быуын ир туғаны Наил Ғабдулла улы Ғатауллин.

Спектаклдә бер-ике йыл элек институт тамамлап, театрҙа эшләп йөрөгән йәштәр ҙә, күптән инде тамашасы һөйөүен яулап өлгөргән өлкән быуын актерҙары ла ҡатнаша. Кәрим Хәкимовтың ҡатыны Хәҙисә ролендә Сабина Кирәева һәм Илгизә Ғилманова, уның әсәһен - Гөлназ Хайсарова, ә төп геройҙың бала һәм йәш сағын Линар Бәйетов уйнай. Фейсал әмир ролендә Руслан Хайсаров, Солтан - Артур Кәбиров, табип Вера - Әлфирә Зәһизуллина, министр Әбүбәкер - Морат Рафиҡов, В.И. Ленин - Руслан Ғәлимов, Г.В. Чечерин - Айҙар Шәмсетдинов, Лоуренс Аравийский - Артур Ҡунаҡбаев, Ғүмәр Иҙриси - Фәнис Рәхмәтов. "Ҡыҙыл паша"ның тәүге ҡуйылышында Хөрмәтулла Үтәшев һаҡсы ролен башҡарһа, был юлы ул Ғәбдел Ғәзиз ибн Сәғүд батша. "1982 йылда СССР-ҙың Үҙәк каналы спектаклдең телевизион версияһын яҙҙыртып алыуы хәтеремдә. Уны бөтә ил ҡараны шул саҡта. Был сенсация ине. Һәм бына 40 йыл үткәс, беҙ спектаклде яңынан сәхнәгә ҡайтарабыҙ. Тимәк, шулай кәрәк булған һәм халыҡ, бигерәк тә йәш быуын, үҙ геройҙарын танып белергә тейеш", - тине Хөрмәтулла Ғаззали улы.

Әйткәндәй, баш ҡала тамашасылары "Ҡыҙыл паша" спектаклен 2023 йылдың 3 февралендә ҡарай аласаҡ.

**Ирина ЗАХАРОВА.**

---

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӘКӘЛӘР ҺӨҘӨШКӘНДӘ...

## кәзәләр ял итә

Этте иркәләтһәң - иренең ялар, түрәне иркәләтһәң - илең талар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йылмайған ҡыҙ-ҡатынға һәм илаған ир-егеткә ышанма һис.

**(Көнсығыш мәҡәле).**

Күктән алтын тәңкәләр яуыуы ла нәфселенең мәйелен ҡандырмаҫ. Нәфсе - ул сир һәм унан бер ниндәй ҙә шатлыҡ көтөү мөмкин түгел икәнен аңлаған кеше аҡыл эйәһе булыр.

**(Будда).**

Ҡарттарҙы әрләмәгеҙ: беҙҙең һәр беребеҙ ҡартлыҡҡа тиклем йәшәргә ынтыла бит.

**(Бион Борисфенит).**

Һорауыңды кире ҡағыуҙарын теләмәһәң... һорама ла ҡуй.

**(Джон Драйден).**

Йәшлек тиҙ генә үтеп китә торған ауырыу һымаҡ ул.

**(Иоганн Вольфганг Гете).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡарт бүре үҙе урынына өйөр башлығы һайларға уйлай. Иң ҡыйыу тип иҫәпләгән тоҡомдашы янына килә лә:**

**- Мин ҡартайҙым, һине өйөр башлығы итеп тәғәйенләргә уйлайым. Тик һин уға лайыҡлы икәнлегеңде иҫбатларға тейешһең. Бының өсөн иң көслө бүреләрҙе ал да, барыһына ла етерлек аҙыҡ алып ҡайт, - тигән.**

**Яңы башлыҡ алты дуҫын ала ла һунарға китә. Кисен барыһы ла имен-аман, өйөрҙә туйындырырлыҡ ризыҡ менән ҡайта. Өйөр башлығы:**

**- Һөйлә әле, нисек итеп берегеҙ ҙә зыян күрмәй, өҫтәүенә, бөтәһенә лә етерлек табыш менән ҡайттығыҙ?**

**- Беҙ һунарҙан ҡайтып килгән ун һунарсыны осраттыҡ. Беҙ уларға һөжүм иттек, табыштарын тартып алдыҡ, - тип яуап бирә.**

**- Афарин, бик яҡшы. Иртәгә лә һунарға сығырһығыҙ, - тигән.**

**Яңы башлыҡ тағы теге алты дуҫын ала ла юлға сыға. Тик өйөр уларҙы кисен дә, иртәгәһен дә көтөп ала алмай. Яңы башлыҡ өсөнсө көнгә саҡ атлап яңғыҙы ғына әйләнеп ҡайта.**

**- Табыш эҙләп, урман эсенә индек. Ҡаршыбыҙға өс һунарсы осраны. Уларға һөжүм иттек, әммә улар беҙҙән көслөрәк булып сыҡты...**

**- Нисек инде? - тип аптырай Ҡарт бүре. - Тәүгеһендә һеҙ ун һунарсыны бик еңел еңдегеҙ, ә бынһында өсәүгә ҡаршы тора алмағанһығыҙ?**

**- Эйе. Тик тәүгеһендә һунарсылар ғына ине. Ә бынһында - иң яҡшы өс дуҫ ине! - тип яуап биргән яңы башлыҡ".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Сәриә ГАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башкортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 23 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3540
Заказ - 1625

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.